ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9-15 октябрь (карасай) 2021

№41 (979)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 4 октябрҙән 14 октябргә тиклем гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән арзаныраҡҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡала-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 642 һум 38 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең киләһе йыл буласаҡ 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ни өсөн вакцина эшләттем?**



3

**Ноғман Мусин феномены**



6

**Балалар хирургияһы...**

ҡатын-ҡыҙ эшеме?



8-9

**Ырымбур губернаһы тарихынан**



12-13

**ТВ-программа** 14

РӘСМИ ХӘБӘР

## БАЙРАМ КИЛӘ, БАЙРАМ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2021 йылда Республика көнөнә әҙерләнеү һәм уны үткәреү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Документ республиканың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған.**

Билдәле булыуынса, республика законына ярашлы, 11 октябрҙә Республика көнө - Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеү көнө билдәләнә. Радий Хәбиров ошо дата уңайынан байрам саралары планын әҙерләргә һәм раҫларға ҡушты. Муниципалитеттарға "учреждениеларҙы, урамдарҙы, майҙандарҙы, йәмәғәт биналарын Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт символикалары менән байрамса биҙәргә тәҡдим ителде", тиелә документта. Тантаналы саралар санитар-эпидемиологик талаптарҙы үтәп ойоштороло рға тейеш, тип билдәләнә.

Республиканың ҡала-райондары хакимиәттәренә "тораҡ пункттарҙа йәрминкәләр үткәреү, күсмә байрам сауҙаһын ойоштороу" бурысы йөкмәтелде.

"2021 йылдың 11 октябрендәге байрам дүшәмбегә тап килә, - тип белдерҙеләр Хеҙмәт министрлығында. - Шулай итеп, биш көнлөк эш аҙнаһында 2021 йылдың 9, 10 һәм 11 октябре ял көндәре булып тора".




ШАҒИР ҺҮҘЕ

## ДАН ҺИҢӘ, ДАН, БАШҠОРТОСТАН!

Күк Уралдың иркен күкрәгендә
Азат шоңҡар ғорур осҡанын
Ҡарайым мин сикһеҙ шатлыҡ менән:
Дан һиңә, дан, Башҡортостаным!
Егет ҡулы тейһә, ер майы ла
Ете ҡаттан ата фонтанын.
Ҡотлайым мин халҡым егетлеген:
Дан һиңә, дан,Башҡортостаным!
Тупрағы ла алтын тыуған ерҙең,
Ҡулдарында булһа оҫтаның.
Ҡыҫайым мин оҫта ҡулдарынды:
Дан һиңә, дан, Башҡортостаным!

**Рәми ҒАРИПОВ.**

## БАРСА ЙӘМДӘР БЫНДА

Оҡшаш урман, тауҙар тәңгәленән
Башҡортостан сиген үткәндә,
Тотош донъя ҡапыл балҡып китә,
Барса йәмдәр бында күскәндәй.
Был тупраҡҡа һеңгән халҡым моңо,
Батырҙарҙың эҙе уйылған,
Ямғыр ғына түгел, ул халҡымдың
Күҙ йәштәре менән йыуылған.
Бында торналарға, бөркөттәргә
Халҡым рухы барып ҡушылған,
Үҙ туғанын аяй белмәгәндәр
Саҡ менән Суҡ тигән ҡош булған.
Елдәрендә ҡурай тауышы бар,
Ауазы бар унда ҡумыҙҙың,
Айға менеп баҫҡан Зөһрә ҡыҙы,
Үләнендә - тәме ҡымыҙҙың.
Һәр бер йылға тарих булып аға,
Йөрәк тибеп ҡуя һулҡылдап,
Уҡтың һыуы аша сыҡҡан саҡта
Уҡтай сая һаман тулҡындар.
Был тәбиғәт - башҡорт бейеүендә,
Был тәбиғәт - башҡорт көйөндә,
Күпме гүзәллек һәм мөһәбәтлек,
Башҡортостан, һинең йөҙөндә!

**Йомабикә ИЛЬЯСОВА.**

## УРАЛЫМ КҮКРӘГЕНДӘ...

Мондарымдың моңо һиңә,
Башҡортостан - төйәгем һин.
Һиндә тыуып, һиндә үҫтем,
Берҙән-берем, йөрәгем һин.
Һулап туймаҫ - һауаларың,
Йомарт ерең - иҫ китмәле!
Байлығыңды һанар өсөн
Белеп торам һүҙ етмәҫен.
Баҫыуҙарың, диңгеҙ төҫлө,
Иҫкән елгә тулҡын һирпә.
Башын эйгән башаҡтарҙа
Бөртөк-бөртөк йәшәү тиртә.
Хазинаға, Башҡортостан,
Һәр тарафың һинең тулы.
Ҡабынғанһың Уралымдың
Күкрәгендә йондоҙ булып.
Уйымда һин, ҡанымда һин,
Башҡортостан - ғәзиз әсәм.
Киң ватандан ҡеүәт алып,
Мәңге балҡы, мәңге йәшә!
Башҡортостан - ғәзиз әсәм.

**Рәмил ЙӘНБӘК.**

## БӨЙӨК ТАМҒА

Башҡортостан Гербы, һиндә илдең
Киләсәккә йөрәк ҡағышы,
Быуаттарҙан-быуаттарға килгән
Халҡыбыҙҙың өмөт, намыҫы.

Башҡортостан Гербы - бөйөк тамға,
Халҡымдың бит һиндә асылы.
Һин генә бит беҙгә бар донъяла
Аҫылдарҙан иң-иң аҫылы.

**Әхмәҙин ӘФТӘХ.**

12+

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!



# БАЛЫҠСЫЛАРҒА ӨНДӘШӘМ...

**Минең аҡса эшләү ысулым ир-егеттәргә ҡулайлы. Әлбиттә, еңелдән түгел, ләкин тырышҡанда килемле генә шөғөл. Шәхсән минең өсөн ул төп эш урыным, сөнки тик ошо юл менән аҡса эшләйем.**

Ҡышҡаһы, балыҡ, ҡыҫала тотоп һатам. Йылғаҡүлдәрҙән, һыуһаҡлағыстарҙан тотоп алып ҡайтып, Өфө халҡына тәҡдим итәм. Заказдар һәр ваҡыт бар, килограмлап та, күмәртәләп тә һатып алалар. Бигерәк тә суртан балыҡҡа һорау ҙур һәм шулай уҡ тере ҡыҫала ла үтемле. Тағы ла суҙаҡ (һыла) балығы ҙур һорау менән файҙалана. Суртандың һәм ҡарабалыҡтың килоһын 250 һум менән, ҡыҫаланы, ҙурлығына ҡарап, килограмын 600-1500 һумға, суҙаҡты, шулай уҡ килограмлап, 400 һумға һатам. Күмәртәләп алыусыларға бонус итеп табан балыҡ һәм йәйен бүләк итәм.

Беҙҙең төбәктә тере ҡыҫаланы өҫтәлгә ҡуйыу әллә ни киң таралмаған, әлбиттә, шулай ҙа байрам табындарына, туй мәжлестәренә, юбилейҙарға йыш һатып алалар. Ҡыҫаланың ите тәмле булһа ла, бөрөүҙән ите бик әҙ сыға, шуға күрә ҙур байрамдарға алынған ҡыҫала күләмен күҙ алдына баҫтырыуы ҡыйын түгел. Ҡыҫаланы күп осраҡта Түбәнге Кама һыуһаҡлағасында тотам, балыҡтарҙы төрлө йылғаларҙа эләктерәм.

Аҙна башында сығып китәм дә, кесаҙна, йомаға мотлаҡ ҡайтып етергә тырышам, сөнки ял алдынан һорау ҙур була. Дим буйҫтәһендә йәшәүселәргә заказдарын бушлай алып барам, заказ күләме 5 килограмдан артһа ғына Өфөнөң башҡа районларына алып барам. Шулай уҡ күптәр такси аша алдыра балыҡ һәм ҡыҫаланы. Аҡсаны картама күсерә лә, улар саҡырған таксиға бирәм дә ебәрәм, миңә лә уңайлы, уларға ла әллә ҡайҙа барып йөрөйһө түгел.

Йәйге миҙгелдә балыҡҡа һәм ҡыҫалаға ҡуш итеп бал һәм ҡымыҙ ҙа тәҡдим итәм. Шулай уҡ икеһе лә бик үтемле тауар. Тағы ла балға төрлө сәтләүек һалып эшләп һатам.

Ғөмүмән, кешенең нимә теләгәнен алдан күрә белеп эш иткәндә, ниндәй тауарға ҙур һорау булырын күҙаллай белгәндә, һатыу эшендә уңышҡа өлгәшергә мөмкин. Тик ялҡаулыҡты һәм эште иртәгеһе көнгә ҡалдырыу кеүек сифатты йүгәнләргә, һәр кемдә була торған һәм эшкә ҡамасаулаған йомшаҡлыҡтарға баш бирмәскә өйрәнергә кәрәк. Эҫе йәйге көндәрҙә, ямғырлы яҙ һәм көҙҙәрҙә, һыуыҡ, буранлы ҡыш миҙгелендә балыҡ тотоп йөрөү еңелдән түгел, ләкин күнелгә ятышлы шөғөл булып, аҡсаһын килтереп тора икән, тимәк, бер нәмәгә ҡарамайынса дауам итергә була.

Егеттәр, арабыҙҙа балыҡсылар ифрат күп. Әйҙәгеҙ, яратҡан шөғөлөгөҙҙө аҡса эшләү ысулына әйләндереп ҡарағыҙ. Барып сыҡһа - бик хуп, әгәр ҙә килеп сыҡмаһа инде, "эшләп ҡараманым", тип үкенерлеге булмаҫ. Уңыштар теләйем.

**Аҫҡар ҒӨБӘЙҘУЛЛИН.**
**Өфө ҡалаһы.**

ХӘТЕРЛӘП...

# ЫНТЫЛЫШТАРЫБЫҘ КӘҮҘӘЛӘНЕШЕ...

**Байрам көнөндә Башҡортостан Республикаһы гербы һәм гимнының нисек ижад ителеүе тураһында авторҙарының иҫтәлектәрен биреп, ул сағыу ваҡиғаларҙы тағы бер тапҡыр күҙҙән үткәрәйек әле, тинек.**




## гербыбыҙҙа...

***БР Дәүләт гербы авторы Фазлетдин ИСЛАХОВ хәтирәһенән:*** Рәссамдар араһында Башҡортостан Республикаһы Гербын эшләргә конкурс иғлан ителгәс, был эшкә айырыуса сәмләнеп, илһамланып тотондом. Минең күҙ алдына ул тәүҙә үк шундай булып кәүҙәләнде: Дәүләт гербында мотлаҡ башҡорт халҡының тарихын, уның рухи донъяһын сағылдырған төп элементтар урын алырға тейеш. Ә уларҙы нимәләр кәүҙәләндерә һуң? Әлбиттә, башҡорт халҡының быуаттан-быуатҡа күсә килгән изге ынтылышы - ирек, ғәҙеллек һәм азатлыҡ һөйөүе, уның өсөн көрәше, ә рухи донъяһында яуҙа - яуҙаш, юлда - юлдаш, ғәҙәти тормошонда моңдашы булған ете тажлы ҡурайы! Азатлыҡ һәм ирек өсөн көрәштә батырҙарыбыҙ, шөкөр, күп булған, ә бына уларҙың бөтәһенең сифаттарын дөйөмләштереп, үҙендә уларҙың образһыҙаттарын бергә туплаусы батырҙарҙан батырыбыҙ - ул, әлбиттә, Салауат Юлаев. Милли геройыбыҙ башҡорттоң ирек юлында баш һалған башҡа бик күп батырҙарының ҡаһарманлыҡтарын да ҡабатлай, шул уҡ ваҡытта тыуған иле, ғәзиз Уралын данлаусы шағир-импровизатор ҙа. Тимәк, Салауатыбыҙ образын һынландырыусы һыбайлы һәйкәл урын алырға тейеш гербта, тип уйланым мин. Салауатҡа һәйкәл - ул аныҡ бер шәхестең генә түгел, ә көрәшсе батырҙарыбыҙҙың дөйөмләштерелгән образы, Башҡортостандағы күп милләтле халыҡтар араһындағы дуҫлыҡ символы ла бит ул.

Бына шулай тыуҙы миндә Герб идеяһы. Эскиздар тәүҙә "Башҡортостан" гәзитендә баҫылып сыҡты. Күп һанлы гәзит уҡыусыларға ла иң уңышлы тип табылған эштәрҙе һайлап алыу форсаты бирелде. Минең эскиз ҡалҡып килгән ҡояш нурҙары фонында Салауат Юлаев һәйкәле һүрәтләнеше, аҫтараҡ ете тажлы ҡурай һәм республикабыҙ флагы төҫөндәге таҫма. Аҡ һыҙат өҫтөнә "Башҡортостан" тип яҙылған.

Ҡырҡ бишләп эш араһынан минең эскиз һайланып алыныуы менән бәйле хистәрҙе әйтеп тә аңлатырлыҡ түгел, әлбиттә. Ғорурлыҡ та, бик ныҡ тулҡынланыу ҙа кисерәм әле булһа. 1993 йылдың октябрендә парламент сессияһы мин эшләгән Герб проектын ҡарауға сығарҙы һәм раҫланы. Яңы Башҡортостаныбыҙҙың Дәүләт символикаһы шулай ҡабул ителде.

## ...гимныбыҙҙа ла

***Башҡортостан Республикаһының дәүләт гимны музыкаһы авторы Фәрит ИҘРИСОВ хәтирәһенән:*** Һис һүҙһеҙ, ошо үткән йылдар эсендәге иң әһәмиәтле ҡаҙаныш - дәүләт гимны, гербы һәм флагы. Улар - республикабыҙ символдары булып тора. Ә символдар үҙе үк халыҡтың уникаль рухи ҡаҙанышы. Республикабыҙҙың дәүләт гимнының музыкаһы күптән яҙылған булһа ла, һүҙҙәре унан һуң ғына ҡабул ителде. Беҙҙең флагыбыҙҙы һәм гербыбыҙҙы һәр ерҙә лә күрергә була, тик бына гимнға әллә ни әһәмиәт биреп еткермәйбеҙ. Шуға күрә мин республикабыҙҙың дәүләт гимны һәр мәктәптә, балалар баҡсаһында өйрәнелһен ине, тип теләйем. Гимндың һүҙҙәрен яҙыусыларҙың береһе Рауил Бикбаев: "Башҡортостан гимны - ул беҙҙең Конституциябыҙҙың квинтэссенцияһы булып тора", - тип әйткәйне. Йәғни, бөтөн Конституция закондары заманға ярашлы яҙылған булһа, беҙҙең гимн һүҙҙәрендә Конституцияның рухи сағылышы ғына түгел, ә булмышыбыҙ, тарихыбыҙ ҙа сағылған. Беҙҙең гимныбыҙ шул тиклем мөһабәт, ғорур яңғырай. Ул дуҫлыҡҡа, татыулыҡҡа, берҙәмлеккә әйҙәй. Шулай тыныс, дуҫ йәшәүебеҙҙә гимныбыҙҙың да өлөшө барҙыр, тип уйлайым.

Гимндың көйөн мин бер төн эсендә яҙһам да (1990, 11 октябрь), ул моңдо мин айҙар, йылдар буйы күңелемдә тыуҙыра килдем. Был көйгә мин республикама, тыуған илемә, халҡыма, милләтемә булған мөхәббәтемде һалырға тырыштым.

Флагыбыҙҙа сағылған ҡурай тураһында гимнда шундай һүҙҙәр бар: "Киләсәккә яҡты нур-моң сәсә һинең ғорур, рухлы байрағың..." Ҡурайыбыҙ нурҙар ҙа, моңдар ҙа сәсеп торһон, тиген теләктәр һалынған был һүҙҙәргә. Шулай уҡ халҡыбыҙҙың ирекккә, азатлыҡҡа ынтылышы ла, изге теләге лә сағыла уның эстәлегендә. Гимнда: "Рәсәй менән бөйөк берҙәмлек", - тигән һүҙҙәр ҙә бар.

Ошо үткән йылдар эсендә күп ҡаҙаныштарға өлгәштек. Миҫалға үҙем эшләгән өлкәне әйтеп үтер инем: төрлө халыҡ-ара конкурстарҙа ҡатнашыуыбыҙ, республикабыҙҙың һәр районында мәҙәниәт һарайҙары асылыуы, үҙешмәкәр сәнғәттең үҫешеүе мәҙәниәтебеҙ кимәленең яңы баҫҡысҡа күтәрелеүен дәлилләүсе миҫалдар. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бер нисә тапҡыр "Алтын битлек" фестивалендә ҡатнашып, ҙур уңыш яуланы. Шулай уҡ "Туғанлыҡ" фестивалдәре үткәрелә. Төрлө илдәр театрҙарының үҙ-ара аралашыуы бик яҡшы күренеш, улар тәжрибә уртаҡлаша, бер-береһенән өлгө лә ала. Халҡыбыҙ киләсәктә лә берҙәм булып, бәхетле йәшәһен ине.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостанда коронавирус йоҡторғандар һәм унан вафат булғандар буйынса яңы антирекордтар теркәлгән. 8 октябргә мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 615 сир йоҡтороу осрағы раҫланған. Коронавирус осраҡтарының дөйөм һаны 71 023-кә еткән. Тәүлек эсендә вафат булғандар 32-гә артҡан, хәҙер улар - 1 822 кеше. Бөтәһе 61 971 кеше һауыҡҡан, 604-е - һуңғы тәүлектә. Вакцинаның беренсе компонентын 1 891 848 кеше алған; 1 325 308 кеше иһә ике компонентын да ҡаҙатҡан.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенән һәм Финанс министрлығынан һаулыҡ һаҡлау өлкәһенең үтенестәренә ваҡытында яуап биреүҙәрен һәм тейешенсә аҡса бүлеүҙәрен һораны. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, хәҙер бюджеттан йәнә яңы коронавирус инфекцияһына ҡаршы аҡса бүленә башлай. "Йәшереп тормайым, ковид-госпиталдәрҙә сирлеләр коридорҙа ята. Табиптар ауыр режимда эшләй. Хәл ҡатмарлы", - тине Радий Хәбиров. Билдәләнеүенсә, республикала коронавирус һәм пневмония менән сирләгән пациенттар өсөн 6550 урын әҙерләнгән, уларҙың 92 проценты тулған.

✓ Башҡортостан Республикаһының һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин "Башинформ" агентлығында уҙған брифингта район-ҡалалар араһында коронавирустан вакцинация буйынса антирейтинг лидерҙарын атаны. Улар: Иглин, Бөрйән, Белорет районлары, Межгорье һәм Сибай ҡалалары. Аҙна йомғаҡтары буйынса Хәйбулла, Көйөргәҙе, Баймаҡ, Яңауыл һәм Туймазы райондарында, Октябрьский һәм Салауат ҡалаларында ла вакцина яһатыу темпы түбән булыуы күҙәтелә.

✓ 2022 йылда Башҡортостанда Рәсәйҙең республика халыҡтары ҙур өлөш индергән 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүгә 210 йыл тулыу билдәләнә. Республика Башлығының тейешле указына ярашлы, сараға әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса ойоштороу комитеты булдырыла, шулай уҡ саралар планы әҙерләнә. Указдың үтәлешен контролдә тотоу Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәтенә йөкмәтелгән.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров мәғариф хеҙмәткәрҙәрен дәүләт наградалары менән бүләкләне. Республиканың 10 уҡытыусыһы "Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды, ә ауылда эшләгән 40 йәш уҡытыусы 690 мең һумлыҡ сертификат алды.

✓ *Дуҫым вакцинаны шулай уҡ ураҙа менән дә сағыштырҙы. Нәҡ ураҙа ваҡытында организм һыуҙан һәм ризыҡтан, башҡаларҙан тыйылып, стресс хәленә инә һәм алда көтөлгән унан да хәтәр хәлдәргә күнекмә үтә, әҙерләнә.*



АБВ

# НИ ӨСӨН ВАКЦИНА ЭШЛӘТТЕМ?



**Мин дә күпселектең фекеренә ҡушылып, вакцина эшләтеүгә ҡырҡа ҡаршы булдым. Шул уҡ ваҡытҡа бер һорауға яуап таба алманым: "Әгәр ҙә донъяның ниндәйҙер көстәре коронавирусты уйлап табып, уның ярҙамында Ер шарының күпселек халҡын ҡырырға теләй икән, ниңә улар үҙҙәрен яҡлай, һаҡлай торған хеҙмәткәрҙәргә вакцина эшләтә?" Һорауҙарҙың башҡалары ла булды, әлбиттә. Өсөнсө тулҡын башланыр алдынан, туғандарымдың, дуҫтарымдың, таныштарымдың өгөтләүҙәренә ҡаршы төшөп, прививка яһатырға булдым. Ни өсөн был аҙымға барыуым тураһында өс дәлил килтереп үтәм. Тик был дәлилдәрем менән мин кемделер прививка яһатырға өндәмәйем, саҡырмайым, фәҡәт үҙемдең күҙәтеүҙәремде генә тәҡдим итәм.**

А Хәйбулланан Аҡсәнә Сынбулатованың "Бәйләнештә" селтәрендәге яҙмаһы уйға һалды. Ул да оҙаҡ икеләнеүҙәрҙән, ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙарынан һуң вакцина эшләтергә булған һәм һүҙен шулай тамамлаған: "Вирус таралыуға бәйле һәр бер эпидемиянан кешелек тик вакцина ярҙамында ғына ҡотола алған. Был йәһәттән тик тәбиғи иммунитетҡа ғына таяныу - ахмаҡлыҡ..."

Кешелек тигәндән, француз яҙыусыһы Альбер Камюның "Чума" романын уҡыуым эпидемияға ҡарата ҡарашымды байытты. Францияның колонияһы һаналған Алжирҙың Оран ҡалаһында үткән быуаттың 40-сы йылдарындағы эпидемия хаҡында был роман. Шуныһы: әле беҙҙәге ковид пандемияһынан бер яғы менән дә айырылмай бер быуаттан ашыу элек булып үткән афәтле ваҡиғалар. Чумаға ҡаршы вакцина уйлап сығарған доктор Риэ үҙенең ҡатынын ҡотҡара алмай. Романды уҡығас, шундай фекер төйнәнем: эпидемия бер кемде лә аямай, ул кешеләрҙән элеккесә фекер йөрөтөүҙе инҡар итеп, яңыса йәшәй башлауҙы талап итә. Һәр төрлө тәртипһеҙлектәрҙән, сыуалыштарҙан ил граждандарын тәртип һаҡсылары, полиция, армия ҡотҡарырға бурыслы булған кеүек, чума, ковид һымаҡ афәттәрҙән беҙҙе тик медицина ғына һаҡлай алалыр. Ә беҙҙә нисек килеп сыҡты: социаль селтәрҙәр, ватсап аша таралған мәғлүмәткә таянып, һәр кемебеҙ табипҡа, күрәҙәсегә, "минбеләм"гә әүерелде. Фәҡәт тик үпкәләребеҙ шунсама процентҡа зарарланып, тын ала алмай башлағас ҡына беҙ табиптарҙы иҫкә төшөрәбеҙ ҙә, әммә һуңлайбыҙ. Ковид бөтөнләй юҡ, тигән уйҙырма ла халҡыбыҙҙың күренекле ул-ҡыҙҙарының күҙ менән ҡаш араһында вафат булыуы менән юҡҡа сыҡты. Тағы ла бер генә һулыш алһам ине, тип йән бирә алмай ятыусыларҙың тик шул саҡта ғына вакцинаны иҫтәренә төшөрөүе тетрәндерҙе.



Б Төрлө темаларға ирекле фекер йөрөтөү ҡеүәһенә эйә Артур атлы медик дуҫым бар. Ни өсөн вакцина эшләтергә кәрәк икәнлеген ул миңә үҙенсә аңлатты. Бер тапҡыр ҙа ҡулына бокс бирсәткәләре кейеп, рингта күнекмә үтмәгән кеше спорт мастерына ҡаршы һуғышырға сыҡһа, мастер уға бер генә һуғасаҡ һәм ул, тын да ала алмайынса, һуҙылып ятасаҡ. Йә булмаһа, бер тапҡыр ҙа йүгереп күнекмә үтмәгән кеше марафонға сыҡһа, шундуҡ тыны ҡыҫылып һуйҙайып ятасаҡ. Иғтибар итегеҙ: ике осраҡта ла тын ҡыҫыла. Тап шуның кеүек, вакцина - ул кеше организмына алда көтөләсәк сир өсөн күнекмә үткәреү генә. Был осраҡта һиңә рингта күнекмә үткәреүсе тренерың - вакцина, ә инде спорт мастеры - сир. Йәғни сир һине аяп тормаясаҡ.

Дуҫым вакцинаны шулай уҡ ураҙа менән дә сағыштырҙы. Нәҡ ураҙа ваҡытында организм һыуҙан һәм ризыҡтан, башҡаларҙан тыйылып, стресс хәленә инә һәм алда көтөлгән унан да хәтәр хәлдәргә күнекмә үтә, әҙерләнә. Уның уйынса, ураҙа тотоусылар вакцинаны еңел үткәрә.

В Күренекле яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаевтың "Ысыҡтан эйелә ҡылған" романында үткән быуаттың 20-се йылдарында вабаға, сәсәккә ҡаршы башҡорт ауылдарында вакцина яһау ваҡиғалары һүрәтләнә. Прививка үткәреүгә ҡаршы халыҡты дин әһелдәре ҡоторта. Заһретдин тигән берәү: "Изге мосолмандар! Был совет власының беҙҙе үлтереү өсөн уйлап сығарған бер мәкере. Ышанмағыҙ! Заман ахыры етһә, иблес төкөрөгөнә тығылған энә осо менән кеше сәнсеп, мосолман ғәләмен һәләк итерҙәр, тип яҙылған китапта..." - тип, медпунктҡа барыусыларға ҡаршы сыға. Әҫәрҙә дин әһелдәре халыҡты шулай кире дүндерергә тырышһа ла, үҙҙәре ғаиләләре менән бергә тәүгеләрҙән йүгереп барып вакцина яһата.

Бында, әлбиттә, соцреализм дәүерендәге сарказм да бар, әммә XX быуат башы ваҡиғаларын ныҡлы өйрәнгән, халыҡ тормошон яҡшы белгән Рамаҙан Өмөтбаев үҙе уйлап сығарған тарихи уйҙырма түгелдер был. Шулай ҙа романдың дини-идеологик өлөшөн алып ташлаһаҡ, ваба, сәсәк һәм вакцина ғына тороп ҡала. Прививка үткәреүгә һәр заманда ла күпселек халыҡ ҡаршы булған, тимәксемен.

Әле лә шундай уҡ хәл ҡабатлана. Билдәле дин белгесе, тележурналист Морат Лоҡмановҡа вакцина тураһында һорау биргәс, ул шулай тине: "Хатта ки вакцина, күптәр яҙғанса, ысынлап та зарарлы булған хәлдә лә, күпселек халыҡ ошо афәттән ҡотолоу юлы тик вакцинала тип инанһа, Аллаһы Тәғәлә уны шифалы итәсәк..."

Изге шишмәләрҙән алған һыуҙың, шул иҫәптән зәмзәм һыуының да шифаһы хаҡында аңлатып тороу артыҡтыр. Шул уҡ ваҡытта ул һыуҙарҙың оҙаҡ ваҡыт боҙолмай һаҡланыу сифатын да беләбеҙ. Был өлкәлә тикшереү үткәреүсе ғалимдар был һыуҙарҙың составында ауыр металдарҙың, башҡа химик элементтарҙың булыуы уларҙың оҙаҡ ваҡыт боҙолмай һаҡланыуына булышлыҡ итә, ти. Үҙем тикшермәгәс, быны раҫлай алмайым. Шулай ҙа ул һыуҙарҙың шифаһын тойғаным бар...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

УЙЛЫҒА - УЙ



# ҠУРҠЫУ ҺӘЛӘКӘТ ТЫУҘЫРА

**Ғалим-медик үҙенең теорияһын тикшереп ҡарарға теләй, тик бының өсөн тәжрибә һуңында үлергә тейешле ирекмән кәрәк була. Ниһайәт, ул электр ултырғысында язалауға хөкөм ителгән бер ирҙе таба. Ғалим был кешенең аҡтыҡ ҡанына тиклем йөрәк ритмын ҡыҫҡартасаҡ фәнни тәжрибәлә ҡатнашасағы, ләкин тере ҡалыу ихтималлығының әҙ булыуы һәм үлгән хәлдә лә хөкөм ителеүсенең бер ниндәй ауыртыныу кисермәйәсәге хаҡында аңлата. Хөкөм ителеүсе ризалаша, сөнки былдай үлем электр ултырғысында йән биреүгә ҡарағанда яҡшыраҡ тип уйлай.**

Уны носилкаға һалып, ҡыбырламаҫлыҡ итеп бәйләйҙәр. Унан һуң табип уның ҡул суғы тапҡырындағы ҡан тамыры тирәһендәге тирене бер аҙ киҫә һәм уның аҫтына бәләкәй генә алюмин сеүәтә ҡуя. Тиренең тәүге ҡатламы ғына киҫелһә лә, хөкөм ителеүсе уның веналарын киҫтеләр тип уйлай. Носилка аҫтына шыйыҡсаның тамсылап ағыуын көйләүсе тағы бер һауыт ҡуялар: хөкөм ителеүсе һәр тамсыны ишетеп ятасаҡ һәм быны үҙ ҡаны аға тип иҫәпләйәсәк.

Бына ғалим клапанды бер аҙ яба, ә тәжрибә ҡорбаны тамсының әкренәйеүен ҡаным бөттө тип аңлай һәм бер нисә минуттан һуң уның йөҙө ағара башлай, йөрәк тибеше көсәйә. Ғалим клапанды тулыһынса ябып ҡуйғас, хөкөм ителеүсенең ныҡ тулҡынланыуҙан йөрәге тибеүҙән туҡтай, һәм ул үлә.

Ошондай юл менән был ғалим үҙенә ҡабул ителгән бөтөн нәмәнең - яҡшымы ул, әллә, кирећенсә, насармы - тотош психологик һәм соматик аппаратҡа ныҡ тәьҫир итеүен иҫбатлаған. Әгәр кешегә уның үлемесле вирусҡа дусар булыуы хаҡында әйтһәң, ул фәҡәт ҡурҡышынан ғына ла һәләк булыуы ихтимал.

Шулай итеп, беҙ бөгөн киң мәғлүмәт саралары аша көнө-төнө ошондай кире мәғлүмәттәр һеңдерәбеҙ һәм бик ҡурҡабыҙ, һөҙөмтәлә беҙҙең иммунитетты ошо ҡурҡыу тойғоһо ҡаҡшата ла. Асылда, вирустан үлем хәүефенең әллә ни ҙур түгеллеге билдәле булыуға ҡарамаҫтан, кеше аңы үҙенсә эшләй. Ә бит иммунитет көсһөҙ булғанда ғына сирҙең ҡатмарлашыуы мөмкин. Һаулығың яҡшы һәм сир алдында ҡурҡыу юҡ икән, бер генә вирус та "эш ҡыра" алмаясаҡ.

***"Аллаһҡа һыйынған һәм һығынған әҙәмгә Ул да етә. Аллаһ Үҙ эшен ахырынаса еткерә. Аллаһ һәр нәмәнең самаһын билдәләгән" Ат-Талаҡ (Айырылышыу) сүрәһе, 3-сө аят.***

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Уҡытыусылар көнө алдынан башҡорт һәм рус теле уҡытыусылары араһында Башҡортостан Хөкүмәтенең аҡсалата дәртләндереүенә дәғүә иткән республика конкурсы еңеүселәрен бүләкләүгә арналған тантаналы сара уҙҙы. Унда иң яҡшы 50 башҡорт теле һәм рус теле уҡытыусыһы 50-шәр мең һум күләмендә премия алды. Сарала республиканың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин һәм уның урынбаҫарҙары ҡатнашты.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин илдә яңы байрам - Атайҙар көнөн булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Рәсәйҙәр уны октябрҙең һәр өсөнсө йәкшәмбеһендә билдәләй, тиелә рәсми документта. Быйыл байрам 17 октябргә тура килә. Әйткәндәй, байрамды булдырыу идеяһын Рәсәйҙең Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы тәҡдим итте. Элекке балалар омбудсмены Анна Кузнецова ғаилә институтын нығытыу өсөн ошо башланғыс менән сығыш яһағайны.

✓Башҡортостан аграрийҙары май бирә торған үҫемлектәр сәселгән майҙандың 80 проценттан ашыуын йыйып алған, тип хәбәр иттеләр республика Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Бөгөнгә республикала май бирә торған үҫемлектәрҙең уңышы 311 мең тоннанан ашыу тәшкил итә. Көнбағыш төп урынды биләй. Көнбағыштың уңышы буйынса Архангел, Дүртөйлө һәм Ҡырмыҫҡалы райондары алда бара.

✓Силәбе өлкәһендә Башҡорт мәҙәниәте һәм мәғрифәте көндәре сиктәрендә Ҡоншаҡ, Арғаяш райондары, Силәбе ҡалаһында 28 сентябрҙән 2 октябргә тиклем төрлө саралар үтте. Проект сиктәрендә башҡорт милли үҙаңын һаҡлау, үҫтереү буйынса фекер алышыу, туған телде өйрәнеү хоҡуғын тормошҡа ашырыу буйынса уҡытыу-методик консультациялар, башҡорт теле уҡытыусылары өсөн ижади оҫтахана, халыҡ бейеүҙәре, вокал, халыҡ ижады, милли уйын ҡоралдары буйынса оҫталыҡ дәрестәре ойошторолдо.

✓Мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин Башҡортостандың бөтә уҡыусыларын дистанцион уҡыуға күсереүҙең кәрәклеген күрмәй. "Муниципалитеттарҙа балаларҙы дистанцион уҡыуға күсереү тураһында үҙ ваҡытында ҡабул ителгән саралар ыңғай һөҙөмтә бирҙе. Хәҙер 1 сентябрҙән алып тәүге тапҡыр сирлеләр буйынса кире динамика күҙәтелә, - тип белдерҙе Хажин. - Башҡа муниципалитеттарҙа һәм мәктәптәрҙә уҡыусыларҙы дистантҡа күсереү кәрәклеген күрмәйем".

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ТЕЛЕВИЗОРҘА...

**Ил Президенты Владимир Путин "Рәсәйҙең йыл уҡытыусыһы" тигән яңы телевизион шоу булдырыуҙы йөкмәтте.**

Документҡа ярашлы, ул 2022 йылда эфирға сығырға тейеш. Был хаҡта Кремль сайтында хәбәр ителде. Бөтә Рәсәй конкурсы киң яҡтыртылырға, йыл һайын федераль бюджеттан финансланырға тейеш. Владимир Путин педагогтарҙың, белем биреү ойошмалары етәкселәренең һөнәри оҫталыҡ конкурстарын үткәреү, иң яҡшы уҡытыусыларға эшмәкәрлектәрендәге ҡаҙаныштар өсөн премиялар биреү буйынса үҙгәрештәр индерергә тигән бурысты ла алға һөрҙө. Премия алыусылар һанын арттырыу, конкурстар үткәргәндә, премия биргәндә йәмәғәтселекте һәм һөнәри берләшмәләрҙе йәлеп итергә, уларҙы киң яҡтыртырға кәрәклеген билдәләне. Был бурыстарҙы үтәү йөкләтеләнән Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенә һәм "Мәғариф" йүнәлеше буйынса Рәсәй Дәүләт Советы комиссияһына яуаплылыҡ йөкмәтелде.

## ҠАҒЫҘ ЭШЕНӘН...

**Рәсәй Президенты Владимир Путин 25 августа уҙған Рәсәй Дәүләт Советы Президиумы ултырышы йомғаҡтары буйынса йөкләмәләр исемлеген раҫланы.**

Дәүләт башлығы мәктәптәрҙә контроль һәм тикшереү эштәре һанын кәметеү тураһында мәсьәләне ентекләп өйрәнергә ҡушты. Был хаҡта Кремль сайтында хәбәр ителә. Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт, Мәғариф министрлығы һәм ил субъекттарының башҡарма власть органдары яуаплы итеп тәғәйенләнгән.

Атап әйткәндә, "белем биреү сифаты мониторингы бурыстарының көнүҙәклеген иҫәпкә алып, мәғариф ойошмаларында контроль һәм тикшереү эштәре һанын кәметеүҙе тәьмин итергә" ҡушылды.

Башҡарылған эш тураһында 2022 йылдың 1 июленә тиклем хәбәр итергә.

## БАЛАҢ СТУДЕНТМЫ?

**Көндөҙгө бүлектә уҡыған студенттарҙың ата-әсәләре ҡартлыҡ һәм инвалидлыҡ буйынса арттырылған пенсия алырға мөмкин.**

Уны бала уҡыуын тамамлағансы йәки 23 йәшкә еткәнсе түләйҙәр, тип хәбәр итте РИА Новости Рәсәй Пенсия фондының Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһе буйынса бүлексәһенә һылтанма менән. Әйткәндәй, өҫтәмә сит илдәге юғары уҡыу йортона уҡырға ингән осраҡта ла түләнә. Балаларына 18 йәш тулмаған пенсионер ата-әсәләр ҙә ҙур пенсия алырға хоҡуҡлы. Ләкин бала балиғ булғас, унын студент булыуын һәм эшкә урынлашмауын раҫларға кәрәк, тип белдерҙеләр фондта.Эшкә һәләтһеҙ ғаиләгә ағзаларын ҡараған рәсәйҙәр ҙә арттырылған түләүҙәргә дәғүә итергә мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ТАРИХИ ФЛАГ ҠАЙТТЫ

**Һөйләшеүҙәрҙән һәм экспертизаларҙан һуң 1919 йылда Петроградты һаҡлағанда айырылып торған 2-се Башҡорт уҡсылар полкы байрағын Башҡортостанға ҡайтарыуға өлгәшелде, тип хәбәр итте республика Башлығы Радий Хәбиров.**



"Беҙ тарихи хәтерҙе һаҡлау, Башҡортостан яугирҙарының хәрби батырлыҡтарын мәңгеләштереү мәсьәләләренә айырым иғтибар бүләбеҙ. Башҡорт полктарының Петроградты генерал Николай Юденич ғәскәрҙәренән һәм сит ил интервенттарынан яҡлап һуғышыуы яҡташтарыбыҙҙың ил дәүләтселеген һаҡлауға өләш индереү өлгәһе булып тора. 1919 йылда Реввоенсовет Ҡыҙыл Армияның бер нисә башҡорт полкын Көньяҡ фронттан Петроград янына күсерергә ҡарар итә. Улар Петроград эшселәре, курсанттары һәм моряктарына ярҙамға килә. Ул саҡта Петроградты һаҡлап алып ҡалалар", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Башҡорт полкының байрағы 10 йыл шәхси коллекцияларҙа һаҡланған, Рәсәйгә ул АҠШ-тан ҡайтҡан. "Был байраҡты 2-се Башҡорт уҡсылар полкы яугирҙары теккән. Билдәле булыуынса, Граждандар һуғышында ҡыйыу яҡташтарыбыҙ ошо байраҡ аҫтында дошманға ҡаршы алышҡан. Бындай ҡомартҡыны һәйбәт һаҡланған килеш табыу - бик һирәк осраҡ. Хәҙер ул Башҡортостандың Милли музейына һаҡлауға тапшырыла. Тарихыбыҙға һәр ваҡыт ихтирам менән ҡарайым. Тарихи мираҫты ҡайтарыу - беҙҙең бурыс",- ти Радий Фәрит улы.

## НИҢӘ ТАБИПТАР ЕТМӘЙ?

**Дәүләт һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә кадрҙар етмәүҙең төп сәбәптәре билдәле булды - йөкләмәнең ҙурлығы, отчеттарҙың күплеге, стресс һәм пациенттарҙың кире мөнәсәбәте. Врачтарҙан, беренсел ойошмалар рәйестәренән һорау алыу буйынса был мәғлүмәтте Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре профсоюзы бирҙе.**

Яуап биреүселәрҙең 31 проценты медицина ойошмаларында кадрҙар етмәүен раҫланы. Тәү сиратта участка, терапия хеҙмәтендә, шулай уҡ хирургия йүнәлешендә врачтар етмәй.

Дәүләт медицинаһында эшләргә теләмәгән, врач дипломлы респонденттарҙың 71 проценты йөкләмәнең, шул иҫәптән психологик көсөргәнештең юғары булыуын билдәләй. 64 проценты системаның бюрократизмы һәм отчеттың күп булыуы тураһында белдерә. 49 проценты төп сәбәпте юғары көсөргәнеш арҡаһында барлыҡҡа килгән стрестан һәм һөнәри арығанлыҡтан күрә. Респонденттарҙың 38 проценты ғына эш хаҡының түбән булыуын билдәләй. Пациенттар менән мөнәсәбәттә бәйле проблемалар, халыҡтың медицинаға ҡарата кире ҡарашы медиктарҙы ла борсоуға һала - был хаҡта яуап биреүселәрҙең 62 проценты белдерә.

Һорау алыуҙа ҡатнашҡан медиктарҙың 62 проценты 1,5 һәм унан күберәк ставкаға эшләүен раҫлай.

Профсоюздың матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса кадрҙар ҡала һәм район дауаханаларында етмәй. Мәсәлән, Стәрлетамаҡ медицина округы врачтар менән 55 процентҡа ғына тәьмин ителгән. "Ҡала һаулыҡ һаҡлауҙы ҡулайлаштырыу дауам итә, йыл аҙағына тиклем өс диспансер филиалға әйләнәсәк, - ти һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәренең ҡала профсоюз ойошмаһы рәйесе Азат Ҡорбанғәлиев. - Кадрҙар менән тәьмин ителеү насар булғас, медицина хеҙмәткәрҙәренә йөкләмә арта. Мәсәлән, тәүге звеноларҙа врачтар ике генә түгел, өс, дүрт участкала ҡабул итә. Был күренеш медицина хеҙмәткәрҙәрен шәхси клиникаларға, шулай уҡ карьера үҫеше мөмкинлеге, уңайлы эш урыны, торлаҡ булмауы йәш белгестәрҙе округтан китергә мәжбүр итә".

## ТЫРЫШТАРҒА - ПРЕМИЯ

**Быйыл Башҡортостан мәктәптәрен тамамлаусыларҙан 104 уҡыусы юғары балл алды. Республиканың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин әйтеүенсә, төбәктә сығарылыш уҡыусыларына ярҙам күрһәтеү буйынса бер ҡайҙа булмаған саралар күрелә.**

Шуларҙың береһе - БР Башлығының бер тапҡыр бирелә торған премияһы. "Премия донъя кимәлендәге Евразия фәнни белем биреү үҙәгендә ҡатнашыусы республика вуздарына ингән 100 балл йыйыусыларға түләнә. Уның күләме 150 мең тәшкил итә. Быйыл уға 30-ҙан ашыу бала лайыҡ булды. Бынан тыш, ҡабул итеүҙең контроль һандары арта, былтырғы менән сағыштырғанда бюджет урындары 2000 самаһына күберәк", - ти Айбулат Хажин. БР Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, йылдан-йыл БДИ һөҙөмтәләре буйынса 100 балл йыйыусылар һаны арта бара. Шул уҡ ваҡытта бындай һөҙөмтәләр белем биреү сифатының артыуын күрһәтһә, йәмғиәттә уларҙың ғәҙел булыуына шик белдереүселәр ҙә бар. "Үҙҙәренең тырышлығы, ныҡышмал хеҙмәте менән юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән уҡыусыларға шик төшөрөргә ярамай. Ҡайҙалыр БДИ һөҙөмтәләре менән ниндәйҙер шикле ғәмәлдәр эшләнә икән, тәү сиратта яуаплы кешеләр тикшерелергә тейеш, ә балалар түгел", - ти "Сириус" белем биреү үҙәге етәксеһе Елена Шмелева.

"БДИ тапшырыуҙың ғәҙелһеҙлеген бары тик әҙерләнмәгәндәр, юғары балға эшләмәгәндәр һәм бюджет урындарына инә алмағандар ғына әйтә ала", - ти Рәми Ғарипов исемендәге Республика Башҡорт гимназия-интернатын тамамлаған, ике тапҡыр 100 балл йыйған Гөлназ Ишемғужина. Әйткәндәй, юғары балдары Гөлназға Мәскәүҙең, Ҡаҙандың һәм Өфөнөң абруйлы вуздарына уҡырға инеү мөмкинлеген бирә, әммә ул Башҡорт дәүләт медицина университетын һайлай.

## БЕҘҘЕҢ БАЛ...

**Башҡортостан продукцияһы Рәсәйҙең Агросәнәғәт комплексы аҙналығында 35 алтын миҙал яулаңы.**

Республиканың аграр компаниялары конкурста төрлө дәрәжәләге 50-нән ашыу миҙалға лайыҡ булды. "Прочный мед" компанияһының йүкә һәм солоҡ балы "көмөш" һәм "бронза" алды, хәйер, уларға, эксперттар фекеренсә, конкурент булманы. Әлегә солоҡ балының түмен бөтәһе лә аңлап етмәй", - тип белдерҙеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында. Аҙналыҡ барышында "Алтын көҙ" форумы һәм күргәҙмәһе - Рәсәй агросәнәғәтенең ҡаҙаныштарын ҡарау ойошторола. Башҡортостандың 35 кешенән торған делегацияһы Мәскәүгә юлланды, улар түңәрәк өҫтәлдәрҙә, панель дискуссияларҙа ҡатнаша, тармаҡты ғилми һәм кадрҙар йәһәтенән тәьмин итеү, дәүләт ярҙамы, органик тауарҙар етештереүҙе үҫтереү, һаҡлы трансформация һәм башҡа темаларға фекер алыша.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә "Беренсе уҡытыусыға" республика акцияһы барышында ағастар ултыртылды. Балалар уҡытыусылары менән Уҡытыусы даны аллеяһына нигеҙ һалды. Хәҙер скверҙы 90-дан ашыу шыршы, ҡайын, йүкә, миләш үҫентеһе биҙәй. Акцияла Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева һәм баш ҡаланың Октябрь районы хакимиәте башлығы Сергей Плотников ҡатнашты. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы Лиза Әһәҙуллина ла үҙенең исемле ағасын ултыртыу хоҡуғын алды. Тап ул скверҙа уҡытыусыға арналған композиция булдырыу башланғысы менән сығыш яһаны.

✓БР мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана коллективын яңы директор вазифаһын башҡарыусы Марат Зәлкәрнәев менән таныштырҙы. Ул конкурсҡа тиклем директор вазифаһын башҡара. Марат Миңлеғәле улы Зәлҡәрнәев - Башҡортостан Республикаһының тыуған яҡты өйрәнеүселәр ойошмаһы советы рәйесе, тарих фәндәре кандидаты. Бынға тиклем Башҡортостандың Милли музейы етәксеһе булды.

✓"Аҡбуҙат" республика журналының Мәскәү ҡалаһында йәшәгән башҡорт балалары өсөн махсус сығарылышы донъя күрҙе. Баҫманың баш мөхәррире Лариса Абдуллина әйтеүенсә, был һанда Башҡортостан, уның тарихы, тәбиғәте һәм мәҙәниәте тураһында мәғлүмәт бар. Шәжәрә темаһына арналған материалда башҡорт халҡының традициялары, ете ырыуы хаҡында бәйән ителә. Журналды Мәскәүҙә йәшәгән балаларҙың һүрәттәре, ҡыҫҡа хикәйәләре биҙәй. Бер бит башҡорт теле дәрестәренә бағышланған, бында Ләйсән Әхмәҙуллина туған тел серҙәрен өйрәтә.

✓"Салауат Юлаев" хоккей клубының 60 йыллыҡ юбилейы уңайынан банктарҙың береһе иҫтәлекле көмөш тәңкә сығарҙы. Бер яғында - клубтың логотибы, икенсеһендә башҡортса "Өфө" тип яҙылған һәм республиканың символы - ҡурай тажы төшөрөлгән. Банк вәкилдәре һүҙҙәренсә, 925-се пробалы көмөш тәңкәнең тиражы - 750 дана. Уны банк бүлексәләрендә һатып алырға мөмкин.

✓5 октябрҙән Рәсәй Дания, Джибути, Яңы Зеландия, Перу, Көньяҡ Африка Республикаһы, шулай уҡ Гоа һәм Тенерифе менән авиабәйләнеште тергеҙә. Бынан тыш, Мәскәү - Тенерифе маршруты буйынса Испания менән авиабәйләнеш тергеҙелә. Танзания менән авиабәйләнеш 1 ноябргә тиклем туҡтатылды.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ТӨРЛӨҺӨНӨН*

# КҮПЕР АСЫЛА

**Баш ҡалала Ағиҙел йылғаһы аша Воровский урамы сатында "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проекты буйынса күпер төҙөлөшө тамамлана.**

Объекттың оҙонлоғо 688 метр тәшкил итә. Ул тулыһынса октябрь һуңында асыласаҡ. Төҙөүсе ойошма белдереүенсә, бөгөн күпер барлыҡ ете терәүҙә тора, тиҙ арала унда һәм эргә-тирәһендә асфальт һалыу һәм башҡа эштәрҙе башҡарыуға әҙерлек алып барыла. Төҙөлөш 1956 һәм 1993 йылдарҙа төҙөлгән ике күпер араһындағы тар арауыҡта башҡарыла һәм тарнспорт хәрәкәте туҡтатылмай. Эш тулыһынса тамамланғас, яңы төҙөлгән өс һыҙатлы күпер аша транспорт йөрөй башлаясаҡ, ә иҫке күпер реконструкцияға ябыласаҡ.

# ЕР АҪТЫ ҮТКӘҮЕЛЕ...

**Өфөлә Дуҫлыҡ монументы районындағы йәйәүлеләр өсөн ер аҫты үткәүеле төҙөлөшө тамамланыу алдында.**

Унын оҙонлоғо - 110, киңлеге - 5, бейеклеге 2,33 метр. Өс сығыу урыны ҡуҙаллана, уларҙың икеһе павильонлы. Үткәүелдән тура Ағиҙел яры буйына йәки туҡталышҡа сығыу мөмкин. Шулай уҡ бында күҙәтеү майҙансығы буласаҡ. Проектҡа ярашлы төҙөлөш асыҡ ысул менән башҡарыла, йәғни тәүҙә урамдың бер өлөшө ябыла, һунынан - икенсеһе. Эш барышында инженер коммуникациялары күсерелә, 324 свай ҡағыла, монолит эштәре башҡарыла, баҫҡыстар, ямғыр һыуын ағыҙыу канализацияһы эшләнә. Участка начальнигы Алексей Федотов белдереүенсә, әлеге ваҡытта үткәүелдең монолит өлөшөн гранит менән йөҙләү, металл конструкциялар ҡуйыу, видеокүҙәтеү, электр, һыу һәм канализация тәьминәте системаһын монтажлау бара, объектты ошо ял көндәрендә асыу күҙаллана.

# ТӘҮЛЕК ӘЙЛӘНӘҺЕНӘ...

**Баш ҡаланың торлаҡ-коммуналь хужалығы системаһының эше буйынса ойошторолған оператив штабтың колл-үҙәге көҙгө-ҡышҡы миҙгелдә тәүлек әйләнәһенә эшләйәсәк.**

22 сентябрҙә генә эш башлаған колл-үҙәк торлаҡ-коммуналь хужалыҡ тармағындағы ҡатмарлы мәсьәләләрҙе тиҙ арала хәл итергә булыша, сөнки операторҙар һорауҙарҙы тейешле инстанцияларға йүнәлтеп, уларҙың үтәлешен контролдә тота. Үҙәк операторҙары 5 октябрҙә генә халыҡтан 800 шылтыратыу ҡабул иткән, уларҙың 700-ҙән ашыуы йорттарға йылылыҡ биреү мәсьәләһенә ҡағылған. Бигерәк тә Калинин районы әүҙемлек күрһәткән (119), иң аҙ мөрәжәғәттәр Дим районынан (28).

Әйткәндәй, колл-үҙәкҡа 8 (347) 277-09-11 номеры буйынса шылтыратырға мөмкин, шулай уҡ йылылыҡ мәсьәләһе буйынса 8-800-511-30-15 номеры буйынса "БашРТС"-ҡа (күп каналлы телефон номерының эш графигы дүшәмбе-йәкшәмбе иртәнге 9-сы яртынан киске 6-сы яртыға тиклем, шәмбе иртәнге 9-ҙан киске 6-ға тиклем); 8-800-250-52-80 номеры буйынса УИС-ҡа (күп каналлы телефон номерының эш графигы дүшәмбе-йәкшәмбе иртәнге 8-ҙән киске 7-гә тиклем); 8-800-775-7761 номеры буйынса ЕРКЦ-ға (күп каналлы телефон номерының эш графигы дүшәмбе-кесаҙна иртәнге 9-сы яртынан киске 6-сы яртыға тиклем, йома көндө иртәнге 9-сы яртынан киске 5-кә тиклем); торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәте өсөн түләү квитанцияларында һәм күп фатирлы йорттарҙың мәғлүмәт стендтарында күрһәтелгән идара итеү ойошмаһына йәки ТСЖ-ға диспетчер хеҙмәттәре номерына шылтыратырға, Өфө ҡала хакимиәтенең рәсми сайтындағы интерактив карталар бүлегендәге "Йылы Өфө" сервисында мөрәжәғәт ҡалдырырға була.

# НУҒАЙҘАР ӘҮҘЕМЛӘШТЕ

**Нуғай ауылы халҡы йыл һайын Урындағы инициативаларға ярҙам итеү программаһында әүҙем ҡатнашһа, быйыл улар еңеүселәр һаны буйынса рекорд ҡуя. Юлдарҙы ремонтлау, парк зоналарын һәм балалар майҙансыҡтарын төҙөкләндереү, тротуар эшләү - 29 проект арҡаһында ҡасабаны ҙур үҙгәрештәр көтә.**

Еңеүселәр араһында 2-се Ынйы (Ландыш) тыҡрығы халҡы инициативаһы ла бар. Улар Урындағы инициативаларға ярҙам итеү программаһы ҡатнашыусылары булып киткәс, бында юлдар асфальтлана. Урам комитеты рәйесе Максим Максимов әйтеүенсә, программала ҡатнашыу - командала эшләүҙе һәм ижади ҡараш талап иткән ентекле эш, әммә ул үҙен аҡлай. "Минең ҡарашҡа, беҙҙең йыйылыштарҙың үҙенең шәхси "стиле" булды - улар дуҫтарса аралашыуҙы хәтерләтте. Беҙ балаларыбыҙ мәктәпкә барғанда борсолмаһын һәм үҙебеҙ ҙә насар юлдарҙа ыҙаланмаҫ өсөн тиҙ арала уртаҡ тел таптыҡ", - ти ул.

Яңы асфальт юл Иван Лепехин, Сосланбәк Тавасиев һәм Механизаторҙар, Ер эшкәртеү урамдарында, 1-се һәм 2-се Диагональ тыҡрыҡтарында ла барлыҡҡа килә. Тиҙҙән Уныш, Сабир Ваһапов, Таһир Байышев урамдарының, Алыҫ тыҡрығының юл ҡатламы ла яңыртыласаҡ. Ҡайһы бер участкаларға инерт материалдар, ҡомташ, асфальт грануляты түшәләсәк.

Әйткәндәй, был программала һәр кем ҡатнаша ала. Проекттар положениела ҡаралған критерийҙар буйынса конкурс нигеҙендә һайлап алына. Был юл менән юлдарҙы һәм ҡоромалдарҙы, мәҙәниәт һәм мәҙәни мираҫ учреждениеларын, урамды яҡтыртыу һәм территорияны төҙөкләндереү, шул иҫәптән балалар һәм спорт майҙансыҡтарын йыһазландырыу буйынса проекттар тормошҡа ашырыла ала.

# ТӘБИҒӘТ УТРАУЫ

**Дим һаҙлығы территорияһында ғалимдар тап шундай атамалы ҡурсаулыҡ ойошторорға ниәтләнә.**

Инициатив төркөм координаторы Александр Волков белдереүенсә, проектланасаҡ ҡурсаулыҡ "Көмөш шишмә" биҫтәһе эргәһендә урынлашҡан. Ғалимдар был аҙымдың популяцияны һаҡлап ҡалыу, хужалыҡ, фәнни һәм мәҙәни йәһәттән ҡиммәтле булған ҡырағай хайуандарҙың һәм үҫемлектәрҙең һанын арттырыу өсөн уларҙың үрсеүенә шарттар тәьмин итеүгә иҫәп тота. Шулай уҡ тикшеренеүселәр халыҡҡа, шул иҫәптән балаларҙа ла экологик белемде үҫтереү маҡсатын ҡуя. Сентябрь һуңында бында тәбиғәтте һөйөүселәр һәм орнитологтар 5 сәғәт эсендә 31 төр ҡоштоң 449 төрөн осратҡан. Уларҙың бәғзеләре Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән. Әлегерәк Өфө ҡоштары атласын эшләгәндә Дим һаҙлығында һәм уның тирә-яғында орнитологтар һәм ҡош һөйөүселәр тарафынан 100 төр, шул иҫәптән Ҡыҙыл китапҡа индерелгән ҡоштар осратыла, тәбиғи мөхитте торошлары айырым иғтибар талап иткән төрҙәр билдәләнә.

Положениеға ярашлы, ҡурсаулыҡ территорияһында төҙөлөш эштәре алып барыу, ҡаҙылма байлыҡтар сығарыу, автотранспортта йөрөү (хеҙмәт транспортынан башҡа), тауышланыу (тауыш көсәйтеү аппараттары, фейерверктар, петардалар һ.б. ҡулланыу, ут яғыу, ағас ҡырҡыу) тыйыла.

Ғалимдар 1988 йылда уҡ Өфөлә орнитология йәһәтенән Дим районы, Максимовка, Затон һаҙлыҡтарының әһәмиәтле булыуын һәм уларға микроҡурсаулыҡ статусы биреү кәрәклеген билдәләй.

*ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ - 2020*

БӨТӘ РӘСӘЙ ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ

# АЛДАНМАҒЫҘ!

**Башҡортостан статистиктары, Рәсәй Эске эштәр министрлығының рәсми мөрәжәғәтенә һылтанып, яман уйлылар үҙҙәрен ошо кампанияла иҫәп алыусы йәки ирекмән булараҡ ҡатнашыусы тип танытып, граждандарҙың шәхси мәғлүмәттәрен йыйыуҙары ихтималлығы хаҡында иҫкәртә. Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, улар иҫәп алыуҙы алдан үтергә тәҡдим итергә, һорауҙарҙы урамда йәки телефон аша бирергә, иҫәп алыу өсөн аҡса талап итергә, үҙҙәренең тауарын йәки хеҙмәтен тәҡдим итергә, агитация алып барырға мөмкин.**

"Әгәр һеҙгә шылтыратып, иҫәп алыуҙы телефон аша үтергә тәҡдим итәләр икән, бер ниндәй ҙә мәғлүмәт бирергә ярамай", - тип иҫкәртә хоҡуҡ һаҡсылары. Иҫәп алыусы һеҙгә махсус таныҡлыҡ менән бергә паспорт күрһәтергә тейеш, шунһыҙ ул ғәмәлдә түгел. Урамда йәки ихатала һорау алыу ярамай.

"Әгәр иҫәп алыусы килгәндә өйҙә бер кем дә юҡ икән, ул почта йәшнигендә яҡындағы иҫәп алыу участкалары һәм иҫәп алыу бланкыларын үҙаллы "Госуслуги" сайтында тултырыу мөмкинлеге тураһында мәғлүмәт ҡалдыра, - тип аңлатма бирә Башстат. - Иҫәп алыусыларҙы таныуы еңел: улар Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбе-2020 махсус символикаһы төшөрөлгән жилетта була, махсус шарф урай һәм сумка йөрөтә. Мәғлүмәт биреүсе бер ниндәй ҙә документ күрһәтмәй, яуаптар уның әйткән һүҙҙәре буйынса яҙып алына. Иҫәп алыусының шәхесен яҡындағы иҫәп алыу участкаһына шылтыратып та асыҡларға була".

Ниндәйҙер шик булғанда, 102 йәки 112, шулай уҡ участка полицияһына шылтыратыу урынлы. Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу 15 октябрҙән 14 ноябргә тиклем барасаҡ. Иҫәпселәр штаты әҙерләнгән, уларҙың 84,5 проценты тажзәхмәттән вакцинацияланған. Иҫәп алыу ваҡытында улар шәхси һаҡланыу саралары менән тәьмин ителә. Иҫәп алыу участкаларында көн һайын еүешләп таҙартыу, бүлмәне елләтеү ойошторола, социаль дистанция һәм эпидемияға ҡаршы башҡа саралар ойоштоҙола. Мөһим кампанияның тәүге һөҙөмтәләре быйыл декабрҙә үк мәғлүм буласаҡ.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

## Организмды таҙартыу

❖ Эсәктәр, бауыр, бөйөрҙә таҙалау өсөн ҡабаҡ орлоҡтарын йыуырға, киптерергә һәм ҡаһүә тартҡыс ярҙамында онтарға. Ваҡланған орлоҡтарҙың 1 ҡалағына ярты литр ҡайнатып алынған йылы һыуҙы ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң яртышар стакан эсергә, берәр балғалаҡ бал өҫтәргә. Таҙарыныу мөҙҙәте - 3 аҙна. Был рәүешле таҙарынған осорҙа ҡабаҡ һутын өҫтәп эсеү, туҡланыуҙан аҡһымдарҙы (балыҡ, ит) алып ташлаһаң, тағы ла һөҙөмтәлерәк. Дауаланыуҙы йылына ике тапҡыр ҡабатларға була.

## Простатит

❖ Кипкәр (сушеница топяная), һары мәтрүшкә, ҡандала үләне (донник лекарственный), ҡаразирә (дурман), мәтрүшкә, етен үлән (льнянка), шифалы ромашка сәскәһе, юл япрағы, кесерткән, боланут, ҡайын, ҡара бөрлөгән япрағын ауырлыҡ буйынса тигеҙ үлсәп алырға. Киләп сыҡҡан йыйылмандың 100 грамына 2 литр ҡайнар һыу ҡойоп, йылыға төрөп 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне аҙнаһына ике тапҡыр ванна эшләү өсөн тотонорға. Ваннаны 15-20 минут инергә, температураһы 37-37 С булырға тейеш.

❖ Был сирҙән петрушка һуты һәм орлоҡтарынан төнәтмә ярҙам итергә мөмкин. Һутты петрушканың япраҡтары һәм тамырын ҡушып әҙерләйҙәр. Уны көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр балғалаҡ эсергә. Дауаланыу осоро - 20 көн, 10 көн туҡтап торғандан һуң ҡабатларға була.

Ә бына петрушканың он кеүек тартылған 2 ҡалаҡ орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, утҡа ҡуйырға һәм ҡайнар хәлгә еткәс, тағы ла талғын утта 15 минут торорға. Утты һүндереп 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 5-6 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

Ужегов петрушка орлоғон он итеп тартырға һәм шуның 4 балғалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 15 минут ҡайнатырға, һыуынғас һөҙөргә һәм көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә кәңәш итә.

❖ Шулай уҡ 1 ҡалаҡ ваҡланған дегәнәк тамырына ярты литр һыу ҡойоп, талғын утта 10-15 минут ҡайнатырға, шунан 40 минут төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда сирек стаканлап эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләнә.**

✓ Ә мине бер һорау борсой: Ноғман Мусиндың әҫәрҙәре буйынса кино төшөрөү мәсьәләһен Хөкүмәт кимәлендә кем һәм ҡасан күтәреп сығыр икән? Ә ниндәй эпик картиналар төшөрөргә булыр ине!



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

Башҡорттарҙың көнкүрешендә семәрләнгәнгә ҡарағанда буялған ағас әйберҙәр һирәгерәк ҡулланылған. Шулай ҙа рәсем төшөрөлгән әйберҙәр (һандыҡ һәм урын аяҡтары, һике, көштә, ҡайсаҡ ҡолға һәм һауыт-һаба) Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә осраған. Төҫлө биҙәктең колоритын һәм характерын тикшергән белгестәр рәсем сәнғәтендә көнсығыш традицияларына яҡын иртә ҡатламын айырып ҡарай. Бер үк ваҡытта һуңғы осорға ҡараған үҙләштереүҙәр ҙә табыла. Айырып әйткәндә, рус мәҙәниәтенең йоғонтоһо асыҡ күренә. Бигерәк тә күскенсе малсылар өсөн хас булмаған иләүестәрҙең тарағы йәки баштары, көйәнтә, дуға, ҡайһы бер ауыл мебеле кеүек әйберҙәрҙе буяғанда сағыла. Был осраҡтарҙа гәҙәттә үсемлек орнаменты ҡулланғандар: гөл һауыттарында һәм веноктарҙа сәскәләр, япраҡтар, төрлө-төрлө емештәр төшөрөлгән. Йыш ҡына биҙәк ҡара ерлеккә асыҡ төҫ һәм хатта аҡ буяу менән эшләнгән. Аҡһыл төҫтәр ҡулланылмаған. Һүрәт ҡара һыҙаттар һәм көкерсәктәр менән көсәйтелгән.



Биҙәкле дуғалар. БР-ҙың Белорет районы һәм Силәбе өлкәһе. Автор һүрәте (боронғо фотоларҙан).

XIX быуатта һәм XX быуат баштарында башҡорттарҙа ағас эшкәртеү производстволарының торошо социаль-иҡтисади шарттарға тығыҙ бәйле булған. XVIII быуаттағы ихтилалдарға бәйле батша хөкүмәте тарафынан башҡорт ауылдарында тимерселек тотоу тыйылыуы ағас эшкәртеүҙең үҫешен туҡтата, сөнки оҫталарҙың кәрәкле эш ҡоралдары булмай. Шуға ҡарамаҫтан көнкүреш кәрәк-яраҡтарын эшләүҙе дауам иткәндәр. Ҡайһы саҡта һәр кем үҙенә кәрәкле әйберҙе яһап алған. Оҫта ҡуллылар йыш ҡына ауылдаштары һәм күрше ауылдарҙағы халыҡ өсөн эшләгән. "Сәсәндең теле уртаҡ, оҫтаның - ҡулы уртаҡ", - тигәндәр халыҡта.

Капиталистик мөнәсәбәттәр үҫешкән һәм баҙар йөнләндерелгән һайын йорт һөнәрҙәре көсепкә әүерелә барған. Башҡорттар, урыҫтар һәм татарҙар ағас әйберҙәрҙе йәрминкә һәм баҙарҙарға ирекле һатыуға сығарған. Өфө өйәҙендә улыс үҙәге Иглиндә күп төрлө ағас әйберҙәр һатылған. Стәрлетамаҡ өйәҙе баҙарҙарында, Ағиҙел йылғаһы буйындағы Ҡормантау, Ҡарташ, Баҡраҡ, Үтәгән пристандәрендә, Табын ауылы пристанендә лә һатылған. Маҡар ауылында һәм өйәҙ үҙәге Стәрлетамакта оло баҙарҙар ойошторолған. Башҡортостандың көньяғында айырыуса Мәләүез һәм Йомағужа пристандәре, Мораҡ ауылында һатыу итеүселәр күп йыйылған. Көньяҡ Уралдың таулы ауылдарынан кәмә һәм һалдарҙа Ағиҙел буйлап Йомағужаға тиклем ағып төшеп, ағас әйберҙәрҙе тау юлдары буйлап Урал арьяғына сығып, Орск өйәҙенең Темәс, 1-се Эткол, Юлыҡ ауылдарында һәм башҡа төбәктәрҙә, Ырымбур тимер юлы станцияларында һатҡандар. Уралдың көньяҡ битләүҙәрендәге халыҡ Ырымбурҙағы Ҡарауанһарайға ла йөрөгән. Белорет, Ҡағы һәм башҡа тау заводтарында ла һатыу иткәндәр. Шулай ҙа башҡорт кәсепселәре етештергән әйберҙәрен һатыуҙа ҡатмарлыҡтар кисергән. Быны тикшеренеүселәр башҡорттарҙа эшҡыуарлыҡ тәжрибәһе юҡлығы менән аңлата. Шулай уҡ ауылдарҙың ҙур сауҙа үҙәктәренән алыҫлығы, юлдарҙың насар булыуы ла быға йоғонто яһаған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# НОҒМАН МУСИН ФЕНОМЕНЫ

**Ишембай районында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, "Салауат Юлаев", "Халыҡтар дуҫлығы" ордендары кавалеры, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Ноғман Мусиндың юбилей саралары уҙҙы. Яҙыусыны был сараларҙа Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе Зәки Әлибаев, Ишембай муниципаль районы хакимиәте башлығы Азамат Абдрахманов, гәзит-журнал редакторҙары, ҡәләмдәштәре оҙатып йөрөнө.**



Ярата халыҡ Ноғман ағайҙы. Ишембай ҡалаһының Мәҙәниәт һарайы шығырым тулы. Байтағы, Ноғман ағайҙың килеүен көтөп, Мәҙәниәт һарайының алдында тора әле. Тамаша залына инеп өлгөрмәгәндәр ҙә ярайһы күп кенә. 90 йәшкә еткән яраткан яҙыусыларын яҡындарыраҡ күреп, шәхсән хөрмәттәрен, иғтибарҙарын белдереп ҡалырғалыр иҫәптәре.

Һәм бына... таң һарыһынан юлға сығып, тыуған ауылы Ҡолғоналағы Йорт-музейында ҡәләмдәштәренә үҙе үк экскурсия үткәреп, белем алған мәктәбенә Ноғман Мусин исемен биреү тантанаһында ҡатнашып, шулай уҡ үҙенең исеме менән аталып йөрөтөләсәк аллеяға милләү ағастары ултыртып, ауыл клубында Гәүһәр Батталованың "Һайлап алған яҙмыш" фильмының исем туйын үткәреп, ауыл халҡы, уҡыусылар менән ике сәғәткә яҡын һуҙылған осрашыуҙан һуң Ишембай Ҡала мәҙәниәт һарайына килеп төштө олуғ әҙибебеҙ. Атлауҙары егеттәрсә әле, арыу тигән нәмәнең осмото ла юҡ - йөҙөндә нур, йылмайыу. Үҙен ҡаршы алырға сыҡҡан гөм халыҡты күреү менән эргәһендә килгән йәш ҡәләмдәше Мөнир Ҡунафинға: "Курткамды, кепкамды сисеп, һиңә тоттороһам, нисек булыр икән, ҡустым, бынау хәтлем халыҡ алдына юл кейемендә килеш барып баҫыу килешмәҫ", - тип, йәһәт кенә кейемдәрен сисеп, Мөниргә тоттороп ла "Юрматы" фольклор ансамбленең таҡмаҡтарына ҡушылып, бейеп тә китте. Халыҡ дәррәү ҡул сабып ебәрҙе. Һай, мәрҙәс! Һай, егетең!

Ҡунаҡ ҡаршы ала белә ишембайҙар. Мәҙәниәт һарайындағы тантананы дәртле бейеү менән "Бергамыт" халыҡ бейеүҙәре ансамбле асып ебәрҙе. Мин Ноғман ағайҙан күҙемде ала алмайым. Дәртле көйгә төшөп бейеп китерҙәй булып ихласлап ҡул сабып ултыра. Ә бына уны сәхнәләге юбилярға тәғәйенләнгән урынға саҡырып ултыртҡас, нисектер, уңайһыҙланған һымаҡ булды, хатта кесерәйеп киткәндәй күренде. Халыҡ араһында халыҡ менән бергә ултырыуҙан йән рәхәте кисереп ултырғандыр, күрәһең. Зиһене лә, тәне лә арымаған бит әле, юғиһә: һәр сығыш һаусыны иғтибар менән тыңлап, көләр ерендә көлөп, хәтирә-иҫтәлектәр һөйләгән мәлдәрҙә моңайып-һағышланып, яҙа-йөҙәрәк әйтелгән фекер-фактарға төҙәтмәләр индереп ултыра хатта. Баш сайҡап та ҡуйғылай - Ҡолғонала үткән сараларҙа уҡ башын сайҡап: "Артығыраҡ маҡтап ташланығыҙ түгелме?" - тигәйне. Артыҡ була тиме ни! 50-нән артыҡ китап авторы, һайланма әҫәрҙәренән генә лә 12 том тәҙәгән олуғ яҙыусы ултыра бит алдыбыҙҙа! Башҡорт әҙәбиәтендә былдай күренеш юҡ әлегә. Маҡтарлыҡ та, маҡтанырлыҡ та, ғорурланырлыҡ та уның ижад юлы. Ижад юлы ғына ла түгел, ғүмер юлы, булмышы!

...Ноғман Мусинды тәү башлап 7-се класта уҡығанда күргәйнем. Күрше Маҡар ауылы мәктәбендә яҙыусылар менән осрашыу була тигәс, дәрестәрҙән ҡасып барғайным тере яҙыусылар менән осрашыуға. Иртәгәһенә был ҡылығым өсөн атай-әсәйҙән ныҡ ҡына эләкте, әлбиттә: 4 саҡрым ара ҡыҙ бала өсөн арыу ғына юл, етмәһә, урман аша үтергә, тау менеп төшергә кәрәк - ҡурҡҡандарҙыр ҙа инде. Ә мин осрашыуҙан ҡанатланып ҡайтҡанмын: ана, Ноғман Мусин Маҡар менән Ҡолғона араһын, 30 саҡрым юлды, өс йыл буйына яҙлы-көҙлө - йәйәү, ҡыш көнө ҡалтағай менән йөрөп уҡыған. Урта белем алырға тип Маҡар мәктәбенә алтмышлап бала йыйылған, шуларҙың етәүһе генә тамамлай алған был мәктәпте. Етәүһе генә үтә алған уларҙың яҙмышына төшкән ҡаты һынауҙы! Минең өсөн ер аяғы-ер башы булып тойолған Ҡолғонанан Маҡарға белем алыу өсөн йәйәүләп йә ҡалтағай кейеп тауташ артылған егет образы мәңгелеккә аңыма һеңеп ҡайттым шул осрашыуҙан. Рухланып ҡайттым! Ошо образ белем алыуға ынтылыш булып, көс бирҙе миңә ғүмер юлымда, ҡанат ҡуйҙы, ауыр мәлдәремдә Алатау һыртын үрмәләгән ҡаҡса ғына кәүҙәле егеттең ныҡышмалылығын уйлап һынманым, бөгөлмәнем.

Ноғман Мусин менән тағы ла бер осрашыу хәтерҙә уйылып ҡалған мәктәп йылдарынан. Ауыл клубында бара ине осрашыу был юлы. Ҡапыл ғына клубта ут һүнде лә ҡуйҙы. Ҡараңғыла һүҙҙе Ноғман ағай алып, ике сәғәт самаһы халыҡҡа күргән-белгәндәренән тормош һабаҡтары һөйләне. Берене-бер тауышланһаһыс! Берене-бер клубты ташлап сығып китһәсе! Бөгөн ҡағыҙҙан күҙен алмай һөйләгән оратор-депутаттарыбыҙ, етәкселәребеҙ ошо хәлдә ҡалһа, нимә эшләр ине икән? Шул хаҡта уйлайым да, Ноғман ағайҙың әле лә фекер ебен юғалтмай фәһемле һәм мауыҡтырғыс итеп һөйләй алыуына тағы ла бер хайран ҡалам.

Шул осрашыуҙан һуң әллә күпме ғүмер уҙҙы. Шәхсән үҙем сценарист та, алып барыусы ла булдым Ноғман Мусин ҡатнашлығында ойошторолған төрлө кимәлдәге сараларҙа. Уларға әҙерлек барышында ла, яҙыусы тураһында сәхнәнән ҡәләмдәштәре һөйләгән һүҙҙәрҙе тыңлап та, тел шартлатып, аптырау ҡатыш һоҡланған саҡтар күп булды. Быйылғы юбилейҙа ишеткәнем йәнә бер тетрәтте. Ҡолғона менән Маҡар араһын арҡаһына бер тоҡ тоҙ йөкмәп тә үтә Ноғман ағай: шул тоҙҙо һатып, аҡса эшләп, һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа әсәһенә, өс апаһына нисек тә булһа ярҙам итергә тырыша. Тогоноң ауырлығынан баҫылып, арҡа тиреһе һыҙырылып сыға, һыҙырылған ерҙәре сыҙап булмаҫлыҡ әсетә, барыбер түҙә нығыш егет - шулай сынығыу ауырлыҡтарҙы күтәрергә. Аҡса эшләүҙең икенсе еңелерәк юлын да таба ул: сабата үрергә өйрәнеп ала. Сабатасылар күп ауылда, әммә уның һымаҡ оҫта итеп бәрәү ҙә үрә алмай. Сабаталарын бер ҡаҙаҡ майға, шулай уҡ оҫта итеп үргән галуштарын ике ҡаҙаҡ майға алыша. Эшкә өйрәтергә атаһы булмаһа ла ағастан өҫтәл, ултырғыстар эшләргә лә өйрәнә, умартасылыҡ, солоҡсолоҡ серҙәренә лә төшөнә. Ауылдағы йорт-музейында үҙ ҡулдары менән үргән сабаталар урын алған - бала саҡ иҫтәлеге, умарта, солоҡ ҡорамалдары ла бар - йәшәүҙән йәм-тәм табып, ҡорған ояны бөтәйтеү телә-генән өйрәнелгән һөнәрҙәр. Ҡулы эш белгәс ни, йөрәге тормош һалған яраларҙан һыҡраған мәлдәрҙә күңелен бөтәйтеү өсөн дә тотона ул был һөнәрҙәргә - яраларын шулай дауалай. Ә Өфө янындағы "Аҡлан" тип аталған ижад йортонда үҙ ҡулдары менән ағастан тәҙәгән өйө - урман йырсыһының тын алышын тойоп-белеп торған ижад Мәккәһе. Алға китеп фекер йөрөтөүҙән ҡурҡам, шулай ҙа әҙәбиәттә Ноғман Мусин феноменын өйрәнергә Рәсәй, донъя кимәлендә фекер йөрөткән әҙәбиәт һәм сәнғәт әһелдәре тап ошо йортҡа төбәп килерҙәр һымаҡ...

Юғары кимәлдә үтте оло яҙыусының оло юбилейы. Тантананан рух, көс, фәһем-һабаҡ алып ҡайтыусылар ҙа, ҡайтҡас, яҙыусының китаптарын ҡулдарына алып уҡырға теләүселәр ҙә булғандыр. Ә мине бер һорау борсой: Ноғман Мусиндың әҫәрҙәре буйынса кино төшөрөү мәсьәләһен Хөкүмәт кимәлендә кем һәм ҡасан күтәреп сығыр икән? Ә ниндәй эпик картиналар төшөрөргә булыр ине! Ниңә, Ноғман Мусиндың "Мәңгелек урман"ы Анатолий Ивановтың күп сериялы кинокартина төшөрөлгән "Мәңгелек ауаз" ("Вечный зов") роман-эпопеяһынан кәммә ни! "Шунда ята батыр һөйәге", "Һайлап алған яҙмыш", "Йыртҡыс тиреһе", "Шайтан ҡуласаһы" әҫәрҙәре лә беҙҙең барлығыбыҙҙы, булмышаслылығыбыҙҙы, күргән-кисергәндәребеҙҙе кино сәнғәте аша донъя кимәлендә танытырлыҡ әҫәрҙәр бит!

Ҡолғонала Ноғман ағай киләсәк капсулаһына хат яҙғайны. Ул хат 2031 йылда асыласаҡ. Ошо хатта яҙыусы: "Әҫәрҙәрем буйынса фильмдар төшөрөлһә ине", - тигән теләк яҙманымы икән, тим?

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА,**
**шағирә,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған**
**уҡытыусыһы.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите




# Шифа

9-15 октябрь (ҡарасай)
2021 йыл
№41 (979)


СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Арыны... Барыһы ла. Халыҡ битлектәр кейеүҙән, һаҡланып йөрөүҙән, эргә-тирәһендәге кешеләрҙән шикләнеүҙән, етәкселектең көн һайын һаҡланыу зарурлығы тураһында тылҡып тороуынан, табиптар сирлеләрҙе әжәл тырнағынан йолҡоп алыу өсөн көрәшеүҙән. Әммә тажзәхмәт бирешергә уйламай һәм саҡ ҡына йомшаҡлыҡ күрһәтеүҙе аңдып ҡына тора. Ҡабат-ҡабат ошо темаға урап ҡайтыу һәм ниндәйҙер кимәлдә халыҡ күңеленә хәүеф һалыу ҙа арытты. Ләкин көршәк ватылғанға тиклем киҫәтеп тороу файҙалыраҡ. Шуға ла бөгөн медицина фәндәре докторы, вирусолог Марсель ТОЙҒОНОВ менән тағы ла коронавирус һәм уның мәкере тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

# ТЫНЫСЛАНЫРҒА ИРТӘРӘК...

## тажзәхмәт йоҡламай

**➔ Тажзәхмәт сирен ана бөтә, бына кәмей, тип өмөтләнһәк тә, ул беҙҙең тормошобоҙға киҙеү кеүек үк мәңгелеккә килеп инде һәм уның яңынан-яңы штамдары барлыҡҡа килә башланы. Улар тәүгеләренән нимәһе менән айырыла һәм ниндәй билдәләр менән үҙен һиҙҙертә?**

- Коронавирус вирусы беҙгә, йәғни медиктарға, электән билдәле ине, әммә уның ҡурҡыныс булыуы һуңғы осорҙа ғына үҙен һиҙҙерә башланы, сөнки ул ауыр атипик пневмонияға (SARS) килтерә. Һөҙөмтәлә күп кеше вафат була. Был вирустың төп үҙенсәлеге булып үпкәнең зарарланыуы, елһенеүе, ялҡынһыныуы, ҡандың ҡуйырыуы һәм тромбтар барлыҡҡа килеүе тора.

Быға тиклемге әңгәмәләрҙә лә әйткәнем булды: был штамдар - кеше ҡулы менән эшләп сығарылған коронавирус нигеҙендә барлыҡҡа килгән төрҙәр. Уларға киҙеү вирусының мутация килтереп сығара торған гендары ла ҡушылған, шуға күрә ул үҙенең тышҡы ҡиәфәтен йыш ҡына үҙгәртергә һәләтле. Уның таға ла бер кире үҙенсәлеге бар: әгәр киҙеүҙе беҙ миҙгел сире тип ҡараһаҡ, йәғни ул яҙлы-көҙлө генә таралһа, тажзәхмәт йыл әйләнәһенә туҡтамай хәүеф тарата.

*__Өфөнөң Дим районы 3-сө дәүләт клиник дауаханаһы баш врачы Фәнил Шәмиғолов:__ "Республикала июлдең икенсе яртыһынан алып коронавирус инфекцияһын йоҡтороусылар һаны арта, яңы ковид-госпиталдәр асыла. Вирус штаммы мутацияға бирелә, сир үҙен башҡа төрлө күрһәтә, элекке схема буйынса дауалап булмай. Һөҙөмтәлә вирусты дауалау буйынса йыл ярым эсендә 12-се тәҡдим индерелде. Ковидҡа ҡаршы индерелгән яңы сикләүҙәр үҙ ваҡытында ҡабул ителде. Үҙеңде, яҡындарыңды, хеҙмәттәштәреңде вирустан һаҡлау өсөн вакцинация үтеү мөһим. Битлек кейеү, йәмәғәт урындарына йөрөүҙән тыйылыу - быларҙың барыһы ла ауырыусылар һанын кәметәсәк".*

**➔ Вирус тарала башланғанда үҙкурсаланыуға ныҡ иғтибар бирелһә, бөгөн төп иғтибар үҙәгендә - вакцинация. Уны кемдәргә эшләтергә ярай, кемдәргә ярамай, сөнки "Юлдаш" радиоһындағы әңгәмәгеҙҙә, антиматдәләре булған кешеләргә эшләтмәй торһа ла була, тип кәңәш иткәйнегеҙ. Йәғни вакцина эшләтеү алдынан кеше ниндәй ҙә булһа тикшереү үтергә тейештер бит, әллә бер ниндәй тикшереүһеҙ барып эшләтергә лә мөмкинме һәм һуңынан уның кире тәьҫире (побочный эффект) күҙәтелмәҫме?**

- Вакцинацияның төп маҡсаты - кемдәр әлегә был сир менән ауырымаған, шуларҙың ҡанында вирусҡа ҡаршы торорлоҡ матдәләр барлыҡҡа килтереү. Әммә бөгөн күреүебеҙсә, ауырып һауыҡҡан кешеләргә лә, бөтөнләй ауырымағандарға ла мәжбүри рәүештә вакцина яһаталар. Мин быға ҡаршымын, сөнки вакцинаның төп бурысы - организмды ошо коронавирустың антигендары менән таныштырыу. Был осраҡта, әлбиттә, вакцинацияның һөҙөмтәһе була һәм ул кәрәк тә. Ә бына ауырыуҙы үткәргән кешеләргә көсләп прививка яһатыу, минеңсә, маҡсатҡа ярашлы, дөрөҫ түгел, сөнки ауырығандан һуң кешенең организмында былай ҙа антиматдәләр барлыҡҡа килә, һәм йәнәһе лә, вакцинация эшләтеп, уның организмын тағы ла көсәйтәбеҙ. Ауырып һауыҡҡан һәм организмында антиматдәһе булғандар, шулай уҡ сирләмәйенсә вакцинация эшләткәндәрҙең организмы артабан һәр ваҡыт коронавирусҡа ҡаршы тора ала, әгәр ҙә вирус үҙенең антигендарын үҙгәртмәһә. Әгәр вирус антигендарын 50 процентҡа йәки тулыһынса үҙгәртһә, ул коронавирус тип аталһа ла, яңы инфекция формаһында үтәсәк, йәғни вакцина эшләткән хәлдә лә, коронавирус менән сирләп, организмда антиматдәләр барлыҡҡа килгән осраҡта ла кеше яңы инфекция менән барыбер ауырыясаҡ.



**➔ Һуңғы ваҡытта коронавирустың вирус түгел, ә бактерия булыуы тураһында ла хәбәрҙәр ишетелеп ҡала. Ғәмәлдә, ул вирусмы, әллә бактериямы?**

- Коронавирус, әлбиттә - ул вирус. Уны бактерия тип атау бер аҙ хаталыраҡ. Әммә ни өсөн вирусты һуңынан антибиотик менән дауалайҙар, тип һорарға мөмкиндәр. Күҙ алдына килтерһәгеҙ, вирус иң элек беҙҙең тын алыу юлдарына ултыра, үпкә ялҡынһынып, шешеп, уның күҙәнәктәре боҙола. Артабан ул ҡанға эләгеп, организмды тулыһынса баҫып ала. Ошо лайлалы боҙолған урында интакт эпителияның араһынан үтә алмаған бактериялар үрсей башлай. Шуға күрә вирустан һуң бактериаль инфекция өҙлөгөүе күҙәтелә. Улар бергә суперинфекция барлыҡҡа килтерә, шуға күрә кемдәр ауыр формала ауырый, уларға, әлбиттә, антибиотиктар тәғәйенләнә.

*__СПИД-ты һәм йоғошло ауырыуҙарҙы иҫкәртеү һәм көрәш буйынса республика үҙәге баш врачы Рафаэль Яппаров:__ "Сикләү саралары ауыр булып тойолор, әммә беҙҙең барыбыҙ хаҡына уны индереү кәрәк. Хәҙер тағы ла граждандар хоҡуғы боҙолоу, бизнесҡа ҡаршы баҫым тураһында хәбәрҙәр ҡуйырасаҡ. Иҡтисадтың туҡтап тороуы хаҡында ла күп һүҙ буласаҡ. Әммә ошондай темп менән сир таралғанда һәм вафат булыусылар һаны артҡанда тиҙҙән иҡтисад бөтөнләй булмаҫҡа мөмкин. Әлеге ваҡытта һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә, ковид-госпиталдәргә ҙур финанс ресурстар йүнәлтелә. Ә прививка бушлай һәм ошо сығымдарҙан һаҡлар ине. Беҙҙең врачтарҙың көсө һәм энергияһы тағы күпмегә етер, белмәйем..."*

**➔ Республикала тажзәхмәт менән сирләүселәргә ниндәйҙер даими күҙәтеү алып барыламы, сөнки сирҙе үткәреүселәр ярты йылдан һуң да уның эҙемтәһен күрергә мөмкин, тиҙәр, әллә улар сирләй ҙә, дауаланып сыға ла, үҙҙәре лә, табиптар ҙа, республика етәкселеге лә тынысланала ла ҡуямы?**

- Әлбиттә, был вирусты эләктереп, дауаланып, һауыҡҡансы кешеләрҙең организмы бик ныҡ ҡаҡшай. Күп осраҡта кеше өйҙә ошо ауырыуҙың эҙемтәләре менән көрәшә. Был осраҡта, әлбиттә, күп дарыуҙар, антибиотиктар ҡабул итеп, организм шул тиклем интоксикациялана, шуға күрә токсиндарҙы сығарып бөтөрөргә, нормаль флораны тергеҙергә кәрәк. Республикала былай ҙа был сир көслө, табиптарҙың сирләүселәрҙең артабанғы яҙмышы менән ҡыҙыҡһынырға, уларға реабилитация тәғәйенләргә, күҙәтеп торорға ваҡыты ла ҡалмай. Әммә сәләмәтлеген ныҡлап тергеҙергә теләүселәр үҙҙәре дауаханаларға йәки шәхси клиникаларға барып, реабилитация ярҙамы алырға мөмкин.

**➔ Врач-эпидемиолог, медицина фәндәре докторы, профессор Игорь Гундаров прививкалар һаны һәм төрлө илдәрҙә үлем осраҡтарын анализлаған һәм ошондай һығымтаға килгән: "Ярлы илдәрҙә ковидтан үлеү 1 миллион халыҡҡа 60-100 осраҡ булһа, бай илдәрҙә - 1000-дән артыҡ", йәғни ҡайҙа прививканы күберәк эшләтәләр, шунда үлем осраҡтары күберәк. Ошо хаҡта нимә әйтерһегеҙ?**

- Ярлы һәм бай илдәрҙең ауырыуҙары төрлөсә. Әйтәйек, ярлы илдәрҙә шәкәр сире, яман шеш кеүек сирҙәр күп түгел, әммә уларҙа туберкулез, ниндәйҙер инфекциялар ныҡ таралған. Бай илдәрҙә кешеләр күберәк йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы, юғары ҡан баҫымы, шәкәр сире менән ауырый. Йәғни был ике категорияны сағыштырып ҡараһаң, ауырыу сифаты ла, үлем осрағы ла төрлөсә. Коронавирустың тәү сиратта шәкәр сире менән яфаланыусыларға зыяны ныҡ ҙур. Күп осраҡта улар вафат була йәки сирҙе ныҡ ауыр үткәрә. Ярлы, бай илдәр тигәндә, коронавирустың эҙемтәһе туранан-тура ошо сирҙәргә бәйле.

**➔ Вакцина яһатҡандан һуң ғына кешелә вирусҡа ҡаршы иммунитет барлыҡҡа килә, йәиһә вакцинациянан һуң ғына коллектив иммунитет барлыҡҡа килә, тиҙәр, ә кешенең үҙенең иммунитеты вирус менән үҙаллы көрәшә алмаймы, ғөмүмән, иммунитет һәм коллектив иммунитет нисек барлыҡҡа килә?**

- Кеше организмында вирусҡа ҡаршы тора алған берҙән-бер матдә - ул интерферон. Ни өсөн бәләкәй балалар, йәштәр әҙерәк ауырый? Уларҙың организмында ошо интерферон күпләп барлыҡҡа килә, шуға улар вируслы инфекцияны еңел формала ғына үткәрә. Олоғая килә интерферон әҙерәк барлыҡҡа килә һәм кеше нығыраҡ ауырый.

Коллектив иммунитет - ул күпселек кешелә ошо вирусҡа ҡаршы антиматдәләр барлыҡҡа килеү. Антиматдәләрҙе барлыҡҡа килтереүҙең ике генә юлы бар - йә кеше ауырыуҙы үткәрергә тейеш, йә вакцина эшләтергә. Антиматдәләр халыҡтың 60-70 процентында барлыҡҡа килһә, шул торош коллектив иммунитет тип атала, йәғни йәмғиәт вирусҡа ҡапыл ғына бирешеп бармай.

**➔ Бөгөн ковидтан үлеүселәр буйынса көндәлек статистика бирелеп бара, ә бына башҡа үлем осраҡтары буйынса мәғлүмәттәр ниндәй икән? Ошо һандарҙы сағыштырып ҡарағанығыҙ йәки ошо турала уйланғанығыҙ юҡмы?**

- Әлбиттә, ниндәй ауырыуҙан йәки ниндәй сәбәптән үлеү осраҡтары теркәлеп бара, әммә мине шундай һандар тетрәндерҙе: быйыл Башҡортостанда йылдың тәүге яртыһында 40 мең бала тыуһа, үлем осрағы 60 мең булған, йәғни үлем тыуымдан артып киткән. Әлбиттә, бында ҡартайып үлеүселәр ҙә, башҡа сирҙәрҙән вафат булыусылар, юл-транспорт ваҡиғаларында һәләк булыусылар һ.б. барыһы ла инә. Әгәр уҙған, ковид хаҡында бөтөнләй ишетмәгән йылдарҙа тыуым-үлем кимәле бер тигеҙ булған тип ҡараһаҡ (тыуымдың үлемдән артығыраҡ булыуы ла мөмкин), тимәк, быйыл 20 мең кеше артығыраҡ үлгән һәм уның төп сәбәбе коронавирусҡа бәйле, тип әйтергә була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аналитиктар фаразлауынса, октябрҙә тажзәхмәттең сираттағы тулҡыны күтәлә. Был турала Марсель Тойғонов: "Коронавирус пандемияһын бер нисек тә алдан күҙаллап булмай. Әгәр былтырғы йыл мәғлүмәттәрен алып ҡараһаҡ, һыуыҡтар башланғас кешеләрҙең күпләп ауырыуы күҙәтелгәйне. Әлеге ваҡытта вирустың кәмеүе тойолмай, даими тылҡып тормағас, халыҡ та һаҡланыу сараларын күҙ уңынан ыҫҡындырып ебәреүе мөмкин. Шуға быйыл да ошо ваҡытта сираттағы тулҡын килеүе бик тә ихтимал", - тип белдерә.**

**Арытты... Әммә тынысланырға иртәрәк әле...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

*әйткәндәй...*



# ВАКЦИНАМЫ,
## әллә реанимациямы?

**Йәмғиәттә вакцинация тураһында бәхәстәр тынмай, мин дә был көнүҙәк мәсьәләнән ситтә тора алмайым, сөнки күптәр шылтыратып кәңәш һорай. Үҙем дә күптән түгел Covid-19 менән сирләнем, шәхсән үҙем был яуыз сирҙең 55 йәштән өлкәндәрҙә нисек ағышын күрҙем һәм тойҙом, шуға күрә кемгә медицина күрһәткестәре буйынса сикләүҙәр юҡ, мотлаҡ прививка эшләтергә тәҡдим итәм!**

Был кәңәште мәжбүри прививка эшләтеүҙең матур булмаған ысулдарын хуплағандан бирмәйем. Юҡ. Шәхсән үҙем "тажлы тамуҡты" уны йоҡторғандан алып, яйлап һауыҡҡанға тиклем үттем, үҙемде лә, башҡаларҙы ла был заман афәтенән ҡурсалау өсөн тәжрибәм һәм башҡаларға кәңәш бирергә әхлаҡи хоҡуғым барҙыр, тим. Мин хатта "Тажлы тамуҡ" тип атап, ҙур булмаған әҫәр яҙҙым. Унда үҙем үткән тамуҡ тураһында һөйләргә, ауырыуға тарығанда кешелек йөҙөн юғалтмаҫҡа тырышырға кәрәк икәнде еткерергә теләйем, ни тиһәң дә, был сир иң кешелекле сифатты - хәтерҙе, аҡылды, үҙ-үҙеңә ышанысты үлтерә.

Госпиталдәрҙә ысынлап та беҙҙең көн геройҙары - табиптар, шәфҡәт туташтары һәм егеттәре, фельдшерҙар, санитарҙар, ашнаҡсылар, ауыр сирлеләрҙе тәрбиәләүсе хеҙмәткәрҙәр эшләй. Мин йәш егет һәм ҡыҙҙарҙың, БДМУ-ның өлкән курс студенттарының төндәр буйы йоҡламай дежур итеүен, ауырыуҙар өсөн йөҙҙәрсә һауыттарға система һәм инъекция өсөн дарыуҙар бүлеүен, конверттарға меңдәрсә төймә дарыуҙар һалыуын, ауыр сирлеләр өсөн ашарға ташыуын, уларҙы тәрбиәләүен, һәр саҡ тәртип һәм таҙалыҡ булдырыуын күрҙем. Уларҙың көн һайын, сәғәт һайын махсус кейемдәрҙә пациенттар эргәһенә килеүен, үҙҙәренә вирус йоҡтороу мөмкинлегенә ҡарамаҫтан, ауыр сирлеләр менән һөйләшеүҙәрен, ауырыуҙарҙа һауығыуға ышаныс тыуҙырыуҙарын, үҙҙәренең бурысын намыҫ менән башҡарыуын күрҙем.

Ковид госпиталдәрендә аҡ халатлы кешеләрҙең яуыз сир менән һәр кеше ғүмере өсөн ысын мәғәнәһендә һуғыш бара һәм был ялтырауыҡлы һүҙҙәр түгел. Мин уларҙың барыһына ла рәхмәт белдерәм һәм ошо ауыр көрәштә һаулыҡ, уңыштар теләйем.

Әле миндә антиматдәләр күләме етерлек, әммә улар кәмеп, прививка эшләтергә кәрәк булһа, мин мотлаҡ был процедураны үтәсәкмен. Быны мин аңлы рәүештә эшләйәсәкмен. Шуға күрә минең кәңәшем - прививка эшләтегеҙ һәм был дөрөҫ ҡарар буласаҡ! Барығыҙға ла һаулыҡ һәм сәләмәтлек теләйем!

**Ғарифулла ЯПАРОВ.**

*ҡыҙыҡлы әңгәмә*

**Билдәле булыуынса, Башҡортостандың балалар хирургияһы илдә новаторҙар иҫәбендә. Торакоскопик хирургия кеүек яңы алым да республикала барыһынан да алдараҡ барлыҡҡа килде. Башҡортостан табиптарының Рәсәйҙә генә түгел, ә донъяла тәүгеләрҙән булып балаларға ошо ысул менән операция яһауы ғына ла күп нәмә тураһында һөйләй. Бөгөнгө медицинаның иң мөһим тармаҡтарының береһе булған балалар хирургияһын үҫтереүҙә Башҡорт дәүләт медицина университетының балалар хирургияһы кафедраһы профессоры Роза Хөрмәт ҡыҙы ШӘНГӘРӘЕВАның да өлөшө ҙур. Балаларҙың хирургик сирҙәре үҙенсәлектәре, хирургтың һөнәри һәм фәнни эшмәкәрлеге хаҡында гәзит уҡыусыларыбыҙға медицина фәндәре докторы менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

# БАЛАЛАР ХИРУРГИЯҺЫ...
## ҡатын-ҡыҙ эшеме?

**Роза Хөрмәт ҡыҙы, һеҙ ҡатын-ҡыҙҙар араһында һирәк осрай торған хирург һөнәрен һайлағанһығыҙ. Етмәһә, балалар хирургыһығыҙ. Был һөнәрҙе һайлау юҡтан ғына булмағандыр?**

- Баш ҡалабыҙҙа урынлашҡан абруйлы мәктәптәрҙең береһен, хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын тамамлағандан һуң Башҡорт дәүләт медицина институтының педиатрия факультетына уҡырға индем. Өсөнсө курсҡа күскәс, юғары уҡыу йортонда эшләгән хирургия буйынса фәнни түңәрәккә йөрөй башланым. Медицинаның был ҡатмарлы һәм, әйтергә кәрәк, бик мөһим өлкәһе мауайҙар. Ваҡытында талапсан да була белделәр, көнелдә үҫтерерлек һүҙҙәр ҙә таптылар. Тап ошо уҡытыусылар диагностикала хаталанған кешеләрҙе тәнҡитләмәҫкә, ә хаталарҙы анализлап, артабан яңылышыуҙарға юл ҡуймаҫҡа өйрәтте. "Хеҙмәттәшеңдең хатаһы арҡаһында үҙеңде күтәрмә, хирургия коллектив эш, анализ яһа, өйрән!" - тип әйтә торғайнылар.

1993 йылда клиник ординатураға уҡырға индем, шул уҡ ваҡытта әүҙем рәүештә операция ла эшләй башланым. Айытбай Әхмәт улы Ғүмәров етәкселегендә балаларҙың бауыр эхинококкозын лапароскопия ысулы менән дауалау темаһы буйынса кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлағас, республика балалар дауаханаһы баш врасөлә рухлы булды. Дүрт бала үҫтек. Ғаиләбеҙҙә тик йылы һәм матур мөнәсәбәт кенә күрҙек. Беҙҙең ҡарарҙы, беҙҙең фекерҙе хөрмәт иттеләр, ышандылар, дәртләндерә белделәр. Хирург булырға теләүемде белгәс, атайым, бик ауыр һөнәр һайлайһың, әммә һинән яҡшы белгес килеп сығырына шигем юҡ, тине. Ҡәҙерле кешеләреңдең ышанысын тойоу бик мөһим бит ул. Бер ҡасан да, хирург ҡатын-ҡыҙ эше түгел, бармa, тип әйтмәне. Тормош иптәшем Таһир Әҙип улы ла эшемдең ни тиклем яуаплы икәнлеген аңланы.

Уҡыған мәктәбемә килгәндә инде, ул минең тормошомда иҫ киткес ҙур роль уйнаны. Үрҙә уҡытыусыларҙан бәхетем булды тип әйткәйнем инде. Тағы ла ҡабатлап әйтәм: уҡытҡан педагогтарымдан уңдым! Тормош юлымда Ватанына, туған һөхитенә, туған теленә, эшенә, һөнәренә тоғро булған шәхестәрҙе осратыуым өсөн яҙмышыма рәхмәтлемен. Мин уларҙы әле лә бик йылы хистәр менән иҫкә алам: Мәхтүмә Ислам ҡыҙы, Ильвира Федоровна, Луиза Баян ҡыҙы, Алма Сәлмән ҡыҙы төплө белем бирҙе. Тәрбиәселәр Фәүзәнә Әйүп ҡыҙы, Фәүзәнә Ҡыям ҡыҙы беҙҙең икенсе әсәй булды, бик матур тормош һабаҡтары бирҙе.

Буласаҡ һөнәремде күҙаллағанда һәр ваҡыт тере кеше менән эшләүемде күҙ алдына килтерҙем. Биология дәресен яраттым. Ә медицина институтына инеүем үҙенән үҙе килеп сыҡты. Мин унда барыуымды күптән үк хәл итеп ҡуйған инем кеүек...

нән ныҡлы ҡыҙыҡһынып китеүемдә, һис шикһеҙ, уҡытыусыларымдың роле ҙур булды. Уларҙың студенттарҙа булған һәләтте асыуға етди иғтибар биреүе ул замандың һаулыҡ һаҡлау тармағына күпләп көслө һәм белемле белгестәр йәлеп итте. Ғөмүмән, мине мәктәптә, институтта уҡығанда ла, эшләгән урынымда ла һәр ваҡыт үҙ һөнәренә, эшенә мөкиббән киткән белгестәр генә уратып алды. Улар минең һөнәри үҫешемдә иҫ киткес ҙур роль уйнаны.

Шулай, сираттағы имтихан тапшырған ваҡытта уҡытыусым Менәүәрә Ғабдрафиҡ ҡыҙы Мәүлетова: "Хирургия тураһында бик яратып һөйләйһең, үҙеңде ошо өлкәгә арнарға теләмәйһеңме?" - тип һаҡ ҡына һораны. Түңәрәктә шөғөлләнгәндә был тармаҡ мине, ысынлап та, үҙенә ныҡ йәлеп иткәйне. Хирургия йүнәлешен һайлауымда Шәрифйән Сәғизулла улы Ишемовтың да тос өлөшө бар. Ул бик күп белем һәм тәжрибә бирҙе миңә. Артабан балалар хирургияһы буйынса субординатураға алдылар. Алтынсы курста уҡығанда беренсе тапҡыр хирург яҙамсыһы булып ҡулға скальпель алдым. Интернатура үткән 17-се дауаханала көслө хирург Эдуард Закир улы Саватеев күп тәжрибә бирҙе. Тап шул ваҡытта бик әүҙем рәүештә операциялар яһай башланым. Шулай уҡ медицина институты доценты Фатих Хисаметдин улы Ғайнанов ҡулы аҫтында эшләүем менән бик бәхетлемен. Ул ашығыс хирургия яҙамы, дөрөҫ диагностика эшләргә өйрәтте. Ғөмүмән, һөнәри үҫеш юлымда күп осраны унчының хирургия буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләнеләр. Күп эшләнде ул йылдарҙа. Үҙ эшенә мөкиббән киткән ысын һөнәрмәндәр менән эшләргә насип булды. Көслө команда ине. Баш врач Ринат Шәймулла улы Хәсәнов инициативаһы менән неонатология, онкогемотология, нейрохирургия, травмотология бүлексәләре асылды. Сколиозға, шулай уҡ бөйөрҙә күсереп ултыртыу кеүек һәм башҡа ҡатмарлы операциялар бик юғары кимәлдә эшләнде.

2004 йылда шул уҡ бауыр һәм үпкә эхинококкын төрлө ысул менән дауалау темаһы буйынса докторлыҡ диссертацияһы яҡланым. Әлеге ваҡытта Башҡорт дәүләт медицина университетында уҡытам, шулай уҡ 17-се дауаханала хирургия буйынса эшмәкәрлекте дауам итәм. Ауыр операцияларҙы бергә эшләйбеҙ, үҙ тәжрибәмде йәштәр менән йомарт уртаҡлашам, сөнки остаздарым хирургия һөнәре серҙәрен генә өйрәтеп ҡалманы, ә уны киләсәк быуынға еткереү бурысын да ҡуйҙы.

**Үҙегеҙҙең ошо һөнәргә тиклемге тормош юлығыҙ, атай-әсәйегеҙ, уҡыған мәктәбегеҙ тураһында ла һөйләп үтһәгеҙ ине...**

- Сығышым менән Иглин районы ҡыҙымын. Атайым Хөрмәт Кәшбит улы - Салауат районы башҡорто. Мәктәп директоры итеп ошо тарафҡа эшкә ебәрелә һәм әсәйем Сәғдиә Фәсхетдин ҡыҙын осратып, ғаилә ҡоралар. Ҡәҙерле кешеләребеҙҙең икеһенең дә донъяға ҡарашы киң ине, икеһе лә

**Балалар хирургияһы тураһында ентеклəберәк һөйләгеҙ әле. Ысынында, балалар һау-сәләмәт булып тыуа, тип уйлайбыҙ. Уларҙы хирург бысағы аҫтына ятырға ниндәй сәбәптәр мәжбүр итә һуң? Балаларҙың хирургик сирҙәре киң таралғанмы?**

- Балалар хирургияһына 18 йәшкә тиклемгеләр инә. Был - бик ҡатмарлы һәм яуаплы өлкә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, кескәйҙәр араһында хирургия ысулы менән дауалай торған ауырыуҙар күп. Миҫалға, эсәк, бауыр, үпкә сирҙәрен килтерергә мөмкин. Уның сәбәптәре төрлө, әлбиттә, генетик, экологик йәһәттән, тыумыштан барлыҡҡа килгәндәре лә бар, шулай уҡ атай-әсәйҙәрҙең ҡарап еткермәүе арҡаһында сиргә дусар булғандар ҙа байтаҡ.

Ғөмүмән, һәр бер осорҙа балаларҙың үҙенә генә хас сирҙәре була. Мәҫәлән, шуҡ балалар йышыраҡ йәрәхәтләнә. Быйыл ғына күпме бала тәҙрәнән осоп төштө. Бында, әлбиттә, өлкәндәрҙең иғтибары етмәүе - төп сәбәп. Йыш ҡына ярамаған әйберҙе йотоп, дауаханаға эләгәләр. Һуңғы осорҙа бигерәк тә бәләкәй батарейкаларҙы йотҡан балалар күп. Улар бик хәүефле. Аш һеңдереү юлын яндырыуға өс сәғәт етә. Ваҡ әйберҙе танауына тығып, хирургҡа мөрәжәғәт итеүселәр ҙә бар. Һуҡыр эсәк елһенеүе лә балаларҙа йыш осрай хәҙер. Уны ла үҙ ваҡытында асыҡлап, мәлендә операция эшләү врачтың тәжрибәһенә, белеменә бәйле. Тән ағзаларының дөрөҫ урынлашмауы арҡаһында ла хирургия алымын ҡулланырға тура килә.

✔ **_Һуңғы осорҙа Башҡортостанда вирустың ныҡ таралыуы билдәле. Унының сәбәбен санитар-эпидемиология эшенең эҙмә-эҙлекле булмауынан күрәм. Сирҙең иң аҙған ваҡытында ҙур-ҙур форумдар үткәреү кәрәкмәй ине, минеңсә._**



Оло кешенән айырмалы, бала үҙенең ҡайһы ере ауыртҡанын әйтә, аңлата белмәй. Йәш организм ҙа өлкәндәрҙекенән айырыла. Улар тиҙ үҫә, матдәләр алмашыныуы ла күпкә етеҙерәк. Ҡайһы саҡта уның сирен билдәләр өсөн төнө буйы сабый йоҡлаған ваҡытта күҙәтеп ултырырға ла тура килә. Шунһыҙ, дөрөҫ диагностикалау мөмкин түгел.

Бынан бер нисә йыл элек Башҡортостанда йәшәгән балаларҙа эхинококкоз сире нык таралғайны. Бик күптәрен тик операция эшләү юлы менән дауаларға тура килде. Был ауырыу бигерәк тә ауыл хужалығы, дөрөҫөрәге, малсылыҡ нык үҫешкән районарҙа таралғайны. Эпидемиология хеҙмәте менән берлектә ҙур эш алып барылды һәм, әйтергә кәрәк, уны тулыһынса еңеүгә өлгәшмәһәк тә, таралыуына юл яба алдыҡ.

**Һеҙҙең фәнни эҙләнеүҙәрегеҙ ҙә ошо эхинококк темаһына арналған. Ул ниндәй сир?**

- 1990 йылдарҙа Баймаҡ, Ейәнсура, Хәйбулла, Күгәрсен, Бишбүләк райондарында балалар ошо сиргә күпләп дусар булды. Эхинококкоз - таҫма кеүек паразит селәүсен барлыҡҡа килтергән оҙайлы хроник сир. Ул йышыраҡ кешенең бауырын, үпкәһен, баш мейеһен, һирәгерәк йөрәк һәм башҡа ағзаларын зарарлай. Дауаланмаған осраҡта ул үҫә, аҙаҡ тукымаларҙы, ағзаны ҡыҫырыҡлай, үҙенең ҡалдығы менән организмды ағыулай. Үрҙә әйтеп китеүемсә, төрлө хеҙмәттәр менән эҙмә-эҙлекле иҫкәртеү эше алып барылыу, медицинала төрлө дауалау алымдары булдырылыу һөҙөмтәһендә был ҡурҡыныс ауырыуҙың артабан таралыуына кәртә ҡуйылды, тип әйтергә мөмкин бөгөн.



**Балалары хирургик сирҙәргә юлыҡмаһын өсөн атай-әсәйҙәргә ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

- Иң беренсе, әлбиттә, әсәй һәм атай булырға ниәт иткән һәр кем үҙенең балаһының һаулығы тураһында уйларға тейеш. Тыумыштан хирургик сире булмаһын өсөн сәләмәт тормош алып барыу, хроник йәки генетик сирҙәрҙән барлығын тикшереү, анализ биреү, тейешле дауа алыу мөһим. Тыуып, күҙгә күренгәс, атлай, уйынсыҡтар менән уйнай башлағас та сабыйҙы бер минутҡа ла күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Уларҙы һәр ерҙә хәүеф һағалай.

Йыш ҡына ҡайһы бер атай-әсәй балаһы көйһөҙләнеүен уның ҡәҙимгә тынғыһыҙлығы тип ҡабул итә һәм дауаханаға барыуҙы һуҙа. Баланың холҡо, ҡылыуы үҙгәреүе, тәү сиратта, уның ниндәй ҙә булһа сиргә дусар булыуын аңлата. Шуға күрә врачҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Үҙ белдегең менән дауалау йыш ҡына күңелһеҙ тамамланырға ла мөмкин...

**Һеҙ медицина университеты уҡытыусыһы ла булып эшләйһегеҙ. Йәштәр тураһында ни әйтерһегеҙ? Улар һеҙҙең быуындағылар кеүек ошо һөнәрҙе яратып киләме? Әллә атай-әсәй ҡушыуы буйынсамы, йә аҡ халат абруйына ҡыҙығамы?**

- Юғары уҡыу йортонда 2004 йылдан алып хирургия буйынса уҡытам. Медицинала талантлы йәштәр бар. Уҡырға, белергә, яҡшы врач булырға ынтылған студенттар күп. Хирургия менән ҡыҙыҡһынғандар ҙа юҡ түгел. Яуаплылыҡтан ҡурҡыңҡырағандар ҙа осрай. Әммә, әгәр ҙә белеме, теләге, эргәһендә уға ярҙам итергә әҙер торған остаздары булһа, бынамын тигән табиптар сығасаҡ улар ҙан.

Хирургияны һайлағандарға үҙемдең тәжрибәмде тулыһынса тапшырырға тырышам. Минә лә уҡытыусыларым шулай эшләне. Шуға күрә үҙем белгәнемде, һөнәри тәжрибәмде йәштәргә тапшырыуҙы ҙур бурысым тип һанайым. Уларҙың балалар хирургияһын тағы ла нығыраҡ үҫтереүен теләйем.

Һәр юғары уҡыу йортондағы кеүек, атай-әсәй теләген бойомға ашырыу ниәте менән генә килгән студенттар ҙа барҙыр инде. Хәҙер бит медицинаға күп ҡабул итәләр. Элек педиатрияға 250 кеше генә килә ине, хәҙер 500. Был ҡараш бик үк дөрөҫ түгелдер, тип уйлайым.

Имтихан ваҡытында, мин барыбер врач булмайым, билдә генә ҡуйығыҙ инде, тигән студенттар ҙа осрай. Медицина тармағына уҡырға ингәндә лә, эшкә алғанда ла ныҡлы һайлау булырға тейештер. Быға минең иманым камил.

**Әле бөтә донъяны ҡурҡытҡан Covid-19 тураһында ни әйтерһегеҙ? Тәүҙә уның менән балалар ауырымай, тинеләр. Әхәҙер инфекция үҫмерҙәргә лә йоға тип һөйләйҙәр. Ошо йәһәттән ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

- Инфекция башланғанда, ысынлап та, яңы коронавирус инфекцияһы башлыса оло быуын өсөн хәүефле, балаларға ҡурҡыныс янамай, тигәйнеләр. Бөгөн иһә йәш быуындың да уны күпләп йоҡтороуы билдәле. Шуға күрә ололарға шулай тип әйтер инем: үҙегеҙ ҙә һаҡланығыҙ, балаларығыҙҙы ла һаҡлағыҙ. Әлегә балалар өсөн вакцина юҡ, ғалимдар уның өҫтөндә эшләй.

Һуңғы осорҙа Башҡортостанда вирустың нык таралыуы билдәле. Уның сәбәбен санитар-эпидемиология эшенең эҙмә-эҙлекле булмауынан күрәм. Сирҙең иң аҙған ваҡытында ҙур-ҙур форумдар үткәреү кәрәкмәй ине, минеңсә. Был йоғошло сирҙе тик күмәк вакцинация һәм үҙкурсаланыу режимы менән генә еңеп була.

**Медицина фәндәре докторының ғаиләһе, дуҫтары, яратҡан шөғөлдәре өсөн ваҡыты ҡаламы?**

- Йәштән ваҡытты дөрөҫ бүлергә өйрәндем. Әгәр ҙә уны белеп ҡулланмаһаң, бер нәмәгә лә өлгөрөп булмаясаҡ. Бигерәк тә бөгөнгө етеҙ үҙгәргән заманда. Мин бөтә эшемде системаға һалып башҡарам. Шуға күрә ғаиләм һәм дуҫтарым менән ял итергә лә ваҡыт ҡала. Башҡорт дәүләт академия драма театрында үткән бар премьераларҙы ҡарап барам, филармониялағы концерттарға йөрөйөм. Буш ваҡытымдың бер өлөшөн шулай уҡ йәштәрҙе фәнгә ылыҡтырыуға, башҡарылған эштәргә анализ яһауға арнайым. Эшмәкәрлекте камиллаштырыу өсөн анализлау, баһалау кәрәк бит. Шунһыҙ алға китеү, үҫеү мөмкин түгел. Фәнни публикациялар өҫтөндә эшләйем. Медицина һәр ваҡыт белемеңде, тәжрибәңде үҫтереүҙе талап итә. Уның буйынса күпме уҡыһаң да иге-сиге юҡтыр...

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

КӨНАУАЗ



# СИКЛӘҮ ИНДЕРЕҮ ЯҠШЫ

***Башҡортостанда индерелгән сикләүҙәр тажзәхмәттең 4-се тулҡынын туҡтатырға ярҙам итәсәк, тип билдәләне Республика клиник инфекция үҙәгенең баш табибы Азат Мөхәмәтйәнов оператив штаб һөҙөмтәләренән сығып.*** "Асылда, ауырыуҙар һаны йылдам арта бара,- ти баш табип. - Халыҡ иркенләй төштө һәм вирусҡа еңелерәк ҡарай башланы. Битлек кейеүҙе оноттолар, хәүефһеҙлек сараһы һаҡланмай, ҡунаҡҡа йөрөшәләр, йәмәғәт урындарында булалар. Шулай итеп, ғаиләләрҙә инфекция сығанаҡтары барлыҡҡа килде. Республикала режимды көсәйтеү тураһында указ коронавирустың 4-се тулҡынын туҡтатыу өсөн кәрәкле сара ул. Был Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың бик ваҡытлы ҡарары. Кешеләрҙең аралашыуын сикләү һәм инфекция таралыуҙың юлын ябыу маҡсатында ҡәтғи саралар этаплап индереләсәк. Әлеге көндә госпиталдәргә сир йоҡтороусылар бигерәк тә ғаиләләре менән күпләп килтерелә. Мәҫәлән, көн һайын беҙҙең ковид-госпиталдән 30 кеше һауығып сығһа, улар урынына 50 ауырыу килә. Улар араһында 14 йәшкә тиклемге балалар күп. Балаларҙың аралашыуын сикләү өсөн республикала ҡайһы бер мәктәптәрҙе дистанцион уҡыуға күсереү бик ваҡытлы ҡарар булды. Уйлауымса, был инфекция таралыу сылбырын өҙәсәк һәм бының өсөн кәмендә 15 көнләп ваҡыт кәрәк буласаҡ. Ғөмүмән, хәҙер бөтөн кешегә лә аралашыуҙарҙы сикләү, йәмәғәт сараларын мөмкин тиклем аҙыраҡ уҙғарыу мотлаҡ. Күптәр, вирус уларға теймәҫ, тип уйлай, ләкин улар хаталана: ул бөтәһенә лә йоғасаҡ. Яңы штамм агрессивыраҡ, инкубация осоро кәмей бара һәм ул бик тиҙ йоға. Ҡарайһың: йәш кешеләрҙә ул еңелерәк үтә кеүек, ләкин 5-6 көндән уларға кислород етмәй башлай. Шуны ла әйтеү кәрәк: ауырыусылар араһында ни бары 1-2 процент ҡына прививка эшләткән, һәм улар сирҙе еңелерәк үткәрә. Өҫтәүенә, ОРЗ, ОРВИ сезоны килеп етте, унан грипп башланасаҡ һәм уның да ауыр булыуы көтөлә, шуға күрә мин бөтәһен дә прививка эшләтергә саҡырам..."

**Әйткәндәй...**

4 октябрҙән дәүләт һәм муниципаль музейҙарға, театрҙарға, китапханаларға, мәҙәниәт һарайҙарына, кинотеатрҙарға, шулай уҡ күп кеше ҡатнашлығындағы спорт сараларына йөрөү сикләнһә, 12 октябрҙән был исемлеккә тағы ла сауҙа үҙәктәре, шәхси музейҙар, күргәҙмә һәм концерт залдары, китапханалар, кинотеатрҙар өҫтәлде; прививка хаҡында сертификаты һәм был ауырыуҙы үткәргәнлеге тураһында белешмәһе булмағандарға ҡала-ара автобустарға һәм "Орлан" ҡала яны поезд маршрутына билет һатып алыу тыйылды. Ә 18 октябрҙән сикләү тәртибе матурлыҡ һәм косметика салондарына, СПА-салондарға, солярийҙарға, мунса һәм сауналарға, физкультура-һауыҡтырыу комплекстарына, фитнес-клубтарға, бассейндарға, шулай уҡ 50 кешенән ашыу урынлыҡ ресторан һәм кафеларға ла ҡағыласаҡ.

# ПСИХОЛОГ ЯРҘАМЫ ЛА КӘРӘК

***Өфө Pro-зрение психология һәм психофизиология клиник үҙәге директоры, биология фәндәре кандидаты Әмир ШӘРИПОВ һөйләй:*** Ковидтан һуңғы эҙемтәләр күп төрлө, сөнки вирус үпкәне генә түгел, организмдың башҡа системаларын да, иң тәүҙә бөтөн нервылар системаһын зарарлай. Төп билдәләр иҫәбендә - еҫ һиҙеүҙе юғалтыу, күреү һәм ишетеү һәләтенең насарайыуы, үҙконтролдең түбәнәйеүе, йыш ҡына хис-тойғо тотороҡһоҙлоғо күҙәтелә. Ковид менән ауырыған кешеләрҙең яртыһынан күберәгендә күҙәтелгән психологик билдә - хәүефле хәлгә бирелеү тойғоһо. Йәғни кеше тыныcһыҙлана, хафалана, бер үк нәмә хаҡында оҙайлы борсолоуға бирелә, сәбәләнә, тотороҡһоҙлоҡ, иғтибарҙы туплауҙың ауырлашыуы йыш күҙәтелә.

Бынан тыш, "мейе томаланыу" тип аталған күренеш бар. Һуҙ интеллектуаль эшмәкәрлектең түбәнәйеүе, иғтибарҙы, иҫ-аҡылынды туплай алмау тураһында. Былдай хәл ай буйы ла, өс ай ҙа, унан күберәк тә, хатта йыл буйы ла дауам итеүе ихтимал.

Ковид эҙемтәһе буларак, былдай осраҡтарҙа психологик сәләмәтлекте ҡайтарыу өсөн күп төрлө мөмкинлектәр бар, ләкин Башҡортостанда йәшәүселәр күберәк "тылсымлы дарыу"ға өмөт итә. Тик улар шуны белмәй: дарыуҙар былдай сирҙе көсәйтергә генә мөмкин. Иң тәүҙә кешегә үҙ-үҙенде көйләү алымдары ярҙам итәсәк. Был, тимәк, аутокүнекмәләр, медитация, үҙ-үҙенә контроль, үҙенде хуплай белеү, үҙ-үҙенде яҡшы ғәмәлдәрең өсөн маҡтау. Мәҫәлән, бүлмәңдә бысраҡ һәм бола ине - йыйыштырып алдың, тимәк, бик шәпһең. Ә бит беҙгә йыш ҡына бик күп ялыҡтырғыс эштәр менән булышырға тура килә, бында үҙеңде маҡтау, дәртләндереү бик кәрәк. Бынан тыш, хәүефле тойғоларға бирелеүҙән ҡотолоу интернетыңды һүндереп ҡуйыу кеүек ябай ғына ғәмәленә бәйле булыуы бик мөмкин. Күптәр тормоштағы ябай ғына ҡыуаныстарға иғтибар итмәй - мәҫәлән, тәҙрә аша ҡояшҡа ҡарап һөйөнөү. Әҙәм балаһы шатлыҡ һәм ыңғай хис-тойғолар түгел, ә ниндәйҙер фажиғә, драмалар эҙләй.

Тын алыу, һулыш гимнастикаһының бик файҙалы икәнен онотмағыҙ. Вакцина яһатыуҙың әлеге проблемаларҙан ҡотолорға ярҙам итеүен дә онотмайыҡ. "Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар", тигәндәй, иң һәйбәте, әлбиттә, прививка. Ә шулай ҙа сирҙе йоҡтормаҫҡа тырышырға кәрәк, ләкин сирләй ҡалдығыҙ икән, дауаланығыҙ, вирусты башҡаларға йоҡтороуҙан һаҡланығыҙ, яҡындарығыҙ, тирә-йүндәгеләр һәм уларҙың хәүефһеҙлеге хаҡында ҡайғыртығыҙ. Күптәр ауырығандан һуң үҙ-үҙенә бикләнә. Өҫтәүенә, быға изоляция режимы ла булышлыҡ итә. Был психологик проблемаларҙы көсәйтә генә һәм кеше үҙ-үҙен "ашай" башлай. Яңғыҙлыҡ - бик хәүефле юлдаш.

***✓ Медицина институтында уҡыған студенттарға ауырыуҙың билəгəн вазифаһына, дəрəжəһенə ҡарап түгел, ə уның сиренə, хəленə ҡарап ҡына мөнəсəбəт ҡылырға өйрəтəлəр, "табип этикаһы" тигəн төшөнсəне лə һеңдерəлəр.***

*КИЛЕШМƏЙЕМ!*

**Хəрби табип булып хеҙмəт иткəн осор. Бер мəл миңə госпиталь начальнигы шылтыратып, үҙенең бүлмəһенə килергə ҡушты. Командир һынлы командир ерле-юҡҡа саҡыртмаç, берəй мөһим нəмə əйтергə самалайҙыр, моғайын, тип, барса эшемде ҡалдырып, кабинетҡа инəм. Уставса доклад яһайым: "Подполковник Суюндуков по вашему приказанию прибыл!" Начальниктан тыш, ҡабул итеү булмəһендə бер прапорщик та ултыра.**

**- Товариш подполковник, ошо кешене таныйһығыҙмы? - тип һорай начальнигым уға күрһəтеп.**

**- Никак нет! Погондарына ҡарап, прапорщик икəнен генə күрəм…**

**- Наталья Ивановнаның ире ул!**

**- Наталья Ивановнаны ла белмəйем.**

**- Нисек инде белмəйһең? Магазин директоры бит ул!**

**- Барыбер белмəйем. Ə эш ниҙə?**

**- Бына ошо прапорщикты яҡшы ғына итеп ҡарап, дауаларға кəрəк…**

**- Тура минең үҙемə килһə лə, уны яҡшы итеп ҡарар һəм кəрəгенсə дауалар инем. Ҡатыны кем генə булыуына ҡарамаçтан. Ярар, ҡарармын һуң…**

# ТАБИПҠА БАÇЫМ ЯҺАУ…

## уның дəрəжəһен кəмһетеү ул



Ошо диалогты уҡыған һəр кемгə, бынан утыҙ йылдар элек, магазиндарҙа аҙыҡ-түлек кенə түгел, һəр төрлө сəнəғəт тауарҙары ла наҡыç ваҡытта булған хəл тураһында һүҙ барғанын төшөнөү ауыр түгелдер. Һатыусы, товаровед һымаҡтар "иң кəрəкле кешелəр" булып һаналған был дəүерҙе олораҡ йəштəгелəр бик яҡшы хəтерлəй. Əммə ниəтем шул осорҙағы илебеҙ тормошон тəнҡитлəү түгел. Дауалаусы табипҡа "баçым яһарға" яратыусылар хаҡында һүҙем.

Начальнигымдың "Бына ошо кешене яҡшы итеп дауала", тигəн талабынан, йомшаҡ ҡына итеп əйткəндə, "оло ҡəнəғəтлек" кисермəнем. Киреһенсə, бындай һүҙ ишетеү үҙ эшенə намыç менəн ҡараған һəр докторҙы ла пациент алдында тик кəмһетə генə, тимəксемен. Дауалаусы табиптың бəçен төшөрөү, хатта уны ҡыйырһытыу, тип тə һанайым мин быны. "Важный ҡатын"дың иренə - əлеге прапорщикка ныҡ ҡына үпкəлəүемə ҡарамаçтан, был хаҡта уға белгертмəнем, нəҡ башҡаларҙы ҡараған һымаҡ уҡ ҡарап (бер бəлəкəй генə операцияға мохтаж ине ул), стационарға һалып, тейешенсə əмəллəп тə ебəрҙем. Үҙемдең "башым аша һикергəн" был пациентым, айырыуса, уның алдында ялағайланған начальнигым хаҡында күңелдə тик насар тəьçораттар ғына тороп ҡалды. Госпиталдəн сығарып ебəрер алдынан: "Башҡа ваҡытта берəй докторға барырға кəрəк булһа, уның начальнигы аша мөрəжəғəт итеү ғəҙəтегеҙҙе ҡуйығыҙ, иптəш прапорщик! Табипты ихтирам итмəү була был!" - тип, пациентымды шулай ҙа бер аҙ ҡыҙҙырып алдым. Уның "əллə кем" булған ҡатынына - Наталья Ивановнаға ла "артҡы ишектəн" һоранып барырға выжданым юл ҡуйманы.

Ошо уҡ начальнигымдың тағы бер мəртəбə минең эшемə ҡыçылғаны хəтеремдə. Бер мəл уның мəктəптə уҡып йөрөгəн улына ла ябай ғына операция яһаған инем. Операция уңышлы үтте. Малайҙы бүлектə ятҡан һалдаттар менəн бер палатаға урынлаштырҙым. Əммə шул уҡ кисте, мин эштəн ҡайтып киткəс, улының хəлен белешергə килгəн баш табипҡа ғəзизенең һалдаттар араһында ятыуы оҡшамаған. Минең рөхсəтһеҙ поста торған шəфҡəт туташына əлеге үçмерҙе "генеральская палата"ға күсерергə бойорған (Госпиталдең һəр бүлегендə "ҙур начальник"тар өсөн төрлө уңайлыҡтары - телефон, бəҙрəф һəм ваннаһы булған бер урынлыҡ айырым палата шулай тип атала ине). Ярай, ни тиһəң дə - начальник балаһы бит!.. Минең бүлектəге был палатала быға са бер ҡасан да ҙур начальник ятҡаны юҡ ине, һəр саҡ бикле тора торғайны. Шуғамылыр, əллə ни уға иғтибар ҙа итмəгəнмен. Төн яҡҡа ҡараған тəҙрəһе лə йылытылмаған, айҙар буйы буш торған был бүлмə һалдаттарҙыҡына ҡарағанда күпкə һалҡыныраҡ та булған. Бер-ике көндəн əлеге малайҙың тəн температураһы күтəрелеп китте: һалҡын алдырған. Бының сəбəпсеһе - əлеге "хəстəрлекле атай" икəнен яҡшы белгəн булараҡ, ошо хаҡта (үҙенə тура əйтергə уңайһыҙландым) уның хəлəл ефетенə: "Ирегеҙ мин күрмəгəндə бүлеккə килеп, командовать итеп йөрөгəн... - тип һуҡыранып алдым. Ə иртəгеһен эшкə килеүемə əлеге егет элекке урынында - ябай һалдаттар менəн бергə йылы палатала ята ине. Өçтəмə дауалау саралары үткəргəндəн һуң, күпмелер ваҡыттан һауығып сығып та китте...

Уны-быны уйлап тормаçтан, дауаханала ятҡан яҡындары хаҡында бөтөнлəйгə башҡа ерҙə эшлəгəн берəй таныш докторынан "ситтəн тороп" консультация алырға яратыусылар ҙа осрай. Ана шул юл менəн дауалау процесына ауырыуҙың туғандарының килеп ҡыçтырылыуы уғата яҡшы нəмə түгел. Хəрби хеҙмəт дəүерендəге тағы бер күңелһеҙ хəл иçемдə ҡалған. Казармала һуғышып киткəн ике һалдаттың береһе, танауы ауыртып, миңə мөрəжəғəт итте. Рентген аша үткəргəс, уның танау һөйəге сатнағаны асыҡланды. Һул күҙенең төбө лə бер аҙ күгəргəн. Ə бынан алдараҡ, тап ошо егет үҙе икенсе бер һалдаттың ҡолаҡ пəрҙəһен һуғып йыртҡаны хаҡында ла белə инем (уны ла мин дауалағайным). Тормош бер алдын, бер артын күрһəтə, тигəндəй, йоҙроғон уйнатырға ятаҡан был һалдат үҙенең дə бер заман "сдача" алыры тураһында уйламаған, күрəһең... Тейешенсə процедуралар курсы үткəргəндəн һуң, танауы йүнəлеп, күҙ төбөндəге күгелə бөтөп, егетебеҙ һин дə мин һауығып, казармаға ҡайтып китте. Оҙаҡламай, был һалдаттың алыçта йəшəгəн ата-əсəһе часҡа килеп еткəн. Улы өйөнə "Лежу в госпитале. У меня "очки" под глазами..." тигəнерəк мəғəнəле хат яҙған булған икəн. Ата-əсə үҙҙəре йəшəгəн ҡалалағы ниндəйҙер бер "ҙур табип"ка барып, ошо хаҡта һөйлəп, унан "ситтəн тороп" консультация алған. Ə теге табип "очки" тигəн һүҙҙе ишетеп ҡалғас та шунда уҡ: "Улығыҙҙың - "симптом очков"! Бик ҡурҡыныс хəлгə тарыған бит улығыҙ!.."- тигəн һымағыраҡ итеп саң ҡаға башлаған... (Ысынлап та, медицинаның нейрохирургия өлкəһендə "симптом очков" тигəн бер термин бар. Ауыр һəлəкəткə осрап, баш һөйəгенең нигеҙе һынған осраҡҡа (перелом основания черепа) хас булған бик етди симптом ул. Күҙ тирəлəре сөм-ҡара тиерлек төçкə инеп, ысынлап та, күҙлекле кешегə оҡшаған бындай пациент, ғəҙəттə, аңын юғалтҡан була һəм бик һирəк осраҡтарҙа ғына иçəн ҡала). Һəр кемгə бала ғəзиз бит инде. Һалдат лөғəтендə йөрөгəн "очки"ны ана шул симптом тип һанаған был ата-əсə госпиталгə килеп, миңə ҡаршы һөжүмгə күсте. Йəнəһе лə, уның шундай хəлдəге улына табиптар иғтибарһыҙ булған, казармаға ҡайтарып ебəргəндəр... "Үҙе хулиганлыҡ менəн булышып йөрөгəн улығыҙҙың ғəҙəттəге "синягы" ғына бит ул. Ə əлеге һеҙҙең "доктор дуçығыҙ күҙ уңында тотҡан "симптом очков" - бөтөнлəй башҡа нəмə..." тип, хəлемдəн килгəнсə уларға аңлатма бирҙем. Бер-ике ай самаһы элек уларҙың ҡəҙерле улы икенсе бер йəш һалдаттың ҡолаҡ пəрҙəһен яра һуғыуы хаҡында ла əйттем. Был турала улар хатта белмəй ҙə ине...

Бəғзе берəүҙəрҙең: "Фəлəн баш табип һинең танышың бит. Минең туғаным шул-шул бүлектə ята. Баш табип менəн һөйлəшеп, дауалаусы докторға "берəй сəлəм" еткер əле, яҡшыраҡ ҡараһындар..."- тигəн һымағыраҡ үтенес менəн минең үҙемə лə килгелəгəндəре бар ул. Ышанаһығыҙмы-юҡмы, əммə бына шундай мəлдəрҙə үҙемде һəр саҡ ғəйəт насар тоям, хатта манма тиргə батам. Баштараҡ əйткəндəй, начальник ярҙамында докторҙың "артынан этергə" йə иһə уның "ҡулына һуғырға" яратыусыларҙы һис кенə лə өнəп етмəйем...

Дауалаусы докторҙың рөхсəтенəн тыш бөтөнлəйгə ят булған дауахана бүлегенə инеп, ундағы ауырыуҙы ҡарап, дауалау процесына тəьçир итеүемде лə үтенеп һораусылар булды. Бер мəл, сираттағы ялыма ҡайтҡанда, райондарыбыҙҙың береһендə йəшəгəн яҡташтарым мине эҙлəп килеп тапҡан. "Һеҙ - үҙйəнный врач, отпускыла йөрөй тип ишеткəйнек. Кейəүебеҙ балниста ята. Яман сир менəн. Урындағы табиптар "эш үткəн" тип тə əйтəлəр. Барып ҡарап китегеҙсəле. Бəлки, дауалаусы табиптарға берəй кəңəш, күрһəтмə бирерһегеҙ..." - тип миңə мөрəжəғəт иттелəр. Хəрби табип башҡаларға ҡарағанда белемлерəк, йəнəһе. Сирлененң туғандарының хəлен яҡшы аңлайым, əммə, үтенестəрен үтəүҙəн баш тарттым, уларға яҡынса ошолай тип төшөндөрөп бирҙем: "Хəрби врачтар башҡаларҙан бер нимəһе менəн дə айырылмай, бер үк программа буйынса уҡыйҙар. Икенсенəн, коллегаларымдың эшенə ҡыçылыу килешмəйəсəк. Көн дə үҙенең пациенттарына төрлө тикшереүҙəр үткəреп, анализдарын өйрəнеп, һəр саҡ уларҙың янында булған табип (хатта йəш булһа ла), теге йəки был ауырыуының хəлен ниндəйҙер булһа ситтəн килгəндəргə ҡарағанда яҡшыраҡ белə. Ə башҡа, юғарыраҡ кимəлдəге коллегаларының берəй ярҙамы кəрəк була икəн, был доктор уларға үҙе лə мөрəжəғəт итə ул. Кəрəк икəн, хатта "табип консилиумы" йыйып та ала..."

Үҙемдең балаларым да бəлəкəй саҡтарында сирлəп киткелəй торғайны. Əммə "шулайтығыҙ" йə "былайтығыҙ", тип, дауалаусы табип-педиатрҙың эшенə бер ҡасан да тығылып йөрөгəнем булманы. Урыçтар əйтмешлəй, "сит монастырға үҙеңдең уставың менəн" ҡыçтырылып, табиптың "ҡулын бəйлəп" йөрөүҙе ҙур əҙəпһеҙлек тип һанайым. Үҙем дə дауаханаларҙа ятҡылағаным бар. Коллегаларыма үҙемде дауаларға ла ҡамасауламайым. Минең врач икəнемде белгəн бəғзе табиптар: "Ағай, һеҙгə бына шундай-шундай дарыуҙар тəғəйенлəргə уйлайбыҙ..." - тип əйтə башлайҙар. Əммə мин: "Егеттəр (йə ҡыҙҙар), һеҙ - докторҙар, һеҙгə яҡшыраҡ күренə. Нисек кенə дауалаһағыҙ ҙа ризамын", - тип уларҙы тынысландырырға тырышам. Сөнки пациенттың күндəм булыуы, табип тəғəйенлəгəндəрҙе һис һүҙһеҙ үтəүе дауалау процесына ифрат та ыңғай тəьçир итеүен белəм. Эш дəүерендə ана шундай "ыңғай" пациенттарҙы үҙем күҙəткелəй торғайным. Ундайҙарҙы дауалауы ла еңел, һəм улар тиҙ арала йүнəлеп, рəхмəт əйтеп, дауахананан сығып та китə. Дауалаусы докторға үҙеңдең һаулығыңды ышанып тапшырыу ҙур роль уйнай, тимəксемен..

Медицина институтында уҡыған студенттарға ауырыуҙың билəгəн вазифаһына, дəрəжəһенə ҡарап түгел, ə уның сиренə, хəленə ҡарап ҡына мөнəсəбəт ҡылырға өйрəтəлəр, "табип этикаһы" тигəн төшөнсəне лə һеңдерəлəр. Диплом алыр алдынан һəр йəш табип "Гиппократ анты" биреп (беҙҙең дəүерҙə ул "Присяга врача Советского Союза" тип атала ине), үҙенең ҡултамғаһын да ҡуя. Əлбиттə, табиптың да мөмкинлектəре сиклəнгəн. Дүрт аяҡлы аттар ҙа абына, тигəндəй, уның эше лə һəр саҡ шыма ғына бармауы мөмкин. Бөтə тирəяҡҡа һөйлəп йөрөмəһəлəр ҙə, бəғзе ваҡыт, төрлө күңелһеҙ хəлдəргə лə юлыҡҡылай бындай һөнəр эйəлəре... Бер нисə йыл элек табип хатаһы өсөн докторҙарға яҙаны ҡəтғилəштереү хаҡында ла һүҙ йөрөгəйне. Пациенты йүнəлеп сыҡҡанға ҡəҙəр уның хаҡында көн-төн уйланыуҙан бушамаған, сəстəре иртə ағарған коллегаларымды барыбер ҡыҙғанам. Тыштан ҡарағанда шат йылмайып йөрөгəн (улар бүтəндəргə йылмайырға ла бурыслы) аҡ халаттағы ошо кешелəрҙең йөҙөнə иғтибар менəн баҡһаң, уларҙың ҡарашында һəр саҡ кемделер йəллəгəн, ифрат етди һыҙаттарҙы ла һиҙемлəргə була. Һəр кемеһенең үҙ ғаилəһе, ятаҡан бала-сағаһы ла булған был һөнəр эйəлəре башҡаларҙың һаулығы, ғүмере өсөн хатта ныҡыраҡ та борсолалыр ул. Шуның өсөн дə табиптарыбыҙға һəр яҡлап, төрлө ысулдар менəн "баçым яһарға" тырышмайыҡ, тимəксе инем...

**Хəлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хəрби табип.**

✓ ***Инделәр ҙә бахыр ғына ҡиәфәттә күҙҙәрен башлыҡҡа текәнеләр, һүҙҙе Мәснәүи башланы. Ысынлап та, телгә оҫта икән. Үҙенә ҡалһа, эшкиндерә алмаҫ ине, яҡташы менән осрашҡанға тағы ла нығыраҡ ҡыуанды.***




–Минә лә шулай итте... - тине Ишмырҙа.

- Шуннан? - Мәснәүиҙең күҙҙәре ҙурайып китте.

- Биш ай буйына яҙҙырҙым инде.

- Синме, шул ялкау урыскамы?

- Әллә, кәсепкә килмәгән, тинем дә ҡуйҙым. Суҡынып ҡатһын, бында тәртибе шулайҙыр, тип уйланым.

- Их син, дурак! Бирермен мин эш хакын! Күрдеңме, ничегерәк салып очырдым!

- Осрашыу бик шәп булды бит әле! Беҙҙе айырып ҡуймаҫтармы икән? - Ишмырҙа балалар һымаҡ ҡыуана ине. - "Подельник"тар тип ысҡындырҙы ла баһа!

Былар инде йылдан ашыу ултыралар, уны-быны, закон статьяларын ғына аңлайҙар. Колония начальнигының режим буйынса урынбаҫары теге ваҡыт "подельник"тар тине. Был инде "по одному делу", йәғни бер үк эш буйынса, тигәнде аңлата. Ундайҙарҙы бер колонияла ултыртмайҙар, икеһен бөтөнләй ике яҡҡа ебәрәләр. Етмәһә, былар һуғышып, үсләшеп ултырған кешеләр, бергә тоторға ярамай, әллә ниҙәр ҡылып ташлауҙары бар. Теге ваҡыт офицерҙың Мәснәүигә, һин нисек килеп эләктең бында, тип аптырауының сәбәбе шунда ине. Тимәк, йә берәй яңылышлыҡ килеп сыҡҡан, йә игтибар етмәгән, бутағандар. Шулайтып, ике "дошман" бер колонияға, хатта бер үк цехҡа килеп эләккән. Тәүге көндә үк яңъял сығарып карцерға ҡаптылар. Быларҙы ысынлап та оҙаҡ тотмаҫтар, айырырҙар.

Быға бигерәк тә Ишмырҙа көйҙө. Осрашҡандарына шул тиклем шатланғайны. Ә Мәснәүи Ишмырҙаның ниндәйерәк кеше икәнен һорау алған саҡтарында уҡ һиҙгәйне инде, шуға ла баштан эрерәк ебәрергә, бының алдында ҙурыраҡ булып ҡыланырға тырышты.

- Ярый, аермаслар, колония начальнигы белән үзем сөйләшермен, - тине.

- Колония начальнигы менән? - Ишмырҙа аптырап китте.

- Юкка исең киткән! Тегендә чакта мин начальникның кабинетыннан чыкмый идем! Атна саен чакыртып ала иде.

- Кабинетына? Начальникмы? - Колония начальнигын полк командирынан да юғарыраҡ, хакимыраҡ күргән Ишмырҙа аптыраштан ни әйтергә лә белмәй ҡалды. Шыттыра, тиер инең, ҡайһылайтып осрашып етмәҫ ерҙән алдап торһон! Төрмәлә маҡтанып ултырыуҙың ни мәғәнәһе! Алдамай, тиер инең, бер ҙә ышанырлыҡ түгел.

- Кабинетына булмый, үзе минем янга килмәс инде! Чакырта да корпустагы хәлләр, эш турында сораша башлый. Аларга да бит обстановканы белеп торорға кирәк. Эш азагында булса, шунда ашап, эчеп алабыз.

- Шунда, кабинетындамы? - Ишмырҙаның күҙҙәре баҙлап китте.

- Бигерәк юкка аптырыйсың икән лә! Һәр начальникның - завод директорымы, обком секретарымы - кабинетының артында "бытовка" дигән бер бүлмәсе була. Иң төптә ул, ишеге күренми дә, беленми дә, хужа үзе генә ачып керә ала. Шунда керденме, жаныңа ни кирәк - ашау, эчү, сервант, диван, ванный һәм матур кыз! - Мәснәүи үҙе һөйләгәнгә үҙе ышанып, ошоларҙың барыһын да күҙ алдына килтерҙе шикелле, йөҙҙәре ҡыҙарған, зәңгәр күҙҙәре шул кабинетта - ашһыу, эсемлек, ашамлыҡ һәм матур ҡыҙ янында ултырған кешенекеләй яна.

- Һин шул бытовкаға индеңме?

- Пәттәч, инмичә! Төшереп утырдык бергә!

- Төшөрҙөгөҙ? Колония начальнигы менәнме? - Ишмырҙа шикле йылмайҙы, йөҙө күңелһеҙләнде. Иптәше ихлас кеше түгел, ахырыһы.

- Син нәрсә, колония начальнигы дигәч тә, пәйғәмбәр затыннан дисеңме? Синең белән миңарга гына шулай күренә ул. Анысы да монда утырган чакта гына! Якыннан карадың исә, шул без сәлам дә бирмәслек бер тупой адәм! Жүнле кеше төрмә начальнигы булып эшлиме! Башка жирдә эш тапмаганга барып кергән бит инде ул.

Ишмырҙа тагы ышана төштө, алдамайҙыр, күпте күргәнгә оҡшаған бит. Ә Мәснәүи быны һиҙҙе, Ишмырҙаның күңеле йомшара башлағанын күреп, "һөжүм"де көсәйтте.

- Син шуңа аптырыйсың! Белә белсәң, мин бит колония начальнигы белән охотага да чыктым. - Мәснәүи, бүлдерә күрмә, тигәнгә тоҫмаллатып ымланы ла, һөйләй бирҙе. - Бер ваҡыт шулай кабинетына чакыртып алды да бу: "Син, Михаил Михалыч, ничек атасын?" - ди. Мине анда шулай "Михаил Михалыч" дип йөрәтәләр иде. Урыска "Мәснәүи Мәгнәүиевич" дип әйтеүе ауыр бит инде. Эйе, шулай, ничек атасың, дип сорый бу. Мин шөрли төштем, бар гөнаһларымны уйлап алдым. Ә теге: "Сине, Михаил Михалыч, "Ворошиловский стрелок" диләр икән?" - ди бу. Аңлап алдым, аларда безнең "личный дело"лар бар бит инде, димәк, эш бөтенли икенчедә. "Кандидат в мастера!" - мин әйтәм. "Кандидат в мастера булгач, әзерлән, киләсе шимбәдә охотаға чыгабыз!" - димәсенме бу.

- Сыҡтығыҙмы? Алдығыҙмы берәй нәмә? - Ишмырҙаның шиге бөттө, был тиклем дә алдаҡты булыуы мөмкин түгел.

- Сорыйсың! Дичь күп, яман күп иде ул якта. Боланнар, маралла, бүреләр, аюлар, мә, башта мине ат, дигән кебек, үҙләре килеп баса алга! Ә куян, төлкефәлән белән пычранып тормадык!

- Аҙаҡ эскәнһегеҙҙер инде? - Ишмырҙа иренен ялап алды.

- Сорама аларны! Охотаға иң элек шул эчәр өчен чыгалар бит инде! Безнең начальник якын-тирәдәге колхоз председателләре белән бик шәп яши иде, ниләр генә китермәгән тегеләр! Ул ат ите, ул каз ите, ул коньяк, ул спирт! Балык, икра!..

- Алҡынгансы ашаныҡыҙ инде?.. - Ишмырҙа төкөрөгөн йотто.

- Алтынны дисеңме?

-Алҡынгансы! Ныу, туйгансы ашаныгыҙмы, тим инде. Шуны ла аңламайһың, татар! - Был мәрәкәләгән булды.

- Андый ашны вольныйда да күргән юк иде. И-и, сөйли башласаң!.. Охотада йөрдек көн буена, кич урманчы йортына бардык. Исеме генә урманчы йорто инде - оҗмах! Әллә утызлаган бүлмә, ул җиһаз, саунасы, буфеты, чыгабыз да пиво чүмерәбез!

- Һуң, улай булғас, ниңә ебәрҙе һине начальник колонияһынан?

- Тукта әле, булдермә! Соң, жибәрми, мин бит хәзер слишком много знаю. А вдруг сатар, дип уйлый бит инде бу. Ярар анысы. Мунча кереп чыктык та тотондык кирять итергә. Ниләр генә ашамадык та ниләр генә эчмәдек инде! Главный, ашапэчкәч, исертми. Исертми дә, баш та авыртмый! Аз гына йоклап алдык та тагын тотындык. Мин башта сакланыбырак утыра идем, иртәгәсен кыен булыр дип. Аларға ял да, мина бит эшкә. Эч, ди бу, ике көн ял итәрсең, ди. Баш йүнәтергә дип бер шиша акны, ике шиша пивоны кесәгә тыгып ук куйды.

- Аны нишләттең инде? - Ишмырҙа күҙен йоммай ултыра.

- Нишләтим, кайткач, яйлап кына, баш түҙеме бөттө. Сәй эсеп алғас, тамаҡ туйған кеүек ине лә, шул тиклем һуҙҙәрҙән һуң ашкаҙан янынан ярһины ла китте. Биш көн ҡаты икмәк һынығы менән һыу ғына эсеп ултырҙылар ҙа инде. Ул төсөн боҙоп иптәшенә ҡараны:

- Әҙәм ышанмаҫты ысын булһа ла һөйләмә, тигәндәр...

Мәснәүи үҙенең артығыраҡ ебәрә башлағанын, абруйҙы юғалтып ҡуйырын аңланы шикелле, быға һүҙ бөтөрөргә ирек бирмәйенсә, икенсегә бора һалды:

- Ярар, аларны бер иркенләп сөйләшербез әле. Безгә, Ишморза дус, берәр ярты табып утырыга иде, - тине.

- Ярты? - Ишмырҙаның күҙҙәре баҙланы. - Ҡайҙан табаһың уны?

- Ныу, юкка аптырыйсың да китәсең, Ишморза дус! - Мәснәүи яҡташының бер ҡатлылығына үҙе лә аптырай һәм шул уҡ ваҡытта ҡыуана ла ине. - Акчаң ғына булсын, монда водородный бомба табып була!

- Аҡсаһын табырбыҙ ҙа ул! - Ишмырҙаның күҙҙәре нығыраҡ янды.

- Тапсаң, калганы синең забота түгел! - Ишмырҙа матрас йыртығына ҡулын тығып аҡса килтереп сығарҙы. Ул да рәтен төшөнә башлағайны тормоштоң, ирекҡә сығып йөрөгән кеше аша аҡса ебәргәйнеләр.

- Хәҙер үк табаһыңмы?

- Хәҙер үк булмый инде, ныу табарбыз. Башта мин обстановка белән танышып алыйым.

- Һин бик һуҙма инде улай булғас. Тик уны ҡайҙа әсәһен, уныһы бер бәлә булыр әле.

Мәснәүи ҡысҡырып көлөп ебәрҙе:

- Анысына кайгырма, башта теге мәсьәләне хәл итергә кирәк: безне аерып куймасыннар.

- Да, уныһы шулай шул.

- Беләсеңме, без иртәгә үк начальникка приемға язылабыз. Шунда икәүләп барып аңлатабыз. Монда инде икебезгә дә тише воды, ниже травы тороп сөйләшергә туры киләчәк.

Шуға килештеләр. Ултырып гариза яҙҙылар ҙа контролер аша колония начальнигына ебәрҙеләр. "Мөмкин булһа, ашығыс", - тип өҫтәнеләр.

Начальник "подельник"тарҙы иртәгеһенә үк саҡыртты. Мәснәүи - алдан, Ишмырҙа арттан инде. Инделәр ҙә бахыр ғына ҡиәфәттә күҙҙәрен башлыҡҡа текәнеләр, һүҙҙе Мәснәүи башланы. Ысынлап та, телгә оҫта икән, Ишмырҙа һоҡланып тыңлап торҙо. Үҙенә ҡалһа, эшкиндерә алмаҫ ине, яҡташы менән осрашҡанға тағы ла нығыраҡ ҡыуанды. Дурактар, һуғышып йөрөгән булдылар.

Мәснәүи һөйләне-һөйләне лә:

- Гражданин начальник, үҙегеҙ аңлайһығыҙ, теге ваҡыт бөтәһе лә эскелек арҡаһында, яңылыштан ғына булған. Беҙ арыу кешеләр ул, ышанырһығыҙ. Үҙегеҙгә бер ярҙамсы булырбыҙ. Ҡалдырығыҙ инде бергә, - тине. - Зинһар, мине икенсе колонияға оҙатмағыҙ. Ул тик һеҙҙән тора.

- Ну что, татарин и башкир, чтобы подружиться, надо было за решетку попасть, да? - Начальник мыҫҡыллы йылмайҙы.

- Век живи, век учись! - тине Мәснәүи. Эй, теле лә теле! Начальник бының яуабын оҡшатты, үҙенсә мәрәкәләп өҫтәне: "Дураком помрешь, да?" Шунан етди төҫ алды: "Ладно, посмотрим", - тине.

Былар сыктылар. Территория буйлап бер аҙ тын барҙылар.

- Бик асығын әйтмәне бит әле, - тип бошондо Ишмырҙа.

- Соң, шуннан артыгы ни кирәк? Алдыңа җәелеп төшмәс инде. Начальникның "посмотрим" дип әйтеүе "эшләрмен" дигән сүзе була ул.

- Улайһа, һин тегене ашыҡтыр инде. Йыуырға кәрәк бит.

Ишмырҙа алдында Мәснәүиҙең абруйы нык үҫте хәҙер. Ярай осраштылар әле, бер ямандың бер яҡшыһы тигәндәре ошолор.

### 4

"Подельник"тарҙы айырманылар, китәһең, тип тә, ҡалаһың, тип тә әйтмәнеләр, ә былар йөрөй бирҙе. Өс-дүрт көн шыртланҡырап торҙолар тороуын, шунан тынысландылар. Тейер булһа, тейерҙәр ине инде.

Аҙна үтте, былар бөтөнләй нығынды. Бер көн цехта Мәснәүи бының янына килде лә терһәге менән төрттө. Ишмырҙа ниҙер һиҙенеп, тегегә текәлде. Дусының зәңгәр күҙҙәре бесәйҙеке кеүек баҙлай.

- Әллә булдымы? - тип бышылданы Ишмырҙа. Мәснәүи төрмә робаһын һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә ысҡындырҙы ла итәген күтәрҙе; эстә салбар ҡайышына ҡыҫтырылы йөшел шешәнең һары башы алтындай йылтырай ине.

Икеһе лә тын торҙо. Ишмырҙа үҙ күҙенә ышанмай тора: төрмә эсендә араҡы! Мәснәүи иптәшен аптыратыуына әллә кем булған. Әйләндергеләп ҡараны, шунан бөкө тирәһенән еҫкәп алды. Еҫкәне лә "ыһ!" тип ҡуйҙы. Шешә нык бикләнгән булһа ла, еҫе килә бит, май сүлмәге тышынан билдәле, тип юҡҡа әйтмәгәндәр.

- Араҡы-ы... - тине Ишмырҙа ауыҙын йырып. - Ҡайҙан алдың?

- Эчеп жибәр салганын, сорама кайдан алганын... Кая бир әле! - Мәснәүи шешәне кире алды.

- Ошонда ғына ебәрәбеҙме әллә?.. - Ишмырҙа һаман үҙенә урын таба алмай аптырай.

- Ресторан эзләп, Уфага китеп булмый инде! - Мәснәүи шешәне ырғытып ебәрҙе лә тотоп алды.

- Төшөрөп ватаһың бит! - Ишмырҙа асыуланып ҡысҡырып ебәрҙе.

Мәснәүигә быны ошо кәрәк ине лә, тағы уйнатып алды ла:

- Үзем ватылсам ватылам, шиша ватылмай инде ул! - тине.

Араҡы табыуы ла, Ишмырҙа башҡортто үҙенә ҡаратып тотоуы ла уға шундай ләззәт бирә ине.

- Кеше килеп аппетитты боҙмаҫмы икән һуң?

- Нәрсә, озын-озакка сузып тормакчы буласыңмы ни! Раз - и готово!

- Әҙерәк һөйләшеп тә ултырмаған... - Ишмырҙа шулай тине лә, ҡайҙа ултырырға һуң, тигәндәй, тирә-яҡҡа ҡаранып алды. - Ә стакандар?..

- Их, син, Ишморза, нинди зэк стакан белән эчә инде аракыны! Бәлки, сиңа путаллы рюмка кирәктер? - Мәснәүи таҙа аҡ теште шешәнең ялтыр ҡалайына ҡаҙаны - "колағы" юҡ ине ҡәһәр бөкөнең. Икеһе лә күҙҙәрен асылған шешәгә текәгән. Ҡасандан бирле көткән мәл яҡынлаша. - Я, нәрсә өчен эчәбез? - Мәснәүи күҙҙәрен тантаналы йылтыратып, яҡташына ҡараны.

**(Дауамы. Башы 38-39-сы һандарҙа).**

✓ *1742 йылда Ырымбур Яйыҡ менән Һаҡмар йылғаһы ҡушылған ергә, ҡаялы тау башында ҡабат нигеҙләнә. Был нығытмалар 1774 йылдың мартына тиклем Буғас ғәскәренең ярты йыллыҡ ҡамауына бирешмәй тора.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОМШАҠ КҮҢЕЛЛЕҺЕҢМЕ?

■ Эмоциональ кисерештәр кешенең психикаһына ғына түгел, ә физик сәләмәтлегенә лә йоғонто яһай. Анығыраҡ әйткәндә, улар бөйөргә таш ултырыуға булышлыҡ итә. Нью-Джерси штаты (АҠШ) ғалимдары билдәләүенсә, бөгөл юлында таш барлыҡҡа килеүҙән ауырығандар һау бөйөрлөләргә ҡарағанда көнкүреш конфликттарына, эштәге күңелһеҙлектәргә, аҡса етмәүгә өс тапҡырға йышыраҡ зарлана икән. Әйткәндәй, быға тиклем ни өсөн бөйөрҙәрҙә таш барлыҡҡа килеүен фән аңлата алмай ине. Шуға ла был асыш ауырыуҙы артабан өйрәнергә ярҙам итәсәк. Статистика буйынса, халыҡтың 10 процентының бөйөрҙәрендә таш бар. Уларҙың күптәре был турала белмәй ҙә. Ғәҙәттә, таш урынынан ҡуҙғып, хәрәкәт итә, йәиһә бөйөрҙән сыға башлағас ҡына ауыртыу барлыҡҡа килә. Ирегеттәрҙә был сир йышыраҡ осрай.

■ Хәтерҙе, тиренең, сәстәрҙең торошон яҡшыртыу өсөн төрлө витаминдарҙы йыш ҡабул итәһегеҙме? Белгестәр билдәләүенсә, кеше витаминдарҙы аҙыҡ-түлек менән дә етерлек ала, шуға ла өҫтәмә рәүештә витаминдар эсеүҙең кәрәге лә юҡ. Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары 120 мең кешенең ауырыу тарихын өйрәнгән. Тикшереү өсөн Е витаминын алғандар. Ғалимдар әйтеүенсә, был витаминды күпләп ҡулланыу баш мейеһе ҡан тамырҙарының зарарланыуына - инсультҡа килтереүе ихтимал. Ошондай уҡ тикшеренеүҙәр Швецияла ла үткән. Ул саҡта ғалимдар А витамининың артыҡ булыуы үпкә яман шешенә, Е витамининың инсультҡа килтереүен асыҡлаған.

■ "Sleep Health" журналында баҫылған яңы мәғлүмәт буйынса, бала һәм үсмер саҡта иртә йоҡларға яратмау һуңынан йоҡоһоҙлоҡҡа килтереүе ихтимал. 1103 кешенән алынған яуаптарҙың һәҙәмтәһе күрһәтеүенсә, 6-17 йәштәге балаларҙың 90 проценты етерлек йоҡламай, һуңғараҡ уларҙа психологик тайпылыштар башлана: эмоциональ фон боҙола, укыуға һәләтлелек түбәнәйә, артыҡ ауырлыҡ барлыҡҡа килә, наркотиктар ҡулланыу хәүефе арта. Ҡағиҙә булараҡ, төндә йоҡламаған балалар төрлө электрон саралар ҡуллана, ә уларҙың экраны тәбиғи булмаған яҡтылыҡ бүлеп сығара. Көн тәртибен күҙәткән, ваҡытында йоҡларға яткан, төндә - планшеттар, ә иртән кофеин менән артыҡ мауыҡмаған ғаиләләрҙә йоҡоһоҙлоҡ менән бәйле проблемалар осрамай.

■ Пенсильвания университеты белгестәре 66 мең Twitter ҡулланыусы кешеләрҙең аватарын махсус программа ярҙамында анализлаған. Аватар - билдәле бер кешене виртуаль ысынбарлыҡта күрһәтә торған һүрәт. Тикшеренеүҙәрҙә шулай уҡ 434 кеше асыҡлыҡ, намыҫлы булыу, башҡаларҙан айырылып торорға яратыу, күндәмлек, тиҙ ярһып китеүсәнлек кеүек сифаттарҙы асыҡларға ярҙам итеүсе һорауҙарға яуап биргән. Билдәләнеүенсә, ярһыу кешеләргә үҙенең негатив тойғоларын тыйыуы ауыр, улар үҙҙәренең фотоһын түгел, ә йәнлек йә биналар һүрәттәрен ҡуя. Күндәм кешеләр тормошто ярата, улар барыһы менән дә дуҫ һәм йышыраҡ йылмаялар. Аватарҙа улар йылмайып тора йәки башҡа кешеләр менән уйнап йөрөй. Намыҫлы кешеләрҙең бөтөн ерҙә тәртип була, фотоларҙа улар, ғәҙәттә, өлкәнерәк күренә. Етмәһә, фотола улар йышыраҡ күҙлектә, зауыҡлы кейемдә була. Башҡаларҙан айырылып торорға күнеккәндәрҙең фотоһы сағыу, улар үҙ йөшенән йәшерәк күренергә тырыша. Асыҡ кешеләр эксперименттарға барыуҙан баш тартмай, улар үҙҙәре моңһоу йәки яуыз булып күренгән ҡаралы-аҡлы фотолар менән дә уртаҡлаша ала.

БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАҺЫ ТАРИХЫНАН



**Ырымбур крайының боронғо халҡын, нигеҙҙә, башҡорттар тәшкил итә. Урыҫ колонизацияһы башланыуы XVIII быуаттың беренсе яртыһына ҡарай. Шуға тиклем Волга арьяғында тотош рус биләмәләре сиге булып Оло Иҙелдең (Волга) һул ҡушылдығы - Сиремшән (Сәрмәсән) тора.**

Көнсығышта Урыҫ дәүләте сәйәсәтенең кинәт әүҙемләшеүе XVIII быуаттың 30-сы йылдары менән билдәләнә. Рәсәйҙең иҡтисади үҫешенә ҙур этәргес биргән Петр реформалары, шулай уҡ Ҡаҙағстанға, Урта Азияға һәм артабан көнсығышҡа урыҫ йоғонтоһонаң үтеп инеүенә иҫәпләнгән оҙайлы тышҡы сәйәси проекттар Башҡортостандың Рәсәй составында нығыныуын, уның ил эсендәге өлкәһе булыуын, бай тәбиғи ресурстарын һөҙөмтәле файҙаланыуҙы талап итә. 1734 йылда Сенаттың обер-секретары И.К. Кирилов етәкселегендәге Ырымбур экспедицияһы ойошторолоуы тап ошо маҡсаттарҙы үҙ эсенә ала ла инде.

Кириловтың хөкүмәткә тәҡдим иткән проекты дәүләттең көньяҡ-көнсығыш сигендә өлгөрөп еткән мәсьәләләрҙең сағылышы булып тора. Унда Ҡаҙағстан һәм Урта Азия менән тоторо̆кло сауҙа-иҡтисади бәйләнештәре булдырыу, уларҙы сауҙа баҙары һәм урыҫ сәнәғәте өсөн сеймал сығанағына әйләндереү, шулай уҡ был төбәктең яйлап Рәсәйгә ҡушылыуына өлгәшеү тураһында һүҙ бара.

Проектта Башҡортостанға ҙур иғтибар бүленә. Кирилов бында башҡорттарҙың ихтилалдарына юл ҡуймау өсөн хөкүмәттең позицияларын нығытыу кәрәклеген һәм тәбиғи байлыҡтарҙы интенсив файҙаланыу, тау эшен һәм ер эшкәртеүҙе киң йәйелдереү кәрәклеген раҫлай. Был бурыстарҙы үтәү өсөн тотош саралар системаһы тәҡдим ителә: Ур йылғаһы ярында ҡала һәм башҡа ҡәлғәләр төҙөү, ихтилалдарға юл ҡуймау өсөн башҡорттарҙы һуғыштарҙа һәм походтарҙа ҡатнаштырыу, шулай уҡ уларҙың ҡаҙаҡтар, ҡалмыҡтар, татарҙар һәм башҡа халыҡтар менән мөнәсәбәтендә көсөргәнеште һаҡлау; мосолмандарҙы христианлаштырыу сәйәсәтен көсәйтеү; крайҙы үҙәк райондарҙың ер эшкәртеүсе һәм сауҙа-сәнәғәт халҡы менән күпләп колонизациялау.

Ырымбур экспедицияһын ойоштороу башҡорт ерҙәренең һиҙелерлек өлөшөн ҡәлғәләр, ҡалалар, заводтар төҙөү һәм килгән халыҡҡа биреү өсөн тартып алырға, шулай уҡ хәрби һәм хеҙмәт бурысын арттырыуға, властарҙың крайҙың ерле халҡын ҡаты контролдә тотоу һәм уларҙы ошоғаса һаҡланып килгән эске идара элементтарынан яҙҙырыуға килтерергә тейеш була. 1734 йылдың 1 майында батшабикә Анна Иоанновнаның резолюцияһы менән хөкүмәт И.К. Кириловтың тәҡдимдәрен раҫлай. Резолюцияла "проектты" тиҙ арала тормошҡа ашырыу, ә "барлыҡ билдәләнгән эштәрҙе атҡарып сығыу өсөн обер-секретарь Кирилов һәм уның менән мырҙа Алексей Тевкелевты кисекмәҫтән ебәреү һәм тулы инструкция һәм указдар биреү" зарурлығы яҙыла.

Кирилов етәкселегендәге экспедиция Петербургтан 1734 йылдың 15 июнендә сыға һәм Мәскәү, Ҡазан аша Өфөгә йүнәлә, 10 ноябрҙә килеп етә. Ырымбур экспедицияһы составында 130 офицер, 3500 һалдат, төҙөүселәр, сауҙагәрҙәр, тау эше буйынса белгестәр, файҙалы ҡаҙылмаларҙы разведкалаусы, крайҙы географик һәм этнографик тикшереүсе, карта төҙөүсе төрлө һөнәр буйынса ғалимдар була.

1735 йылда Кириловтың Ырымбур операцияһы Ур йылғаһы буйында Ырымбур ҡәлғәһенең беренсе нигеҙен һала. Быға яуап итеп батша Рәсәйенең Башҡортостанды ҡәлғәләр менән уратып алырға ынтылыу сәйәсәтен яҡшы аңлаған башҡорттар ихтилалға күтәрелә. Был тотош крайҙы ялмап алған Килмәк абыҙ ихтилалы була. Башҡорттарҙың ҡораллы ҡаршылығына осрап, Кирилов Ырымбур экспедицияһының барлыҡ бурысын үтәй алмай. Ҡәлғәләр төҙөүҙән тыш, уның эшмәкәрлеге Башҡортостан менән эске идаралыҡҡа һәм XVIII быуаттың 30-сы йылдарындағы башҡорт ихтилалдарына ҡаршы көрәш менән сикләнә. Кирилов 1742 йылда вафат булғандан һуң Ырымбур экспедицияһы башлығы итеп И.И. Неплюев тәғәйенләнә. Ул барлыҡҡа килгән хәүефте аңлап, Ырымбур ҡәлғәһен 182 километр ситкә, Яйыҡ йылғаһы буйына, хәҙер Красногорка станцияһы торған урынға күсертә. Әлекке ҡәлғә Орск ҡалаһы булараҡ һаҡланып ҡала. Яңы урында үҙлеген китә алмайынса, 1742 йылда Ырымбур Яйыҡ менән Һаҡмар йылғаһы ҡушылған ергә, ҡаялы тау башында ҡабат нигеҙләнә. Хәҙер көньяҡтан башҡорттарҙың һөжүменә Яйыҡ йылғаһы, төньяҡтан - соҡор һәм ур менән һаҡланып, яулап булмаҫтай ҡәлғәгә әүерелә. Был ныҡлы нығытмалар 1773 йылдың октябренән 1774 йылдың мартына тиклем Буғас ғәскәренең ярты йыллыҡ ҡамауына бирешмәй тора.

Ҡала-ҡәлғә булараҡ, Ырымбур тиҙҙән крайҙың административ үҙәге, хәрби ҡәлғәләрҙең стратегик үҙәге, Урта Азия илдәре менән сауҙа һәм дипломатик мөнәсәбәттәр үҙәге, Ҡаҙағстан менән Урта Азияны яулағанда төп база булып тора. 1744 йылда Ырымбур губернаһы ойоштороулоуға бәйле, Ырымбур губерна ҡалаһына әйләнә, уның составына Өфө провинцияһы ла инә. Беренсе губернатор И. И. Неплюев (1744-1761) була. Уның идара итеү осоронда Ырымбурҙы, башҡа ҡәлғәләр һәм редуттар төҙөү, уларҙы халыҡ менән тултырыу эше алып барыла. XVIII быуаттың 30-50-се йылдарында 53 ҡәлғә, Яйыҡ йылғаһы буйлап Ырымбур сик буйы нығытма һыҙатындағы башҡорт ерҙәре төпкөләндә 40-ҡа яҡын редут һәм форпост төҙөлә, Ырымбур казак ғәскәре ойоштоторола, крайҙы колонизациялау Рәсәйҙең үҙәк районларынан килтерелгән крәҫтиәндәр һәм башҡа күсенеүселәр иҫәбенә тормошҡа ашырыла.

Хөкүмәт ҡаҙна, дворяндар, чиновниктар, офицерҙар, һалдаттар һәм башҡалар иҫәбенә башҡорт ерҙәрен күпләп тартып ала башлай. Һөҙөмтәлә XVIII быуат уртаһына башҡорттар үҙҙәренең көтөүлектәренең яртыһын тиерлек юғалта, ерҙәрен һәм азатлыҡтарын кире ҡайтарырға тырышып, даими ихтилалға күтәрелә. Батша Рәсәйенең колонизация сәйәсәтенең аванпосы булараҡ, край баш күтәргән башҡорттарҙың ҡан ҡойошло көрәш аренаһына әүерелә.

Ҡәлғә төҙөүгә 1000 башҡортто һәм казакты көсләп килтерәләр һәм был да бәхәстәр тыуҙыра. Башҡорт ихтилалдарының сәбәбе - батша хөкүмәтенең Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыу шарттарын боҙоуы, башҡорт ерҙәрен тартып алыуы, һалымдарҙың һәм яһаҡтың артыуы, көсләп христианлаштырыу һәм батша чиновниктарының башбаштаҡлығы, башҡорттарҙың урындағы үҙаидара хоҡуҡтарын ҡыҫыу.

1735-1740 йылдарҙағы ихтилалға этәргес булып 1734-1744 йылдарҙа Өфөнән Ырымбур экспедицияһына Ур йылғаһы тамағында ҡала төҙөү өсөн отряд ебәрелеүе тора. Ихтилал өс этапҡа бүленә: 1735-1736, 1737-1738, 1739-1740. Уның инициаторҙа-

✓ **Ырымбур губернаторы вазифаһында бигерәк тә Неплюев үҙен йәнһеҙ хаким һәм ҡанэскес палач итеп күрһәтә. Ул 150 башҡорт старшинаһын алдап саҡырып алып, Яйыҡ йылғаһы ярында терелəй күмдерə.**



ры һәм төп көсө - феодалдар, муллалар һәм батырҙар етәкселегендә тупланыусы аҫаба башҡорттар. Урыҫ крәҫтиәндәре, мишәрҙәр, татарҙар, сыуаштар, мариҙар власть яғында була.

Башҡортостандағы ихтилалды баҫтырырға генерал-лейтенант А.И. Румянцев ебәрелә, ул баш күтәреүселәр менән һөйләшеүҙәр алып бара. Ырымбур экспедицияһы начальнигы И.К. Кирилов һәм уның ярҙамсыһы А.И. Тевкелев бары тик хәрби көс кенә ҡуллана. Тевкелев Балыҡсы улысының Һөйәнтүҙ ауылы халҡын юҡ итә, ауылдағы 1000 кеше, шул иҫәптән ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар үлтерелә, терелəй яндырыла. Был вәхшилеккә яуап итеп башҡорттар рус ауылдарына һөжүм итә башлай. Хөкүмәт указы буйынса (1736 йыл, 16 февраль) ихтилалдарҙа ҡатнашыусылар юҡ ителергә, улар яҡлылар һөргөнгә ебәрелергә тейеш була. 1736 йылдың көҙөндә ихтилал баҫтырыла. Тулы булмаған мәғлүмәттәр буйынса, баш күтәреүселәр 15 меңдән ашыу кешене юғалта.

1737 йылда ихтилал тергеҙелә һәм 1738 йылдың көҙөнә тиклем дауам итә. Уны баҫтырыу менән Ырымбур комиссияһы начальнигы В.Н. Татищев, генерал-майор Л.Я. Соймонов етәкселек итә. Ихтилалды баҫтырыуға 18 мең һалдат, драгун, казак ебәрелә.

Башҡорттар ҙур матди зыян күрә. 1739-1740 йылдарҙа ғына 725 ауыл яндырыла, тиҫтәләрсә баш мал ҡыуып алып кителә (Америка тарихсыһы Алтон С. Доннелли мәғлүмәттәре буйынса, 12283 ат, 6076 эре мал. "Завоевание Башкирии Россией в 1552-1740", Уфа, 1995, с.218). 1735-1740 йылдарҙағы ихтилал барышында башҡорттар 40-60 мең кешеһен юғалта (үлтерелəләр, язалаланлар, һөргөнгә оҙатылалар).

Ырымбур губернаторы вазифаһында бигерәк тә Неплюев үҙен йәнһеҙ хаким һәм ҡанэскес палач итеп күрһәтә. Ул башҡорт ихтилалдарын ҡанға батырып баҫтыра. 150 башҡорт старшинаһын алдап саҡырып алып, Яйыҡ йылғаһы ярында терелəй күмдерə. Был ҡот осҡос факттар башҡорт халҡына ҡарата ысын геноцидты, уның генофондын ҡырыуҙы раҫлай.

Ихтилалдарҙы ҡанға батырып баҫтырыуға ҡарамаҫтан, көтөүлектәренән, ерҙәренән яҙған башҡорттар, ерҙәрен һәм азатлығын кире ҡайтарырға тырышып, көрәште дауам итә. Батша властары башҡорттарҙы ергә аҫабалыҡ хоҡуғынан мәхрүм итеү һәм уларҙы крепостнойҙарға әйләндереп, христианлаштырыу планынан баш тартырға мәжбүр була.

Шул уҡ ваҡытта батша хөкүмәте башҡорт ерҙәрен колонизациялауҙы дауам итә. Ырымбур крайы Рәсәй империяһының башҡа өлкәләре кеүек үк, дөйөм системаға индерелә, ер биләүселек һәм агросәнәғәт колонизацияһы өсөн асыҡ була. Ырымбурҙы төҙөгәндән һуң башҡорт ерҙәрендә тиҫтәләрсә металлургия заводы ҡалҡып сыға. 1740-1760 йылдарҙа ғына Ырымбур губернаһында 34 тимер етештереү һәм баҡыр иретеү заводы барлыҡҡа килә.

***Әүжән-Петровский Үрге тимер етештереү заводы.*** П.И. Шувалов һәм К. Матвеев тарафынан 1753 йылда Берг-коллегия указы буйынса Әүжән йылғаһы буйында төҙөлә. Төҙөлөш өсөн ерҙәр Тамъян һәм Түңгәүер улысы башҡорттарынан 30 йылға оброкка алына. Ҙур территорияны ҡуртымға алған өсөн Шувалов йыл һайын 20 һум түләргә тейеш була. Заводтың бер домнаһы, 6 сүкеше һәм йөмшәйтеү фабрикаһы була. Уның ҡарамағында 50 йортта эшселәр йәшәй. 1760 йылда Е.Н. Демидовҡа һатыла (хәҙер Белорет районы территорияһы).

***Әүжән-Петровский Түбәнге тимер етештереү заводы*** Үргеһенә ярҙамсы итеп 1756 йылда төҙөлә. Алты йөмшәйтеү сүкеше була, 1760 йылда шулай уҡ Е.Н. Демидов һатып ала. Ике завод ҡарамағында 307 крепостной оҫта һәм эшсе була. Уларға шулай уҡ 3708 дәүләт крәҫтиәне беркетелә (хәҙерге Белорет районы территорияһы).

***Архангел (Шаран) баҡыр иретеү заводы.*** 1754 йылда Ырымбур губерна канцелярияһы менән контракт буйынса Г.С. Красильников төҙөй. Завод өсөн ерҙәр Ҡыр-Йылан улысы башҡорттарынан оброкка алына. Заводтың 4 иретеү мейесе һәм 2 горны була (хәҙер Шаран районы территорияһында).

***Архангел баҡыр иретеү заводын*** 1753-1754 йылдарҙа Ырымбур губерна канцелярияһының Берг-коллегия раҫлаған указы буйынса Аҫҡын йылғаһында И. Б. Твердышев менән И.С. Мясников төҙөй. Завод өсөн ер Төрөш улысы башҡорттарынан һатып алына. Дүрт иретеү мейесе була, завод ҡарамағындағы 130 йортта крепостной крәҫтиәндәр йәшәй (хәҙер Архангел районы территорияһы).

***Белорет тимер етештереү заводын*** 1759 йылда И.Б. Твердышев менән И.С. Мясников Ҡатай улысы ерҙәрендә Тирлән йылғаһында төҙөй башлай, әммә тамамлай алмай. 1762 йылда завод Ағиҙел йылғаһы буйындағы яңы урынға күсерелә һәм Ҡатай улысы башҡорттарынан һатып алынған ерҙә төҙөлә. Бер домна мейесе һәм 6 (һынараҡ 14) йөмшәйтеү сүкеше була. П. Красильниковҡа һатыла (хәҙер Белорет ҡалаһы).

***Благовещен баҡыр иретеү заводы*** Берг-коллегия указы буйынса 1755 йылда Өшкәлә йылғаһы буйында М.С. Мясников тарафынан төҙөлә. Завод өсөн ер Күл Иле (Күл)-Мең улысы башҡорттарынан һәм кенәз В.Ураҡовтан һатып алына. 4 иретеү мейесе (1768 йылда - 8) һәм ике горны була. Тәүҙә завод өсөн 108 кеше һатып алына, 1758 йылда - тағы ла 100. 1761 йылда һатып алынған крәҫтиәндәр һаны 795 кешегә етә (хәҙер Благовещен ҡалаһы биләмәһе).

***Богоявленский баҡыр иретеү заводы*** Берг-коллегия указы буйынса 1751 йылда И.Б. Твердышев һәм И.С. Мясников тарафынан Көгөш (Тоҙлойылға, Усолка) йылғаһы буйында төҙөлә һәм 1752 йылда ҡулланыла башлай. Завод өсөн ерҙәр башҡорттарҙан һәм Табын казактарынан йылына 25 һум түләү шарты менән 50 йылға ҡуртымға алына. Заводҡа 200 крәҫтиән ихатаһы һатып алына (хәҙер Ғафури районы).

***Верхотор баҡыр иретеү заводы*** 1759 йылда Тор йылғаһы буйында И.Б. Твердышев һәм И.С. Мясников тарафынан төҙөлә. Завод өсөн ер Тамъян һәм Юрматы улыстары башҡорттарынан һатып алына. Өс иретеү мейесе, 3 горн, 3 йөмшәйтеү сүкеше була (хәҙер Ишембай районы территорияһы).

***Вознесенск баҡыр иретеү заводы*** Берг-коллегия указына ярашлы 1755 йылда Ырғыҙлы йылғаһы буйында К.Е. Сиверс тарафынан төҙөлә. 1756 йылда файҙаланыла башлай. Завод өсөн ер Бөрйән улысы башҡорттарынан һатып алына. Унда 450 рудасы йәшәй башлай. Заводтың 7 иретеү мейесе, 3 горны, 1 йөмшәйтеү сүкеше була. Заводҡа Ҡазан өйәҙенең Нуғай һәм Зюри (Сыуаш) даруғаларынан 1000 дәүләт крәҫтиәне беркетелә (завод ҡарамағында эшселәрҙең 150 ихатаһы иҫәпләнә). 1765 йылда ҡаҙнаға алына. 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡытында емерелә (Хәҙерге Бөрйән районы территорияһы).

***Воскресенск баҡыр иретеү заводы*** 1737 йылда Ырымбур экспедицияһы начальнигы И.К. Кирилов тарафынан Табын эргәһендә ҡаҙна заводы булараҡ төҙөлә. 30-сы йылдарҙағы башҡорт ихтилалдары ваҡытында емерелә. 1743 йылда заводсылар И.Б. Твердышев менән И.С. Мясников уны ҡабаттан, әммә Тамъян һәм Бошман-Ҡыпсаҡ улыстары башҡорттары ерендә, Тор йылғаһында ҡабаттан тергеҙә. Ете иретеү мейесе була. Завод ҡарамағына 320 ихата һатып алына һәм теркәлгән крәҫтиән инә (Хәҙер Мәләүез районы территорияһы).

***Златоуст (Косотур) тимер етештереү һәм баҡыр иретеү заводы*** Мосоловтар тарафынан Ырымбур губерна канцелярияһының 1751 йылдағы контракты һәм Берг-коллегияһының 1760 йылдағы указына ярашлы Әй йылғаһы буйында төҙөлә. Завод өсөн ер Себер даруғаһы Әйле улысы башҡорттарынан һатып алына. Бер домнаһы, 6 йөмшәйтеү сүкеше, 6 баҡыр иретеү мейесе була. Завод ҡарамағына 300 һатып алынған һәм 60 теркәлгән крәҫтиән инә. 1769 йылда завод Л.И. Лугинға һатыла (Хәҙер Силәбе өлкәһенең Златоуст ҡалаһы).

***Ирлән баҡыр иретеү заводы*** Берг-коллегия указына ярашлы 1761 йылда Ирлән йылғаһы буйында П.И. Рычков тарафынан төҙөлә. Завод өсөн ер яһаҡлы яңы керәшендәрҙән һатып алына. Уның ҡарамағында 53 һатып алынған крепостной крәҫтиән була. 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы барышында емерелә.

***Иштерәк баҡыр иретеү заводын*** 1751 йылда С.Е. Иноземцев һалдыра. Ер 1750 йылда Ирәкте улысы башҡорттарынан 1750 йылда оброкка алына. 50 йыл ҡуртым өсөн Иноземцев башҡорттарға ни бары 120 һум аҡса түләй. Заводтың ике иретеү мейесе була. Тайыш заводы өсөн ярҙамсы булып тора, уны ҡабаттан ҡойоу өсөн ҡара баҡыр менән тәьмин итә (Хәҙер Татарстандың Мөслим районы).

***Ҡағы тимер етештереү заводы*** (сүкешле) 1769 йылда Е. Н. Демидов тарафынан Берг-коллегия указына ярашлы Ҡағы йылғаһы буйында төҙөлә. Әүжән-Петровск заводынан килтерелгән суйынды ҡайтанан ҡойоу өсөн ҡулланыла. Завод өсөн ер Тамъян һәм Түңгәүер улысы башҡорттарынан оброкка алына. Сүкешкә эйә була (Хәҙер Белорет районы территорияһы).

***Кананикольск тимер иретеү заводы*** заводсы Мосоловтар тарафынан Ырымбур губерна канцелярияһы менән контракт нигеҙендә Ҡана йылғаһы буйында төҙөлә. Завод өсөн ер тәүҙә оброкка алынһа, һуңынан Бөрйән улысы башҡорттарынан һатып алына. 4 иретеү мейесенә, 2 горнға эйә була. 1761 йылда 4 иретеү мейесе ҡоролмаһы төҙөлә башлай. Завод ҡарамағында 314 оҫта һәм эшсе иҫәпләнә. Хәҙерге ваҡытта завод урынында Кананикольское ауылы урынлашҡан (Йылайыр районы).

***Кәҫле тимер иретеү заводы.*** Ҡоролма П.М. Репнин һәм Я.Р. Коробков тарафынан Кәҫле һәм Ҡыҙылташ күлдәрендә Себер даруғаһы Исәт провинцияһының Балаҡатай, Мәкәтин (Бәкәтин) улыстары башҡорттары ерҙәрендә төҙөлә башлай. Заводсылар һәм Н.Н. Демидов араһында рудниктар арҡаһында килеп тыуған суд эше һөҙөмтәһендә төҙөлөп бөтмәгән бина Демидовҡа һатыла. 1 домнаһы, 11 йөмшәйтеү сүкеше була. 1756 йылда заводҡа Краснослобода өйәҙе крәҫтиәндәре теркәлә (Хәҙер завод урынында Силәбе өлкәһенең Кәҫле ҡалаһы урынлашҡан).

***Иван-Ҡатау тимер етештереү һәм баҡыр иретеү заводын*** И.С. Мясников менән И.Б. Твердышев Берг-коллегия указы буйынса 1755 йылда Ҡатай (Ҡатау) йылғаһы буйында тимер етештереү заводы булараҡ төҙөй. 1762 йылда уға баҡыр иретеү мейесе эшләнә. Завод Трухмен улысы башҡорттары ерҙәрендә урынлашҡан, унда 370 ихата һатып алынған крәҫтиән иҫәпләнә (Хәҙер Силәбе өлкәһенең Иван-Ҡатау ҡалаһы).

**Ғизетдин ИРГӘЛИН,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Бар нәмәне ыңғай итеп күҙ алдына килтереүҙең көсө

Грек натурфилософтары илдәренең урмандары һәм йылғаларынан илһам алып, тәбиғәт характеристикаларын кеше тормошона күсергән. Шуға ла уларҙың архитектураларының һәм хатта демократияларының нигеҙендә тәбиғәт ята.

Гректар билдәләүенсә, мөһим мәсьәләләрҙе хәл иткәндә иҫ киткес шәп уй тик генийҙарға ғына килмәй, был сифатты бар кеше лә үҙендә барлыҡҡа килтерә ала. Был илдә кешеләр төрлө дәүләт кимәлендәге мәсьәләләр хәл ителгән йыйылыштарҙа ҡатнашырға тырышҡан, тик унан алда мотлаҡ медитацияға ваҡыт бүлгән һәм һөҙөмтәлә гениаль, йәғни, ҡүктәр тарафынан илһамландырылған фекерҙәр әйткән.

Нимәнелер хәл итер алдынан тыныс ҡына уйланып ултырыу - ваҡытты бушҡа уҙғарыу түгел. Был осраҡта һеҙ тышҡы донъяға иғтибар итмәй, эске донъяғыҙҙы тыңлаясаҡһығыҙ. Был эске донъя - ижади хыял , илһам, балҡыш сығанағы, сөнки ул сикһеҙ аңға тәҙрә ролен үтәй.

Беҙ Барлыҡҡа килтереүсенең рухи донъяһын ижади өлкә тип атайбыҙ. Ижади өлкәгә үтеп инеү өсөн түбәндәге күнекмәне яһағыҙ:

1. Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ.

2. Күҙ алдына Юғары Минегеҙҙең яҡтылыҡ менән сорналған образын килтерегеҙ.

3. Уға: "Мин һине яратам", - тип әйтегеҙ.

4. Үҙегеҙҙең тойғоларығыҙ тураһында уйланығыҙ.

5. "Мин тулы аңымда" тип әйтеп, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Был күнегеүҙе эшләгәндә нимә тойҙоғоҙ? Күп кеше был һорауға шулай тип яуап бирә:

- Мин үҙемде стрестарҙан яҡлаулы итеп тойҙом.

- Мин үҙемде Аллаға яҡынырак итеп тойҙом.

- Был азатлыҡ тойғоһо ине.

- Был һүҙҙәр менән аңлатып булмаған күңел тыныслығы килде.

- Мин бөтә ҡаршылыҡтарҙы ла еңеп сыға алырымды тойҙом.

Уларҙың фекерҙәре уртаҡ. Тимәк, эске донъяға инеп, һеҙ тик ыңғай тойғолар ғына кисерәсәкһегеҙ, ул һеҙҙең сәләмәтлегегеҙгә, етеш йәшәүегеҙгә, аңығыҙға яҡшы тойғолар кисерергә булышлыҡ итәсәк.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 11 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-18". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайна Лилит". [12+]
23.35 Футбол. Словения - Россия. Отборочный матч Чемпионата мира-2022. Прямая трансляция из Марибора.
1.45 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.20 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "С праздником, Республика!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**8.45, 11.45, 14.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**9.15 Д/ф "Первая Республика". [12+]**
**10.00 "Башкортостан - Родина моя". [6+]**
**10.45 "Гора новостей". [6+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**12.15 Гала-концерт детского телевизионного конкурса "Байыҡ-2021". [6+]**
**15.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Республики.**
**17.00 Д/ф "Мустай Карим". [12+]**
**17.45 Д/ф "Караван-сарай". [6+]**
**19.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.15 "Золотые страницы башкирской классики". Концерт НСО РБ. [12+]**
**20.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**21.00 Д/ф "Сила родного языка". [6+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.00 Х/ф "Уильям. Последний неандерталец". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Кодаса или Полснохи меньшему брату". [12+]**
**5.00 Тормош. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 12 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-18". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайна Лилит". [12+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу. [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Хазина о хазине". [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) -"Ак Барс" (Казань). КХЛ.**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Королева Мария". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 "Спектакль "Заблудшая". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 13 ОКТЯБРЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 1.10 Т/с "Тайны следствия-18". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайна Лилит". [12+]
22.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.55 Т/с "Личное дело". [16+]
3.52 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Гангста love". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**4.30 "Бай". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 14 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 1.10 Т/с "Тайны следствия-18". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайна Лилит". [12+]
22.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.55 Т/с "Личное дело". [16+]
3.52 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**19.45 "Елкән". [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Битва за Скайарк". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 15 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-18". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Большой юбилейный концерт Николая Баскова.
23.40 Веселья час. [16+]
1.30 Х/ф "Мир для двоих". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Д/ф "Рассекреченные материалы. Первая атомная бомба". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 22.00 Автограф. [12+]**
**14.00 Учим башкирский язык. [0+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**17.15 Учим башкирский язык. [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.50 Хоккей. "Автомобилист" (Екатеринбург) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**23.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Х/ф "Пробуждение". [0+]**
**2.15 Спектакль "Половецкая мистерия". [12+]**
**4.00 Х/ф "Битва за Скайарк". [16+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 16 ОКТЯБРЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Т/с "Только ты". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Директор по счастью". [12+]
1.10 Х/ф "Клуб обманутых жен". [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Д/ф "Сила родного языка". [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30, 4.15 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени.**
**17.00 Концерт Рафиса Сирусина. [12+]**
**19.00, 4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Шесть дней, семь ночей". [0+]**
**2.30 Спектакль "Операция". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 17 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.25, 3.20 Х/ф "Любовь и Роман". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Большая переделка.
12.00 Парад юмора. [16+]
13.40 Т/с "Только ты". [16+]
18.00 Дуэты. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Звезды светят всем". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 "Ете егет". [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 "Хазина о хазине". [6+]**
**15.45 "Дорога к храму". [0+]**
**16.15 Историческая среда. [12+]**
**16.50 Хоккей. "Металлург" (Магнитогорск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**19.30 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**20.15 Әлләсе… [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 4.00 Х/ф "Цвет денег". [16+]**
**1.30 Спектакль "Скупой". [12+]**
**3.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12-13 октябрь Фидан Ғафаровтың** концерты. 12+
**14 октябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, А. Ишбулдина). 12+
**15 октябрь "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме…"** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 12+
**16 октябрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+
**17 октябрь "Джут (һуңғы йәйләү)"** (О. Жанайдаров), драма. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**13 октябрь "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 14+
**14 октябрь "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**11 октябрь "Приключения доктора Айболита и его друзей"** (К. Чуковский). 11.00, 13.00 0+
**"Етем төлкө"** (О. Штырляева). 16.00 0+
**14 октябрь "Золотой волос"** (М. Супонин). 19.00 0+
**16 октябрь "Муха-цокотуха"** (И. Романов). 11.00, 13.00 0+
**17 октябрь "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен). 11.00, 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**15 октябрь** БР-ҙың атҡаҙанған артисы **Ләйсән Кәримованың юбилей кисәһе.** 12+
**16 октябрь "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 16+
**17 октябрь "Алдар и царевна Несмеяна"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 12.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**14-15 октябрь Премьера! "Кисер мине, әсәй!"** (Р. Батулла), моңһоу комедия. 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**12 октябрь "Приключения лесного эха"**, әкиәт. 11.00 6+
**"Йәнкиҫәк"** (Т. Килмөхәмәтов). 16.00 12+
**13 октябрь "Йәнкиҫәк"** (Т. Килмөхәмәтов). 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1443 һижри йыл.

| Октябрь (Рәбиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (5) дүшәмбе | 6:09 | 7:39 | 13:30 | 16:55 | 18:25 | 19:55 |
| 12 (6) шишәмбе | 6:11 | 7:41 | 13:30 | 16:53 | 18:23 | 19:53 |
| 13 (7) шаршамбы | 6:13 | 7:43 | 13:30 | 16:50 | 18:20 | 19:50 |
| 14 (8) кесе йома | 6:15 | 7:45 | 13:30 | 16:48 | 18:18 | 19:48 |
| 15 (9) йома | 6:17 | 7:47 | 13:30 | 16:45 | 18:15 | 19:45 |
| 16 (10) шәмбе | 6:19 | 7:49 | 13:30 | 16:43 | 18:13 | 19:43 |
| 17 (11) йәкшәмбе | 6:21 | 7:51 | 13:30 | 16:41 | 18:11 | 19:41 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ Күптән түгел ғалимдар картуф крахмалы ҡанды туҡтатҡанда иҫ киткес яҡшы сара булыуын асыҡлаған. Уны ҡанһырап торған яраға һипһәң, ҡан шунда уҡ туҡтай икән.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТОСТАН ЙӘМЕН, ҠОТОН ҺАҠЛАУ МИНЕҢ, ҺИНЕҢ ИЗГЕ БУРЫСЫМ!




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**40-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Синод. Иҡсанов. Наган. Атака. Яҫтыҡ. Вәлитов. Буддист. Армыт. Орсоҡ. Колье. Аид. Ҡашҡа. Осло. Рота. Йоҙаҡ. Лиана. Суҡ. Луганск. Алмас. Ғарипов. Йәрәхәт.

**Вертикаль буйынса:** Бөркөтлө. Абдуллина. Интеграл. Ишәк. Урағай. Автор. Сәсән. Аласа. Нәтижә. Грибоедов. Скудо. Диван. Вәт. Ява. Ҡойҡа. Роза. Ысыҡ. Ҡот. Аҫҡыс.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# КРАХМАЛ ФАЙҘАЛЫМЫ?



**Һәр хужабикәнең ҡул аҫтында, моғайын да, картуф крахмалы барҙыр. Шулай ул ситтә генә бер мөйөштә тора, сөнки һирәк ҡулланыла. Ә бит крахмал бик файҙалы продукт.**

Күптән түгел ғалимдар картуф крахмалы ҡанды туҡтатҡанда иҫ киткес яҡшы сара булыуын асыҡлаған. Уны ҡанһырап торған яраға һипһәң, ҡан шунда уҡ туҡтай икән. Әйтергә кәрәк, яраны ғәҙәти ысул менән бәйләп ҡуйғанда, ул әле 6-7 минут тирәһе ҡанһырап тора. Бынан тыш картуф яраларҙы тиҙерәк һәм эҙһеҙ уңалтырға ярҙам итә. Ә халыҡ дауаһында крахмалды ҡабул итеп дауаланыу серҙәре лә бар, иң билдәлеһе - "күк йод" - крахмал менән йод ҡатышмаһы.

● Ангина булғанда ҡайнатылған йылы һыуға ярты балғалаҡ крахмалды иҙеп, 5 процентлы спиртлы йод иретмәһен 3-5 тамсы тамыҙып болғарға. Шуның менән көнөнә 3-5 тапҡыр тамаҡты сайҡатырға.

● Ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарынан көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда 1-әр балғалаҡ картуф крахмалы ашап, аҙағынан стакандың өстән бер өлөшө тирәһе ҡайнатылған һыу эсергә.

● Тире һыҙырылып, елһенеп торғанда, пигмент таптарын һәм һытҡыларҙы дауалау өсөн крахмалды ауыртҡан ергә һибәләр, йәки иплэп кенә һөртәләр.

● Ҡулдағы һырҙарҙы шымартыу һәм тиренең ҡатып киткән урындарын йомшартыу өсөн крахмал ванналары эшләргә: 1 ҡалаҡ крахмалды 1 литр ҡайнар һыуға һалырға, шуға йылы сағында ҡулдарҙы тығып ултырырға.

● Һалҡын тейгәндә, йүтәлләгәндә һәм танау тонғанда ярты ҡалаҡ крахмал, 1 ҡалаҡ бал, 2 яңы йомортҡа һарыһы һәм 2 ҡалаҡ аҡ майҙы бергә ҡушып, бер төрлө массаға әүерелгәнсе болғарға. Дауаны көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда ярты ҡалаҡ ҡабул итергә.

● Өлкәндәрҙең эсе киткәндә ярты стакан ҡайнатып, бүлмә температураһына тиклем һыуытылған һыуға 1 ҡалаҡ картуф крахмалын ҡушып, болғап торған арала 5 процентлы спиртлы йод иртмәһенән 5 тамсы тамыҙырға. Һөҙөмтәлә ҡатышма күк төҫ ала. Дауаны шунда уҡ бөтөргәнсе эсергә, тәүге тапҡырҙан уҡ ярҙам итмәгән осраҡта бер аҙҙан һуң тағы ла ҡабатларға була.

БАҠСА



# УҢЫШЫҢДЫ ЯҠШЫ ҺАҠЛА!

● Кишер яҡшы һаҡланһын өсөн тәү сиратта уны мотлаҡ ҡояшлы көндә ҡаҙып алырға кәрәк. Йәшелсәне ҡаҙып алғас та яҡшылап таҙартып, йыуып, шунда уҡ һабағын һәм осон ғына ҡырҡып ташларға. Шуға иғтибар итегеҙ: һабаҡтарын үткер бысаҡ менән кишерҙең итенә тиклем ҡырҡырға. Шунан ҡояшта яҡшылап киптерергә лә, полиэтилен муҡсаларға һалырға кәрәк. Кишерҙе һалғас, муҡса ауыҙын ныҡлап бәйләйбеҙ һәм төйөнөнә ҡаршы икенсе муҡсаны кейҙереп, шулай уҡ ныҡлы итеп бәйләп ҡуябыҙ. Тишек тишергә кәрәкмәй. Ошо рәүешле йыйналған кишерҙе ҡаптарға йәки ағас йәшниктәргә һалып һаҡларға. Был рәүешле ҡышҡыға әҙерләнгән кишер серемәй.

● Йәш һәм еүеш үләнде яндырыуы еңел түгел. Ҡайһы берәүҙәр уны серетмәгә һала. Былай итергә теләмәгәндәр өсөн бик шәп ысул бар. Ябай кирбесте 3-4 сәғәткә кәрәсингә тығып ҡуябыҙ. Шунан ҡағыҙға урап, яңы йолҡолған үлән, сүпсар уртаһына һалырға һәм кирбескә ут төртөргә.

● Һарымһаҡ киләһе йылға тиклем яҡшы һаҡланһын өсөн ҡатырға ҡап һәм тоҙ кәрәк. Ҡап төбөнә күп итмәй генә тоҙ һибергә, шунан һарымһаҡты теҙеп һалырға ла, өҫтөнән тағы ла бер ҡат тоҙ һибеп, үҫемлекте тағы теҙергә. Һарымһаҡтың һуңғы ҡатын да тоҙ менән һибеп ҡаплап, ҡаптың ауыҙын ябып, уңайлы ергә ҡуйырға. Ғәҙәттә, аш бүлмәһендә өҫтәл аҫтына урынлаштыралар. Һарымһаҡ был рәүешле киләһе уңышҡа тиклем һаҡланырға мөмкин, иң мөһиме, ул тулыһынса тоҙ менән ҡапланған булһын.

● Файҙалы оҫҡон йыуаһын ҡыш дауамында ашарға була. Ул һыуыҡҡа бик бирешеп бармай. Оҫҡон йыуаһын ҡаҙып алғас, уны бер тәүлек тирәһе ҡояш төшмәгән ерҙә киптерергә. Шунан 10-ар литрлыҡ биҙрәләр төбөнә эре ҡом тултырып, 1-әр стакан һыу ҡойорға һәм оҫҡондо тамыры менән аҫҡа ҡарай ҡаҙап сығырға. Был биҙрәләрҙе верандала урынлаштырырға ла мөмкин һәм һауа торошо хатта -20, -25 градусҡа тиклем һыуытҡанда ла йыуаға бер ни булмай. Һуңынан уны кәрәк саҡта 1-2 көн алдан иретеп ҡуйып тотонорға була. Шуға биҙрәләрҙе йылы урынға күсереп йөрөргә лә кәрәкмәй. Шулай уҡ оҫҡон йыуаһының башын һәм йәшел һабаҡтарын айырып, туңдырғысҡа тығып ҡуйырға ла була.

● Сөгөлдөрҙө берәмләп картуф өҫтөнә бер ҡат итеп теҙеп һалғанда ул яҡшы һаҡлана. Шулай уҡ ҡыҙҙырылған ҡом менән онтаҡланған аҡбур ҡатышмаһы ла сөгөлдөрҙө оҙаҡ һаҡларға ярҙам итә, әммә был осраҡта пластик һауыттар ҡулланмаҫҡа, ҡағыҙ ҡаптар, йәшниктәр йәки балсыҡ һауыттар менән эш итергә кәрәк.

● Кәбеҫтә баштары бер-берeһенә тейеп ятырға тейеш түгел, уларҙың араһы, исмаһам, 1-әр сантиметр булырға тейеш. Әлбиттә, иң яҡшыһы - күсән үҙәгенән бәйләп, элеп ҡуйыу. Шулай уҡ фатирҙа йәшәүселәр һәр кәбеҫтәне аш пленкаһы менән урап, балконға сығара ала.

● Ҡабаҡтың тик ҡалын ҡабыҡлыһын ғына оҙаҡ һаҡлағыҙ. Быны билдәләр өсөн үҫтергән сорт тураһында мәғлүмәтте уҡығыҙ. Һаҡларға һалған ҡабаҡтарҙың һабағын оҙон итеп, 20 сантиметрға тиклем, ҡалдырырға. Уңайлы температура 18 градус, шуға һыуытҡысҡа тығыу кәңәш ителмәй.

● Помидорҙы оҙаҡ һаҡлау өсөн халыҡ былай кәңәш итә: йомортҡа ағы, тоҙ һәм желатиндан торған ҡатышма әҙерләп, шуға һәр помидорҙы тығып алырға һәм киптерергә. Ошо рәүешле йәшелсә ярты йылға тиклем яҡшы һаҡлана.

● Ә бына таш ҡабаҡ һәм баклажандарҙы һыуыҡ төшмәҫ борон йыйып алыу мөһим. Таш ҡабаҡ үҙе 15-тән 45 сантиметрға тиклем ҙурлыҡта, ә һабағы 5 сантиметрҙан кәм булмаҫҡа тейеш. Иҫке колготкаларға берәр йәшелсәне тығып, ҡоро урынға элеп ҡуйырға кәрәк. Шулай уҡ һәр таш ҡабаҡты бер нисә ҡат махсус аш ҡағыҙына төрөп, карауат аҫтына тығып ҡуйырға ла була.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# САЛАУАТТАР КИЛДЕ

**Ошо көндәрҙә М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры сәхнәһендә Салауат башҡорт драма театры сығыш яһаны. Улар Өфө тамашасыһына тәүге тапҡыр Сәрүәр Суринаның пьесаһы буйынса "Абау, димсе килә!" музыкаль комедияһын күрһәтте.**

Комедияның төп геройы - димсе Әминә үҙенең матурлығын, ҡатын-ҡыҙ аҡылын һәм тормош һөйөүсәнлеген юғалтмаған. Ул тол ҡалған бай ир Рифтең ҡыҙына кейәү эҙләй. Йорт хужаһының ҡыҙҙары, кейәүҙәр һәм бөтә геройҙар өсөн дә мөхәббәт төйәгенә әйләнгән ауылдың халҡы ла мауыҡтырғыс ваҡиғалар өйөрмәһендә ҡала. Театрҙың барлыҡ артистары ла ҡатнашҡан спектаклдән тамашасылар шуға инанып сыҡты: иң мөһиме - мөмкинлегенде ҡулдан ысҡындырмау һәм мажараларға, хис-тойғоларға ҡаршы аҙымды ваҡытында яһау.

Спектаклдең ҡуйыусы режиссеры Зиннур Сөләймәнов, ҡуйыусы рәссамы - Рөстәм Баймөхәмәтов, композиторы - Илсаф Вәдүтов, балетмейстер - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сулпан Асҡарова.

# СИБАЙҘАРҘЫ "ШАХТЁР" КӨТӘ...

**А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры тамашасылары өсөн һөйөнөслө яңылыҡ - тиҙҙән сәхнәгә "Шахтёр" спектакле сығарыласаҡ.**



Ҡуйыусы режиссер, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Дамир Ғәлимовҡа драманы сәхнәгә сығарыу өсөн күп көс һалырға тура килә. Режиссер әйтеүенсә, "Шахтёр" - тәү ҡарауға ябай күренһә лә, бик ҡатмарлы һәм үҙенсәлекле әҫәр. Хәүефле, ләкин иң кәрәкле һөнәрҙәр эйәһенең - шахтерҙың ғаилә мөнәсәбәттәре хаҡында булыр спектакль. Уйламай әйтелгән һүҙҙәр һәм ғәмәлдәр бөтә донъяны емерергә, бәхетте юҡҡа сығарырға мөмкин һәм был тамашасыларға бер һабаҡ булып яңғырар. Әҫәрҙең авторы, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты Баныу Ҡаһарманова үҙе пьеса тураһында былай ти: "Һәр әҫәрем йөрәк аша үтә. Әммә "Шахтёр" ижадымда айырым урын алып тора. Пьеса ябай шахтёр ғаиләһе тураһында. Ләкин ир менән ҡатындың мөнәсәбәттәре һәр ғаиләгә ҡағылған кеүек - ваҡиғаларҙа тормош сағылған. Мин һәр геройымды, улар ниндәй булһа ла, яратам. Тамашасылар ҙа уларҙы аңлар, үҙ итер, тип ышанам".

Ғәҙәти булмаған сценография буйынса театрҙың яңы баш рәссамы В.Б.Яшкулов эшләй. Йәш композитор Илсаф Вәдүтовтан үҙенсәлекле музыка көтөлә. Ролдәрҙе Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмилә Хоҙайғолова, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Венер Сөнәғәтов, артистар Зәлиә Хафизова, Салауат Вәлиев, Залина Усманова, Юлиә Мөхәмәтйәнова, Айбулат Ғүмәров башҡарасаҡ.

# ЯҢЫ ФИЛЬМ...




**Айнур Асҡаровтың "Йыл ғаиләһе" фильмы Рәсәй кинотеатрҙарында бер аҙна күрһәтелеү осоронда 1 млн һумдан артыҡ аҡса йыйған. Был хаҡта Кинозалдарҙа фильмдар күрһәтеү тураһында берҙәм федераль белешмә системаһына һылтанма менән Ә. Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы хәбәр итте. Фильм әле лә прокатта.**

Рәхмәтуллиндарҙың ҙур ғаиләһе - ябай, ҡыҙыҡлы, шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙәге меңәрләгән башҡа ғаилә кеүек. Уларҙың иҫке генә автомобиле бар, маҡсаттары - конкурста еңеп, аҡса отоу. Табыш артынан ҡыуып, улар бер-берендe хөрмәт итеү, йылы мөнәсәбәттәр, кешелектең төп ҡиммәттәре тураһында онота.

"Фильмды республиканың күркәм урындарында - Өфөлә, Әбйәлил һәм Белорет районДарында төшөргәндәр. Айнур Асҡаров менән "Башҡортостан" киностудияһы фильмдар өсөн урындарҙы республикабыҙҙа эҙләй, шуның өсөн уларға рәхмәтлемен. Актерҙар ҙа - үҙебеҙҙекеләр. Башҡортостандың халыҡ артисы Алмас Әмиров фильмда ғаилә башлығын уйнай. Уның геройы Алмас Рәхмәтуллинды уңышһыҙлыҡтар һағалап торһа ла, ул ғаиләһен ныҡ ярата. Балаларҙы ла беҙҙең уҡыусылар һәм студенттар башҡарҙы. Үҙебеҙҙең, Башҡортостандың, сағыу һәм заманса фильмотекаһы формалашты: "Өс таған, "Һеңлекәш", "Өфөнән - һөйөү менән" һәм башҡалар. Хәҙер бына "Йыл ғаиләһе" лә өҫтәлде. Бөтәбеҙҙе лә ҡотлайым һәм авторҙарға артабан да ижади уңыштар теләйем!" - тип яҙғайны республика Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәрҙә.

Фильмды "Асҡарфильм" компанияһы республиканың Мәғариф һәм фән министрлығы, Башҡортостан киностудияһы заказы буйынса Граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды һәм Рәсәй кинематографистар союзының төбәк бүлексәһе ярҙамында төшөргән. Рус телендә комедиялы фильм-сәйәхәт жанрында төшөрөлгән фильмды Рәсәйҙең 250 кинотеатрында ҡарарға мөмкин.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӘХЕТЕҢ БУЛМАҺА,

## тапҡан алтының да баҡырға әйләнә

Милләт намыҫы - ул ҡороп ҡуйылған мылтыҡ менән бер.

**(Ален).**

Яңғыҙың ғына аҡыллы булып ултырғансы, барыһы менән бергә хаталаныуың яҡшыраҡ.

**(Марсель Ашар).**

Яҡшы итеп эшләү мотлаҡ түгел, эшләгәнеңде яҡшы итеп һөйләп биреү мотлаҡ.

**(Тристан Бернар).**

Әгәр ҙә кешеләр араһында һаҡ ҡыланыусылар күберәк, тип иҫәпләйһең икән, быға аптырама, сөнки һаҡ ҡыланмағандар күптән үлеп бөткән.

**(Эшли Брильянт).**

Үҙ күләгәңдән ҡурҡыу кәрәк, сөнки күләгәң ҡайһы яҡта булырын бер ваҡытта ла алдан белеп булмай.

**(Веслав Брудзинский).**

Бер кемдән бер ни ҙә талап итмәүсегә... барыһы ла ярҙам итергә әҙер.

**(Кароль Бунш).**

Бөйөк кешеләр ике тапҡыр үлә: тәүҙә кеше булараҡ, аҙаҡ... бөйөк булараҡ.

**(Поль Валери).**

Беҙ ҡалай үҙебеҙ тураһында аҙ беләбеҙ! Шуныһы яҡшы: башҡалар беҙҙең турала тағы ла аҙыраҡ белә.

**(Януш Васильковский).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер суфый стенала эленеп торған буш моҡсайҙы күреп ҡалған да, аптырашынан бот сабып: "Бары тик моҡсайҙа ғына мәкер булмай. Унда донъя бәләләренән дарыу ғына бар! Ул хәйерселәр батшалығы!" - тип белдергән. Уға башҡа суфыйҙар ҙа ҡушылған һәм көлә-илай буш моҡсайҙы маҡтарға тотонған.**

**- Ниңә ул бушлыҡты маҡтарға һуң? - тип һораған суфыйҙарҙың был ҡылығын нимәгә юрарға белмәгән үткенсе бер кеше.**

**- Һиңә бында урын юҡ! - тигән уға суфыйҙар. - Сөнки һин бары тик ҡул менән тотоп ҡарап була торған нәмәне генә күрәһең. Беҙҙе аңлар өсөн һиңә ғашиҡ булырға кәрәк, тик ғашиҡ кеше генә төнөн дә, көндөҙөн дә башҡаларҙың күҙенә күренмәгән һөйөүен күрә ала..."**

БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ

# "Л" МЕНӘН "Р" ЯРЫША



***Берҙән-бер көндө "Л" өнө менән "Р" өнө, кем шәберәк, тип һүҙ көрәштергән, ти.***

**"Л" өнө:**
Һаҡау-һаҡау күп һөйләй,
Түҙә алмам мин көлмәй:
Мине генә һөйә ул,
"Р" өнөн йүнләп белмәй.
**"Р" өнө:**
Һаҡауҙы һин үртәмә,
Мине белер иртәгә.
Бергә дәрес бирәйек -
Өйрәнгәнен күрәйек.
**"Р" өнө:** Йә, башла!
**"Л" өнө:** Ҡалышма!

***Улар артынан бөтә һаҡауҙар ҙа ҡабатлаған, ти.***

**"Л" өнө:**
Ялан
Төлкө
Болан
Йылан
Фил
Маймыл
Былбыл
Ҡыҙылтүш
Бытбылдыҡ
Төйләгән
Килештек!
Рәхәтләнеп.
**"Р" өнө:**
Урман
Бүре
Йомран
Бурһыҡ
Крокодил
Арыҫлан
Ҡарлуғас
Сыйырсыҡ
Торна
Бөркөт
Яраштыҡ!
Ярыштыҡ.
**Бергә:**
Икебеҙ ҙә бик һәйбәт,
Икебеҙ ҙә бик кәрәк!
Ҡабатлаһаң беҙҙе гел,
Өйрәнеүе еп-еңел!

***Шул көндән башлап донъяла бер генә һаҡау ҙа ҡалмаған, ти.***

**Сәрүәр СУРИНА.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
8 октябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 1204